ӘЛФИӘ БАҒМАНОВА

# *Мин Алланы данлайым*

ӨФӨ – 2019

## ХОҘАЙЫМДЫ ДАНЛАЙЫМ

Бисмилләһи, тип башлайым һүҙемде,
Бирһен Хоҙай һәр эштә түҙемде.
Уятты төндә мине Хоҙайым,
Шул көндән бирле Уны данлайым.

Ҡәләмеңде тот, шиғыр яҙҙырам,
Аҡ ҡағыҙға һин теркәп бар, балам.
Ҡалған ғүмереӊ хеҙмәт ит Миңә,
Иман һүҙҙәрен әйтәм тик һиңә.

Яҙып та ғына ҡағыҙың етмәҫ,
Һөйләп тә генә һүҙҙәрең бөтмәҫ.
Бирҙе Тәңрем илаһи көсөн,
Шиғыр юлдары тик уның өсөн.

Данлайым Һине, әйтәмен доға,
Маҡтау һүҙҙәрем тик булһын Уға.
Тирә-яғым бит Алланың эше,
Данлаһын Уны ерҙә һәр кеше.
Аҙаҡҡы һулыш килһә лә миңә,
Хоҙайым Тәңрем, сәләмем Һиңә!
Амин!

*26.10.05.*

лвыходные данные

## АЛЛА ҺҮҘЕ

Һеҙгә, дуҫтарым, әйтәм һүҙемде,
Гонаһты таҙарта тик Алла Һүҙе.
Ул Һүҙҙе Аллам Мәрйәмгә атҡан,
Хоҙай Тәңребеҙ йәслелә ятҡан.

Саф малай булып донъяға килгән,
Хаж ағасында ҡан түгеп үлгән.
Үҙ-үҙен ҡорбан иткән Хоҙайым,
Ҡабул ит Уны, һылыу-ағайым.

Һарыҡ ҡорбанын Ул алмаштырған,
2000 йыл элек Мәрйәмдән тыуған.
Әл-Мәсих Ғайса – Тәңрем исеме,
Үлеп терелде Ул һинең өсөн.

Әҙәм балаһы – гонаһ ҡоло ул,
Кисерә Ғайса, Алла ҡоло бул.
Ғайсаның изге ҡаны таҙарта,
Гонаһың бөтә, изгелек тарата.

Йәннәт ишеге һиңә асыла,
Һуңламай һин кил Ғайса ҡаршына.
Ҡабул иткәнгә Изге рух бирә,
Мәңгелек тормош алдыңа килә.



Тәүрәт һәм Зәбүр тик Уны маҡтай,
Ҡөрьәндә сүрә тик Уны данлай.
Инжил Алланың һүҙе турында,
Иман нуры балҡый, уҡы һин унда.

Китапта һүҙҙәр йылғалай аға,
Тере һыу һиңә, иманлы бала.
Иманға килһәң, һин терелерһең,
Ҡиәмәт көнөн үҙең күрерһең.

Хөкөм Батшаһы, Хоҙайҙың Һүҙе,
Ике китапты тоталыр Үҙе.
Исемеңде Ул ҡан менән яҙыр,
“Мәңгелек Тормош" китабында табыр.

"Һин минең балам – асыр ожмахты,
Хөкөм итмәйем, ҡаным таҙартты.
Минең ҡанымды ҡабул иткәндәр
Ҡиәмәт Көнөндә кисереләләр".

"Хөкөм Китабы" исемлеге ҙур,
Ғайсаны ҡабул итмәгәндәр – хур.
Изгелек һәм дин унда килтермәй,
Мал ҡорбаны ла ҡабул ителмәй.

Ғөрөф һәм йола – донъя михнәте,
Доға һәм намаҙ – кеше рәхмәте.
Алла ишетмәҫ, рухың булмаһа,
Йәннәтте асмаҫ, Унан тыумаһаң.

Гонаһһыҙ кеше юҡ был донъяла,
Ғайсаны ҡабул итһен һәр бала.
Әҙәм атанан килә был гонаһ,
Мәсих Ғайса бит изге бер Илаһ.

Ҡабул итегеҙ изге Хоҙайҙы,
Ярлыҡ итә ул ярлы һәм байҙы.
Гонаһты ялмап, Ул хажда үлгән,
Бөтә кеше өсөн үлеп терелгән.

Атаң һәм әсәң ҡотҡара алмаҫ,
Гонаһың өсөн Ул яуап алғас.
Һуңлама, улым, ҡыҙым, һин Уға,
Бөгөн килмәһәң, иртән һуң була.

Гонаһтарыңды теҙмә, Ул белә.
Ҡотҡарыусым тип, ҡабул ит кенә.
Хоҙайҙан тыуһаң, һин изге бала,
Ғайса, бел, һине етәкләп бара.



Доғаңды Тәңрең ишетә көн-төн,
Ураҙаң ҡабул ителә һәр көн.
Ярлыҡауҙы һин бушлай ҡабул ит,
Яманлыҡтарҙан, дуҫым, ары кит.

Иманлы бала, Атам, тиер Уға,
Дуҫым, ҡабул ит, бер үк һуңлама.
Ҡабатла ары йыр-һүҙем әҙәм,
Иманға һине килтерә Аллам.

Мин гонаһлыны, ғәфү ит, Алла,
Йөрәк ишегем Һиңә асыла.
Үҙ рухың менән, иманда нығыт,
Гонаһтарымды алыҫҡа ырғыт.

Йөҙөмдө борам тик һиңә табан,
Артҡа ҡарамам, тик алға барам.
Һинең юлыңдан барам Үҙеңә,
Һин ҡыл күпере, Алланың Һүҙе.

Ҡалған ғүмеремде Һиңә тапшырам,
Һин бөйөк Алла, Һиңә ышанам.
Гонаһ упҡыны аша һин күпер,
Хәҙер мин беләм, йәннәткә етер.

Йәшәүем – һинән, ашауым – һинән,
Һин ҡол түгелһең, иректә кинән.
Һөйөклө балам, мин оҙаҡ көттөм,
Килерһең тинем, һағынып бөттөм.

Һөйөү Аллаһы Ғайса Мәсихең,
Әҙәмгә уның мәрхәмәте киң.
Ғәфү итә ул килгән берәүҙе,
Ишетеп килмәгән, яуап бирер үҙе.

Килгән гонаһлыны таҙарта ҡаны,
Килмәгәндәргә – гонаһ упҡыны.
Ҡубарылып та терелгән Ғайса,
Унан шикләнмә, Ҡөрьәнде ҡара:*
Донъяла һәм әхирәттә данлы тигән,
Мәрйәм улы Ғайсаға сәләм биргән.
Амин!

*(Ҡөрьән, 19-сы сүрә, 30-34-се аяттар)*

*29.10.05.*



## ХОҘАЙҘЫ ЭҘЛӘ, ӘҘӘМ

Был донъяның михнәттәре ямандыр,
Ҡайҙа барма, кеше һүҙе, ялғандыр.
Эсеү, тартыу, яланғас тән, һүгенеү,
Тамуҡ юлындағыларға һуң булыр шул үкенеү.

Иманы юҡ, хаҡ һүҙ бөтә, алдауға юл,
Ата-әсәгә ихтирам юҡ, модала шул.
Көн дә кейем таптыра ғәзиз балаһы,
Мәрхәмәтле, түҙә шуға Күк Аллаһы.

Ямғыр яуһа, йәйғорҙо һин күрәһеңдер,
Төрлө төҫтә, шул Хоҙайҙың мисәтелер.
Туфан һыуы баҫҡан ерҙе, Хоҙай эше,
Ҡалған тере Нух пәйғәмбәр, һигеҙ кеше.

Был Алланың яҙаһы булған бер заман,
Һыуға тоткан, килеп еткән ахры заман.
Утка тотор был ҡәһәрле ерҙе Аллам,
Тамуҡ уты мәңге була, бел һин, балам.

Йәһәннәмдән сығып булмаҫ, кемдәр инә,
Гонаһлы йән ыҙалана, ғазап сигә.
Был тормошта тәүбә ит һин Хоҙайыңа,
Тере Алла алыҫ түгел, гел янында.
Амин!

*28.10.05.*

## НИМӘ УЛ ГОНАҺ?

Гонаһтан таҙарһаң, йәннәткә барырһың,
Гонаһлы йәшәһәң, йәшәүҙән арырһың.
Үлергә теләрһең бау һалып муйынға,
Үҙеңде үлтереү булмаһын уйыңда.

Гонаһһыҙ кеше юҡ, бел шуны һин, бала,
Йәнеңде Аллаға тапшыр был донъяла.
Алланың һүҙе бит донъяға килгән, бел,
Ул һинең хәлеңде тыуғандан белгән гел.

Гонаһта тыуа бит был ергә һәр бала,
Ҡан менән тапшырған һәр ата һәм ана.
Иң беренсе гонаһ ожмахка кергән бит,
Аллабыҙ емеште, ашама, тигән бит.

Әҙәм һәм Һауа ағаска ылыҡкан,
Йыландың татлы һүҙе уларҙы нык тоткан.
Алдашыу – гонаһ, бел, атаң – Иблис,
Урлашыу – гонаһ, бел, аллаң – Иблис.

Гонаһ, рәнйетеү, көнләшеү, маһайыу,
Гонаһлы был донья, йәшәүең һарғайыу.
Һин рухи ҡанунды белеп кил Аллаға,
Тапшыр йәнеңде донъяла тик Уға.



Мин әйткән һүҙҙәрҙе киртеп ҡуй ҡолаҡка,
Тик Хоҙай ҡоткара, килгәнде уллыкка.
Беренсе ҡанун – һөйә Алла Әҙәм улын,
Икенсе ҡанун – күрә алмай гонаһ ҡолон.

Ни эшләргә, һәр кеше бит Әҙәм улы,
гонаһ ҡоло,
Бына юл бар, өсөнсөһө,
ҡанундың бик тә олоһо.
Был гонаһлы Ергә тыуа Аллаң ҡоло,
Саф бала булды донъяла Мәрйәмдең улы.

Хоҙайым Үҙен оло Ҡорбан иткән,
Үлеп, терелеп,был донъянан киткән.
Әйткән иманлы һәр ҡыҙға һәм улға:
Күктәргә китһәм Мин, бирелер изге Рух,
Ерҙәге иманлы кешеләр Миңә дуҫ.

Ошо өс ҡанунды ҡабул итһәң үҙең,
Дүртенсе ҡануны – тәүбәгә килеүең.
Ҡабатла һин, дуҫым, доға һүҙҙәрен,
Ҡабул итһен Ғайсаны һинең йөрәгең.

Ғәфү ит Һин, Ғайса, Хоҙайым Тәңрем,
Һинең изге ҡаныңды ҡабул итә йөрәгем.

Кисер һин мине, таҙарт гонаһтан,
Йәшәү юҡ, биҙҙем һинһеҙ тормоштан.

Бөтә гонаһтарҙан арындыр һин мине,
Һинһеҙ йәшәүем үлемем булған бит.
Ҡыуана, түҙә тик һинән тыуған бит,
Эсеүемдән, тартыуымдан, һүгенеүемдән
арындыр бер үк.
Гонаһымды ҡанымдан, йөрәгемдән
Һин сығарып түк.
Тоғро һалдат ит был донъяла,
Рухи ҡылысың һәр бер балаңда.

Дошман фронты, тылы ла Ерҙә,
Һинән тыуғандар бирешмәҫ бер ҙә.
Балаң көслө тик Аллаң һүҙеңдә,
Иман, хәҡиҡәт, тормош юл Үҙеңдә.
Амин!

*28.10.05.*



# АЛЛАМ ҠОЛО ФӘТХИӘГӘ МӘҘХИӘ

*(Бейемде – әсәм, ҡайнымды атам тинем)*

Данлайым мин был донъяла Алланы,
Алып китер иманлы һәр баланы.
Иманлыға йәннәт ишеген асыр,
Иманһыҙҙы тамуҡ язаһы баҫыр.

Килеп төштөм, килен булдым был өйгә,
Һүҙ ҡуйыштыҡ, әсәм тинем бейемгә.
Хоҙай үҙе биргән миңә фатиха,
Атам Ғизитдин һәм әсәм Фәтхиә.

Күрҙем мин гел мөхәббәтте уларҙан,
Һөйөү килде уларға балаларҙан.
Аллам гелән минең эргәлә булған,
Һәр балам фатихалы булып тыуған.

Улар ҡаны аға һәр балабыҙҙа,
Хоҙай янында осрашыу барыбыҙға.
Әсәм өйрәтте икмәк бешерергә,
Бесәндә сәй эстек ултырып ергә.

Күбәләрҙе матур һал, тине, килен,
Ике ҡулы гел тота ине билен.
Атам өйрәтте салғыны тоторға,
Рәхмәтем ҙур, был юлдар булһын уға.

Был ғаиләлә миңә ир үҫтергән ул,
Һәр ваҡыт та теләгәндер изге юл.
Бөйөк Хоҙай ишеткән доғаларын,
Йыйған был йортҡа бөгөн балаларын.

Иман нуры балҡыһын йортобоҙҙа,
Йәннәт насип итһен тик барыбыҙға.
Эсеү, һүгенеүҙе беҙ ҡуйҙыҡ,
"Алла бирһә" тип һәр эште башлайыҡ.

Гонаһлы тыуа был ергә һәр кеше,
Тәүбәгә кил, ҡалғаны Алла эше.
Өйрәтә ул һәр ваҡыт яҡшылыҡҡа,
Кисерелгән баралмаҫ яманлыҡҡа.

Беҙгә килгәс, әсәм йөҙө нурланды,
Алла Һүҙен күңеленә ул һалды.
Ҡөрьәндән Мәрйәмгә төшкән Һүҙҙе,
Ҡыуанып ҡабул итте әсәм үҙе.



Һуңғы һулыш, үҙем күрҙем әсәмдең,
Доға ҡылдым, ҡабул иттең Тәңремде.
Рәхмәтем ҙур Хоҙайым Раббым Һиңә,
Хеҙмәт итәм, дарманыңды бир миңә.
Амин!

*30.10.05.*

## ТУҒАНДАРЫМА ИМАН ҺҮҘЕ

Туғандарым ишетһендәр, тинем мин,
Алла Һүҙен аҡ ҡағыҙға теҙҙем мин.
Ямғыр һымаҡ был һүҙҙәр күктән яуа,
Һәр ишеткән кешегә булһын дауа.

Шиғыр яҙам көн-төн мин ҡағыҙға,
Алла Һүҙен ишетһен тип барығыҙ ҙа.
Хоҙай Һүҙен яҙамын һеҙҙең өсөн,
Бирҙе Аллам йөрәккә рухи көсөн.

Был донъяла мөғжизәләр – Хоҙайҙан,
Ерҙә яҡты Ҡояштан һәм дә Айҙан.
Данлап ғүмерем етмәҫ Тәңрем эшен,
Данын күтәрһен был ерҙә һәр кеше.

Ауылдаштар һәм туғандар килһендәр,
Алла һүҙен мин данлайым, күрһендәр.
Иман нуры балҡыһын йөҙөгөҙҙә,
Иман һүҙе һүнмәһен өйөгөҙҙә.

Иманлы кеше яманлыҡ эшләмәҫ,
Тартмаҫ тәмәке, араҡыны эсмәҫ.
Ундайҙар киң юлдан бара тамуҡҡа,
Иманһыҙҙы Хоҙайым тота утҡа.

Ожмахҡа юл тар, ҡаршылыҡтар була,
Иманлыға Хоҙайым ҡулын һуҙа.
Гонаһтарҙан арынһын ине кеше,
Гонаһлы булды тыумыштан һәр эше.

Маһайҙы ул, үпкәләне, рәнйетте,
Тәрбиәһеҙ, Хоҙайҙан алыҫ китте.
Ахры заман, туғандар, килеп етте,
Ғүмер үтә, уйларға ваҡыт сикле.

Йәнеңде алырға килһә Хоҙайым,
Ни әйтергә белмәҫһең тип уйлайым.
Үлем килһә миңә әгәр бөгөн кистән,
Әйтермен мин: “Эй Раббым, сыҡманың
иҫтән!”



Йәнем, Рухым, Үҙеңә мин тапшырғанмын,
Һиндә рәхәт, йәнем тыныс, ышанамын.
Ғүмер биргән Алла, Үҙе килеп алыр,
Иманлы балам иламаҫ, өмөт бағыр.

Һәр беребеҙ ваҡытында үлеп китәр,
Алла Һүҙен һайлаған йәннәткә етәр.
Амин!

*31.10.05.*

## ҠӨРЬӘНДӘ ИМАН ҺҮҘҘӘРЕ

Хөкөм көнөнөң батшаһы – Алла Һүҙе,
Беҙҙе тура юлдан алып бара Үҙе.
Иманһыҙҙың күҙе йомоҡ – япҡан ҡорма,
Оло ғазап, иманлының һүҙен ҡаҡма.

Күңелдәре, ҡолаҡтары һаңғырауҙар
Алла янына кире ҡайтарылмайҙар.
Тән үлһә лә, йән үлмәй ике урында,
Терелтер ҡиәмәт көнө, Хоҙай тәхет алдында.

Беренсе гонаһ – Алла Һүҙен тотмау,
Ашама, тигән емеште ауыҙлау.

Бер гонаһ өсөн йәннәттән ҡыуылдылар,
Һәм гонаһта тыуҙы ҡалған балалар.

Кеше тәүбәһен Аллам ҡабул итеүсе,
Гонаһлы кешегә ҡулланма биреүсе.
Тәүрәт – Мусаға, Зәбүр Дауытка биргән,
Инжил – Ғайсанан, раҫлаусы Ҡөрьән тигән.

Мәрйәмде Алла Үҙ Һүҙе менән шатландыра,
Изге Рухтан әл-Мәсих Ғайсаны тыуҙыра.
Донъя ла, әхирәт тә данлыларҙан,
Һәм Аллаға яҡынлаштырылғандарҙан.

Бына Алла әйтте:
"Ғайса, Мин вафат итәм һине,
Үҙ янымда данлы бул һин,
Ҡиәмәт көнө, – тине, –
Һиңә эйәреүселәр бит кафырҙарҙан юғары,
Ҡайтыуығыҙ Миңә булыр,
хөкөм итәм юханы".

Алла ҡаршыһында Ғайса, Ерҙәге Әҙәм ине,
Уны тупраҡтан яратты, Ғайсаны Ул "Бул!" тине.
Аллаға иман килегеҙ һәм "өс" тип әйтмәгеҙ,
Аллаһ бер генә Илаһ, Уныҡы – Күк, Ерегеҙ.



Мәрйәм улы Ғайсаға Инжилде биргән Алла,
Унда ҡулланма һәм нур, уҡы, иманлы бала.
Хәкикәтте раҫлау, тәҡүәләргә ҡулланма
Вәғәз итеп бирелгән, иманға кил, һуңлама.

Был доньяға Ғайса Мәсих – Алла Һүҙе –
Үҙе килгән.
Тыуып, йәшәп,үлеп китеп ҡубарылып терелгән,
Һин шикләнмә, Әҙәм улы Алла Һүҙенән тигән,
Сәләмең бир Ғайса Мәсих –
Алла Бәрәне минән.
Аллаға шөкөр!

*31.10.05.*

## ХӘЙБУЛЛАҒА - 75

Башҡортостан, тине Мостай,
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Йөрәккә оҡшаған ҡалай,
Хәйбулла оста ғына.

Алыҫ юлдар ҙа айырмаҫ,
Өфө менән Аҡъярҙы,
Йөрәк тибеше туҡталмаҫ,
Йырлаһаҡ йырыбыҙҙы.

Башҡортостан, һин – йөрәгем,
Акъярымда минең төйәгем.
Тамырыңда аға йылғалар,
Таналыҡ, Ташлы һәм дә Һаҡмарым.

Дала ҡылғаны – Хәйбулла,
Ҡәҙим һәм Ғәзим – Хәйбулла,
Данлыҡлы артист – Хөрмәтулла,
Акъярым, һин дә – Хәйбулла.

Ҡоро елдәр көслө иҫә,
Яңы йорттар бик тиҙ үҫә.
Тирә-яғың сикһеҙ дала,
Һағынып ҡайта һәр бер бала.

Дарманым һинән, Хәйбулла,
Икмәгем һинән, Хәйбулла.
Әбеш, Бүребай – Хәйбулла,
Тамырым һиндә – Хәйбулла.

Ер-һыуыңдан илһам алам,
Йыр һүҙҙәрен бирә Аллам.
Йөрәк түрендә рухи яҡтылыҡ,
Иманға килһен барса халыҡ.



Сиҙәм ерҙәре – Хәйбулла,
Аҫыл ирҙәре - Хәйбулла.
Баҡыр ер аҫты – Хәйбулла,
Ҡанифа юлы – Хәйбулла.

Батыр ирҙәр үҫтерҙең, ерем,
Еңеү батыры булды Ҡәюм.
Хеҙмәт батыры – Килдебай,
Мөнәжәт йырлай Ҡаҙаҡбай.

Йырым бүләгем – Хәйбулла,
Изге төйәгем – Хәйбулла.
Хәйбулла ере бай була,
Иман юлында – Хәйбулла.

Данлы ҡурай – Сәйфулла,
Мөнәжәт һүҙе – Аҡмулла,
Буранбай ере – Хәйбулла,
Таштуғай йыры – Хәйбулла.
Етмеш биш һиңә, Хәйбулла,
Иман юлында Хәйбулла.

Аллаға шөкөр!

*31.10.05.*

## АЛЛАМ ҺАҠЛАҺЫН НИЯЗДЫҢ ЙОҠОҺОН

*(Ейәнемә)*

Йоҡла, улым, йом күҙеңде,
Яратам бик мин үҙеңде,
Әлли-бәлли-бәү.

Көнө буйы уйнап-көлдөң,
Ҡәҙерен бел тыныс төндөң,
Әлли-бәлли-бәү.

Йоҡлай атай һәм ҡартатай,
Йоҡламай тик күктәге Ай,
Әлли-бәлли-бәү.

Йоҡоно белмәҫ тик Хоҙай,
Бик ярата һине буғай,
Әлли-бәлли-бәү.

Һин матурһың, бәләкәсем,
Ҡабул ит, Алла бәрәсен,
Әлли-бәлли-бәү.

Әсәйеңә теләгем шул:
Икегеҙгә иманлы юл,
Әлли-бәлли-бәү.



Тыңла, Нияз, иман һүҙен,
Һаҡлай һине Алла Һүҙе.
Әлли-бәлли-бәү.

Ҙур үҫ, балам, бир һаулығың,
Хоҙай бирһен иманлығың,
Әлли-бәлли-бәү.
Амин!

*02.11.05.*

## КИЛЕНЕМӘ АЛЛА ҺҮҘЕ ТУРАҺЫНДА

*(Гөлсинә киленемә)*

Улым, һиңә әйтәм, килен, һин тыңла,
Боронғо әйтем – мәғәнә шунда:
Үпкәләшмәгеҙ, матур йәшәгеҙ,
Бер-берегеҙҙе ғәфү итегеҙ.

Мөхәббәт һеҙҙе ҡауыштырғанға,
Мәрхәмәт аскан Алла балаға.
Илсур атаһы булғас иманда,
Әсәйем килер, тиер Нияз да.

Көн-төн тимәй, Нияз "һөйләшә",
Гөлсинә килен, Нияз "серләшә".
Әсәй йыбанһа, өнө сыҡмаһа,
Ейәнем илай – ҡәрсәй саҡыра.

"Әсәй һөйләшмәй, йоҡоһо килә,
Ҡәрсәй, һин килсе, йырыңды көйлә.
Һинең ҡулыңда китермен йоҡлап,
Хоҙайым бирһен йырын да тоҡлап.

Ҙур үҫкәс, мин дә киләм иманға,
Дан йырын яҙам мин дә Аллаға".
Амин!

*02.11.05.*

## ИМАНҒА ЗИННУРЫМДЫ ҮҘЕҢ КИЛТЕР, ХОҘАЙЫМ

*(Иремә арнап)*

Аллам һине биргән бүләк,
Әсәңә булһын тип терәк,
Терәк булдың әсәңә һин,
Һуңғы һүҙе "ризамын мин".



Әйтте һүҙен, үлеп китте.
Йәне тере – йәннәткә етте.
Бында сағында доғалар ҡылды,
Түбәгә килде, иманлы булды.

Күрҙек беҙ Рухи яктылыҡ нурын,
Күҙҙәренән сағылып тороуын.
Гонаһлы Әҙәм был донъяла,
Кисерер Хоҙай, уйла, бала.

Белмәгәнгә еткерермен Алла һүҙен,
Белгәнен дә алып килер Хоҙай Үҙе.
Кисерелеү был донъяла – Ғайса Һүҙе,
Ғәфү итһен һине Хоҙай – Мәсих Үҙе.

Кеше тыумай иманында был донъяла,
Ҡандан килә, гонаһлы бәндә яла яға.
Ҙурайғанға, ҡартайғанға ваҡыт сикле,
Иманһыҙға ожмахтың ишеге бикле.

Биргән илаһи көсөңдө, Аллам, үҫтер,
Иманға һәр ишеткәнде үҙең килтер.
Амин!

*02.11.05.*

## ИМАН ЮЛЫНДА ХӘЙБУЛЛА

Етмеш биш йыл, әҙме елдәр иҫкәдер,
Дауыл булып, күпме йылдар үткәндер.
Бирешмәгән үткән йылдарға быуын,
Был көнгә килеп еткән ерем-һыуым.

Ямғыр яуған далаһына болоттан,
Икмәк үҫкән, еләк йыйған болондан.
Күпме быуын килеп еткән иректән,
Ошо ергә билен бөккән, ереккән.

Мираҫ әйткән балаға ата-баба,
Ер-һыуым һиңә ҡала, сикһеҙ дала.
Ең һыҙғанып үҫтер, бала, игенен,
Эшләгәнгә бирә Алла икмәген.

Ҡымыҙ эскән, ғүмер иткән йәйләүҙә,
Малын көткән, йөрөгән ул йәйәү ҙә.
Һунар йөрөп, бүре тотҡан урмандан,
Һаулыҡ булған, өйөн һалған самандан.

Ололарҙың фатихаһын тотайыҡ,
Етмеш биш йыл үтһә лә, онотмайыҡ.
Тыуған яҡтың ер-һыуын бысратмайыҡ,
Урамдарҙа таҙалыҡ булдырайыҡ.



Таҙа булһын Алла биргән тәбиғәт,
Иманлыҡта таҙа булыу ҙа кәрәк.
Аҡһаҡалдар әйтеүен тик үтәйек,
Күлдәге сафлыҡҡа беҙ етәйек.

Сафлығыңды һаҡла, тип әйт ҡыҙыңа,
Араҡы, тәмәкене ҡуй, тип улыңа.
Әшәке һүҙ – гонаһ, шуны бел, балам,
Аҙашҡанһың, көтә иманың Аллам.

Был донъяла гонаһтарың күрһәнә,
Алдау, урлау Иблистән белһәнә.
Ҡандан күсә гонаһ, киткән Әҙәмдән,
Иман юлы, таҙарыныу күңелдән.

Аҡъярымда Доға йорто кәрәк бит,
Йәше-ҡарты тапһын уны кәрәк тип.
Хәләл тиеп, итен һатты магазин,
Хәмер шешәләре тулды, ҡайҙа дин?

Ике йөҙлөлөк баҫты, бел, халыҡты,
Аҡъяр тибеҙ, ауылды ҡара яҡты.
Йәш быуынға эсерәбеҙ хәмерен,
Һыра, араҡы, вино, самогонын.

Хөкүмәтебеҙ уяу, бирә әмер,
Наркотикты ҡулланма, эсмә хәмер.
Ни әйтәһең, ҡалды был тик ҡағыҙҙа,
Тәмәкене көйрәтә ҡатын-ҡыҙ ҙа.

Юлын әйтәм, Аллаға кил, гонаһлы,
Тәүбәгә кил, булыр күңелең сафлы.
Гонаһһыҙ кешеләр юҡ был донъяла,
Иманға кил, иманһыҙ тыуа бала.

Был мөнәжәт әйтәм Хайбуллаларға,
Килегеҙ, иман итегеҙ Аллаға,
Алла һүҙен еткерәмен халҡыма,
Хоҙайымды йөрәгеңә ал ғына.

Тәңрем Һүҙе йөрәгеңде үҙгәртер,
Кисерелеү тик минән, тиеп әйтер.
Уҡы Һүҙен, доғаңды ҡыл, уҙаман,
Килде ереңә һинең ахры заман.

Урамдарҙа Алла һүҙен һөйләйем,
Аллам бирә йырын да, мин көйләйем.
Күрһә мине, туҡтатһын һәр үткенсе,
Ғәфү итте мине Алла Бәрәсе.

Аллаға шөкөр!

*05.11.05.*



## АЛЛА БИРҺӘ

Алла бирһә, тип башла һәр эшеңде,
Алла бирһә, тип өйрәт һин үҙеңде.
Алла бирһә, телеңдән шул төшмәһен,
Алла бирһә, тоҙһоҙ һүҙҙе белмәһен.
Алла бирһә, юлға сыҡҡан юламан,
Алла бирһә, кисер мине Һин, Аллам.
Алла бирһә, йәннәт ишеген асыр,
Алла бирһә, яманлыҡ һинән ҡасыр.
Алла бирһә, күңелгә сафлыҡ килер,
Алла бирһә, ни була, Тәңрем белер.
Алла бирһә, тәүбә килһәм кисерер,
Алла бирһә, йөрәккә Рухын бирер.
Алла бирһә, киләсәгем Алланан,
Алла бирһә, көс-ғәйрәт алам Унан.
Алла бирһә, доға йорто булдырыр,
Алла бирһә, иманлылар күп булыр.
Алла бирһә, нәпсене беҙ тыяйыҡ,
Алла бирһә, ялҡаулыҡты ҡуяйыҡ.
Алла бирһә, эсеүҙән тыйылайыҡ,
Алла бирһә, гелән булайыҡ айыҡ.
Алла бирһә, тартыуҙан арынайыҡ,
Алла бирһә, наркотик ҡулланмайыҡ.
Алла бирһә, тәүфиҡҡа юл асайыҡ,
Алла бирһә, самогонды ҡоймайыҡ.

Алла бирһә, яманлыҡҡа бармайыҡ,
Алла бирһә, иманға беҙ ҡайтайыҡ.
Алла бирһә, доға йортон асайыҡ,
Алла бирһә, Алланан беҙ тыуайыҡ.
Алла бирһә, иманың булыр юлдаш,
Алла бирһә, иретер йөрәктә таш.
Алла бирһен Алла Һүҙен – Хоҙайым,
Алла бирһен яҡты Ҡояшын, Айын.
Алла бирһә, һиңә Рухи яҡтылыҡ,
Алла бирһә, бирер иманлыҡ, һаулыҡ.
Алла бирһә, тотам бөгөн ураҙа,
Алла бирһә, тәнемә булһын яза.
Алла бирһә, тәнем ҡалыр ул балсыҡ,
Алла бирһә, ожмах ишеге асыҡ.
Алла бирһен мең быуынға мәрхәмәт,
Алла бирһен, Бөйөк Хоҙайға рәхмәт.

Аллаға шөкөр!

*05.11.05.*



## АЛЛАҒА ШӨКӨР

Бөтә нәмә тик Алланан,
Кешелек тә килә Унан.
Уның эше күренгән дә,
Күренмәгәне лә Унан.

Аллаға шөкөр әйтәйек,
Бар эшен Уның данлайыҡ.
Мәрхәмәттә беҙ йәшәйек,
Уның барын онотмайыҡ.

Алла беҙҙең менән гелән,
Батшалығы Уның күктән.
Үҙенде тапшырһаң Уға,
Алып сығыр дөрөҫ юлға.

Донъя бит ҡараңғылыҡта,
Алла Һүҙе – яҡтылыҡта.
Аллаға кил – һин ҡоллоҡта,
Гонаһ ҡоло – азатлыҡҡа.

Азатлыҡ тик Хоҙай Һүҙе,
Гонаһыңды күрә күҙе.
Биргән һиңә Ул ихтыяр,
Үҙең кил, һине кем тыяр.
Амин!

*05.11.05.*

## ИМАНЛЫ ПӘЙҒӘМБӘРҘӘР

Был донъя бер көнлөк, тибеҙ,
Теге донъя – мәңгелек.
Иманлы буған кешеләр элек,
Иманға килегеҙ һуңламай бер үк.

Иман һүҙҙәрен ишеткән улар,
Һөйләп йөрөгән Муса пәйғәмбәр.
Тәүрәт китабын беҙгә ҡалдырған,
Мөғжизәләрен Алла булдырған.

Тяғы йылан булып шыуышҡан,
Һуҡкан ҡаяға, һыу килеп сыҡкан.
Диңгеҙ урталай асылып киткән,
Сүл ҡомдарына манныйын һипкән.

Ағыулы йылан саҡкан сүллектә,
Күпселек халҡы киткәс үлеп тә.
Алла бында ла Үҙ ҡулын бирә,
Ярата халҡын, ҡотолоу килә.

Эшлә йыланды баҡырҙан, Муса,
Бәйлә һин уны арҡыры ағасҡа.
Быға ышанған тороп йүгерер,
Ышанмағаны йығылып үлер.



Онотма, дуҫым, Алланың эшен,
Фирғәүенгә лә күрһәткән көсөн.
Төрлө язаны бирҙе Ул уға,
Үлем төтөнө йөрөнө унда.

Яраткан халҡы ҡоткарыу алды,
Аҡ бәрәсте Ул ҡорбанға салды.
Ҡыҙыл ҡанына кәсәк буялды,
Итен ашаны, күмәсен һалды.

Ләкин был халыҡ Уны онотто,
Мусаны көтөп, быҙауға баҡты.
Алла уларҙы был эше өсөн,
“40 йыл сүллек" тип күрһәтте көсөн.

Ҡоро дауылдар һипте ҡоштарын,
Бирҙе сүллектә һыуын һәм малын.
Ашама, тине, итен сусҡаның,
Боҙола бик тиҙ, юғалтыр аңың.

Ибраһим ере, 40 көн юл ҡалды,
Хоҙайҙан йөҙөн сөйөргәс халҡы,
40 йыл атланы, язаһын алды,
Ҡырылды юлда, быуыны ҡалды.
Амин!

*06.11.05.*

## АЛЛА ҺАҠЛАҺЫН

Юлға сыҡһа туғандарым,
Алла һаҡлаһын, тием.
Урамдарҙа йөрөһәм дә,
Алла һаҡлаһын, тием.
Өйҙәге ен-пәрейҙәрҙән
Алла һаҡлаһын, тием.
Нахаҡ һүҙҙән, рәнйетеүҙән
Алла һаҡлаһын, тием.
Бәлә-ҡазаларҙан Үҙең,
Алла, һин һаҡла, тием.

Был донъяла ғүмер биргән Хоҙайым,
Гонаһ ҡылма, һине гелән һаҡлай Ул.
Һаҡлай беҙҙе иман килһә, бел, Аллам,
Иртән-кисен Хоҙайға доға ҡылам.
Һәр гонаһлы килһен тиеп иманға,
Кисер мине, тәүбә тиеп Хоҙайға.

Был донъяны ҡараңғылыҡ баҫҡан бит,
Ен-пәрейҙәр кешеләрҙе аҫа бит.
Гонаһ ҡоло кешеләргә бау бирә,
Иблис йөрөй, ҡоторона, дыу килә.



Күренмәгән Рухи һуғыш донъяла,
Кеше йәне өсөн һуғыш, бел, бала.
Был һуғышҡа еңеү яҡын, ваҡыт етте,
Хоҙайға бирелмәгәнгә, йәннәт ишеге бикле.
Амин!

*06.11.05.*

## БАЛСЫҠТАН ЯРАЛҒАН ӘҘӘМ

Хоҙай балсыктан Әҙәмде яраткан,
Барса ағзаны кәрәк тип тапкан.
Биргән кешегә рух, тәнен, йәнен,
Данлаһын тип Ерҙә бәндә Тәңреһен.

Ҡулды биргән – эшләп ашаһын Ерҙә,
Аяҡты биргән – йөрөһөн Алланың эҙенән,
Күҙҙе биргән уҡыһын тип Алланың Һүҙен,
Ирендәр биргән данларға Хоҙайҙың Үҙен.

Ҡолаҡтар биргән – ишетһен мөхәббәт
Һүҙемде,
Йөрәкте тетрәтә яратыу Алланы, кешене,
Үҙеңде.

Телеңде биргән, Аллаға шөкөр тип йәшәһен,
Башыңды уйларға,түҙергә, һөйөргә биргән
Ул, күрәһең.
Аллаға шөкөр!

*08.11.05.*

## ИМАНҒА ЮЛ

Көн дә тороп шиғыр яҙам,
Һүҙен бирә миңә Аллам.
Аҡ ҡағыҙға төшә юлдар,
Уҡығыҙ һеҙ, ҡыҙҙар, улдар.

Был донъяны Хоҙай Үҙе бирҙе,
Барлап йөрөй ике күҙе.
Һәр кешене Аллам уйлай,
Бер ваҡытта ла арымай.

Тора ул һинең яныңда,
Әйтмә дуҫым, юк,типАлла.
Алла гелән һинең алда,
Һулаҡайҙа һәм дә уңда.

Ғәйбәт һүҙен һис туктатмай,
Йөрәк ҡаткан, ник аңламай.

Ҡабул итмәй, бел Хоҙайың,
Түшкә таҡканда һин айың.

Алла ул һүрәт түгел,
Көмөш һәм алтын түгел.
Биргән Ул ерен-күген,
Ҡабул итһен күңелең.

"Уф!" тигән Әҙәм атам,
Ожмахтан ҡыуғас Аллам.
Рух көсөн алған Хоҙай,
Төшөрәбеҙ шуға ай.

Айҙың үҙенә ҡара,
Күк есемдәрен барла.
Аллам эшен күрәһең,
Юҡка түгел, беләһең.

Һәр йәнлегә донъяла
Һулыш бирә тик Алла.
Тын алыуҙан туҡтағас,
Йән йәннәткә килә алмаҫ.

Һулыш ала үләндәр,
Тәҙрәлә – аҫыл гөлдәр,
Ҡоштар һәм дә йәнлектәр,
Урмандағы бөжәктәр.

Улар данлай Алланы,
Данға күмә гел Уны.
Таңдан әтәс ҡысҡыра,
Кәзә-һарыҡ баҡыра.

Данлай Уны һандуғас,
Бейек оса ҡарлуғас.
Рәхмәт әйтә бал ҡорто,
Тик маҡтамай башҡорто.

"Уф!" тиеүҙән бушамай,
Нисек һуң теле талмай?
Иртән, кисен: "Уф, Аллам!"
Тигәнгә килмәҫ Аллам.

Йәнеңдә буш урын бар,
"Уф" тигәнгә һүҙем бар.
Һал йөрәгеңә һүҙем,
Данла Хоҙайҙы, телем.

Юл, хәҡикәт һәм тормош,
Тик хоҙайыңда булмыш.
Тыңла барса Хәйбулла,
Иман һүҙе бай була.
Амин!

*10.11.05.*



## АЛЛАНЫ ЭҘЛӘ

Алланы эҙләү Әҙәм атанан,
Алла Рухы алған унан.
Ялмап алды гонаһ уты,
Һәр бала ерҙә гонаһлы тыуҙы.

Шунан бирле Алланы эҙләйбеҙ,
Тәнебеҙ үлмәҫтән йәннәтте белмәйбеҙ.
Ләкин һәр кеше рухи үле,
Рухты терелтә Алланың Һүҙе
.
Алланың Һүҙе Мәрйәмгә төштө,
Йәненә бирҙе изге рухи көстө.
"Бул!" тигәндән тыуҙы изге Бала,
Ғайса Мәсих данлы был донъяла.

Әхирәттә данлы ҡотҡарыусым,
Һис йыҡма һүҙемде, тыңлаусым.
Инжил китабын һин уҡы әле,
Һәр кешенең иманға килер мәле.

Гонаһ ҡандан күсә һиңә, миңә,
Алла Һүҙен ҡабул ит үҙеңә.

Тере Алла, тере иманға кил һин,
Ишетһен һүҙем улым һәм килен.

Гонаһтарҙы йыуалыр тик ҡан,
Ҡорбан килтерә йыл һайын мосолман.
Ибраһим атанан йола ҡалған,
Көндәге гонаһты был ҡорбан йыуған.

Әҙәмдән килгән гонаһты кем алыр?
Тик Хоҙайым ғына васыят ҡалдырыр.
Оло Ҡорбанды Тәңрем төшөргән,
Алла һүҙе булып, Ул ергә килгән.

2000 йыл элек тыуған Мәрйәмдән,
Йәшәгән, үлгән һәм дә терелгән.
Был Изге һүҙҙәрҙе уҡы Инжил, Ҡөрьәндән,
Мөғжизәне Алла Үҙе ергә биргән.

Күктән төшкән Алла бәрәсен ҡабул
иткән кеше,
Изге булыр был донъяла һәр эше.
Рухи көс алыр Алланың Үҙенән,
Кире китә алмаҫ Тәңрем Һүҙенән.

Тәүбәгә килеү үҙенән булыр,
Алла балаһы булып тыуыр.



Гонаһ ҡоло булыуҙан ҡотолор,
Хоҙайҙың ҡоло йәшәүгә ынтылыр.

Ерҙәге гонаһтар артҡандан арта,
Бер гонаһ ине, тыуҙы ул ожмахта.
Ә хәҙер тыңлағыҙ гонаһтар теҙемен,
Гонаһлы кешенең йәһәннәм үлемен.

Араҡы эсеүең килтермәҫ ожмахҡа,
Тәмәке тартыуың төшөрөр тамуҡҡа.
Һүгенеү, әрләшеү, рәнйетеү, үлтереү,
Көнләшеү, алдашыу Хөкөмгә килтереү.

Мөкиббән гонаһҡа батҡан был донъя,
Гонаһлы тыуа был ерҙә һәр бала.
Гонаһтан арыныу юлы – Алла,
Килһен иманға тыңлаған һәр бала.

Күңелдәге бушлыҡты Аллам тултырыр,
"Балам" тип әйтер, Үҙенән тыуҙырыр.
Алланың Рухы бирелер күңелеңә,
Һиңә ихтыяр бирелгән, кил генә.

Көсләү юҡ иманға, бирелгән ихтыяр,
Һайла һин Хоҙайҙы, теләгең кем тыяр.

Ихтыяр бирелгән Әҙәмгә ожмахта,
Ашама емеште, барма, тип ағаска.

Алланы тыңламау – был гонаһ беренсе,
Өйрәт һин баланы, тәрбиә биреүсе.
Дин генә Аллаға килтермәҫ, бел, бала,
Ҡорбаның алынмай, батканһың гонаһка.

Гонаһтан тыуған гонаһ итер һаман,
Гонаһтың ни икәнен айыра алмаҫ балаң.
Урлашыр, алдашыр, көнләшер, рәнйетер,
үлеп тамуҡка китер,
Әсә, балаңа Алла Һүҙен еткер!

Ахры заман килеп етте, уҙаман,
Алла Һүҙен бирҙе ергә бер заман.
Ҡабул итһәң, йәннәт ишеге асыҡ,
Тән яралған, ҡалыр ерҙә ул балсыҡ.

Эйе, Әҙәм яратылған балсыктан,
Йән өрөлгән, Рух бирелгән Алланан.
Тағы биргән Аллам Рух яҡтылығын,
Алған Әҙәмдән, бел һиндә юҡлығын.

Шуны эҙләп, "Уф Аллам!" тиһең бит,
Йәнеңдәге бушлыкты һиҙәһең бит.



Әҙәмдән алғанды бирә Хоҙай Үҙе,
Изге Рухка мансылдыра Алла Һүҙе.

Үҙеңде һин гонаһлы тип таныу етә,
Ҡурҡ һин Алланан,
Әҙәм гонаһы тамуҡка илтә.
Унан ҡотолоу – хәйер, доға, намаҙ етмәҫ,
Биргән ҡорбанды Аллам ҡабул итмәҫ.

Тик Алла биргән оло Ҡорбанды ҡабул ит,
Тәүбәгә кил, гонаһтарҙан һин ары кит.
Ҡәһәрләнгән был ерҙә гонаһһыҙ кеше юҡ,
Ғайса – ҡыл күпере, Иблис ата уҡ.

Уҡ ата Иблис, шайтандар башлығы,
Эсертә, тарттыра, маһайта уның уғы.
Инде лә ваз кисһәң әшәке донъянан,
Ул бау күрһәтә, аҫылынма һин, балам.

Ҡараңғы Рухтар баҫты донъяны,
Гонаһтан ауырый кеше тәне, аңы.
Тыңлаһа Иблисте гонаһка ҡол кеше,
Язаһын бирер, бел, был Алланың эше.

Кәрт һалдырыу, күрәҙәсегә барыу,
Аҡсаға уйнау, экстрасенсты уйлау,

Наркотик ҡулланыу, самогон ҡойоу –
Бөтәһе лә гонаһҡа ҡол булыу.
Быға язаһын Хоҙай бирер,
Мәрхәмәтем киң, килерһең, тиер.

Ракты бирә – һине ярата,
Паралич һуға – күккә ҡарата.
Кил һин, гонаһлы, һуңлама, кеше,
Ҡабатла доғамды,
Ҡалғаны Алланың эше.

Күктәрҙәге Атабыҙ, исемең мөҡәддәс булһын,
Һинең Батшалығың килһен Күктәрҙәге һымаҡ.
Ерҙә лә Һинең ихтыярың булһын.
Йәшәү өсөн кәрәк булған икмәкте беҙгә көн
һайын да бир.
Беҙ гонаһлыларҙы кисергән кеүек,
Беҙҙең гонаһтарҙы ла кисер.
Беҙҙе ҡотҡоға бирмә,
Мәкерленән һаҡла!
Сөнки Батшалыҡ та, шөһрәт тә,
Ҡөҙрәт тә мәңгегә Һинеке!
Амин!

*12.11.05.*



## ИМАНЛЫ ТҮГЕЛ, ГОНАҺЛЫ ТЫУА КЕШЕ

Тәү кеше ул тыумаған,
Алла Уны "яһаған".
Ир булып яралған ул,
Балсыҡтан яһалған шул.

Йәннәт баҡсаһы иркен,
Әҙәм һәм Һауа өсөн.
Мөхәббәт булған унда,
Гонаһ та тыуған шунда.

Алла, ашама, тигән,
Ләкин улар үрелгән.
Гонаһ уларға кергән,
Алла язаһын биргән.

Ергә ҡыуылды Әҙәм,
Тапманы донъяла йәм.
Тыуҙы балалар гонаһлы,
Иблис булды алдаҡсы.

Алданы шайтан үрҙә,
Ожмахтың ҡап түрендә.

Әҙәмгә һәм Һауаға,
Емеш тине үлмәүгә.

Иблис маһайҙы Күктә,
Булды ул тәү фәрештә.
Аллаға ҡаршы сыҡты,
Күктән ергә атылды.

Күренмәгән Рух ерҙә,
Йөрөй шайтан һәм ен дә.
Кеше тыуа гонаһлы,
Ҡандан килә гонаһы.

Гонаһ ҡоло биреша,
Алдау, урлау килешә.
Араҡы, һыра эсә,
Тыя алмай уны эсә.

Гонаһ ҡолон етәкләй,
Ҡара көстәр этәкләй.
Наркотик, ти, шәп нәмә,
Ҡаҙа үҙеңә энә.

Тормош булғас гонаһлы,
Ҡулын һелтәй балаһы,



Ен-пәрейҙәр шул ерҙә,
Бауын күрһәтә белә.

Гонаһта тыуа бала,
Иманы булмай унда.
Иманды ҡабул итеү
Булыр тәүбәгә килеү.

Алла һине ярата,
Гонаһлыны ҡарата.
Алла биргән ҡорбанды
Ҡабул ит һин ни бары.

Алла Һүҙен төшөрҙө,
Мәрйәм апаға бирҙе.
Ир булып тыуҙы Хоҙай,
Быға ышанмай булмай.

Ҡөрьәнде асып ҡара,
Ышанмаһаң һин, бала.
Ғайса Мәсих – саф Бала,
Оло Ҡорбан донъяға.

Йәшәп, үлеп, терелде,
Ҡөрьән дә иҫбат итте.

Тәүбә итеү юлы шул,
Кисерелеү булыр ул.

Шунда тыуыр иманың,
Кисерелеү – Хоҙайың.
Гонаһ ҡоло булмаҫһың,
Инде гонаһ ҡылмаҫһың.

Етәкләй һине Хоҙай,
Туғандар һине ҡотлай.
Алланы тибеҙ – Атай,
Һәр бала уны данлай.

Йәннәт ишеге асыҡ,
Ожмахта йәшәү анығ.
Рухи йәшәүҙә ныҡын,
Һөйләмә һин артығын.

Ныҡ бул, донъя ҡаршылыҡ,
Иманда булыу һаулыҡ.
Иблис артыңдан йөрөр,
Ләкин Алла көс бирер.

Ул булыр Рухи көсөң,
Йәнең мәңгелек өсөн.
Тәнең булыр ҡаршылыҡ,
Ҡалыр ерҙә ул балсыҡ.



Күктәргә китмәҫ элек,
Аллаң йөрөр эләгеп.
Бер аҙым һинән ҡалмаҫ,
Йәнеңә Иблис тейә алмаҫ.
Амин!

*13.11.05.*

## ТӘҮБӘГӘ КИЛ

Ниңә тыуҙым был донъяға, белмәнем,
Ғүмеремдең ҡәҙерен мин күрмәнем.
Кейем кейҙем, ашап-эстем, уйнаным,
Бәхетле мин был ерҙә тип уйланым.

Ирҙән уңдым, ғаиләмдең терәге,
Аҡыллы ул, мөхәббәтле, егәрле.
Биш баланы яратып беҙ үҫтерҙек,
Киләсәккә матур тормош теләнек.

Иман юлына сығарҙы биш бала,
Доғалары ишетелде Аллаға.
Тәүбә иттем мин Алланың Һүҙенә,
Мәрйәмдән тыуған Хоҙайҙың Үҙенә.

Ҡандан килгән гонаһтан мин арындым,
Изге Рухтың көсөнә мин мансылдым.

Хоҙай килде беҙгә, бирҙе ғүмерен,
Изге ҡанға һуғарылды был ерем.

Бөйөк Алла Үҙе килешеү ҡуйған,
Гонаһ өсөн Ибраһим ҡорбан һуйған.
Алла биргән бәрәскә тәүбә ҡылдым,
Гонаһтарҙан кисерелеү мин алдым.

Был – хәҡиҡәт, уҡыным мин Тәүрәттә,
Гонаһ килә Әҙәмдән, бел, иң тәүҙә.
Унан күскән ҡан аша балаларға,
Таҙарыныу Хоҙайҙан барыбыҙға.

Аллам әйткән: тыуыр ерҙә Ир бала,
Орлоҡ булыр, тине, әсә ҡорһағында.
Изге Рухтан булыр, саф бала Үҙе,
Ҡорбан – Алла Бәрәсе, күктән һүҙе.

Тыуған, йәшәп, үлеп, терелгән Үҙе,
Иманлыға бирә мәңгелек ғүмерҙе.
Йәнеңде тапшыр Уға был донъяла,
Йәшәүеңде алып барыр тик Алла.

Бөйөк Хоҙай биргәс беҙгә ғүмерен,
Изге ҡаны йыуа ҡабул иткәндең.



Еңеү килде шул көндән кешелеккә,
Иблис теймәҫ киң беҙҙең иманлеккә.

Зәбүр китабы данлай Алла һүҙен,
Дауыт пәйғәмбәр йырлай тапҡан һүҙен.
Сөләймәндең тапҡыр һүҙҙәре аҡыл,
Бөйөк Хоҙайыңа үҙең тәүбә ҡыл.

Инжил китабын аңларһың – хазина,
Йәннәткә киләм тигәнгә аҙ дин дә.
Тәүбәгә кил, таҙарыныу мотлаҡ, бел,
Тере Хоҙай эргәндә булған гел.

Йөрәк ишеген ас Хоҙайыңа,
Ғәфү ит һин, мансылдыр изге ҡанға.
Изге һүҙең ҡабул итәм ҡорбаның,
Аллам, рәхмәт, маҡтауға лайыҡ Улың.

Тәүбә юлы ошо, ишет һин, бала,
Тәүбәгә кил, көтә бит һине Алла.
Тәүбә иткәс, ваҡыт еткәс, үлербеҙ,
Тәүбәлене ожмах көтә, күрербеҙ.
Амин!

*15.11.05.*

## ИНЖИЛДӘ ИМАН НУРЫ

Мосолман тип һуғаһың күкрәгең,
Уҡы Ҡөрьән аятын күберәген.
Яйлап уҡы, аңларһың һин тик шуда,
Ни яҙған пәйғәмбәрең һиңә унда.

Бишенсе сүрәне уҡы, тик ятма,
Иғтибар ит ҡырҡ алтынсы аятҡа.
Тик Инжил китабында иман нуры,
Алла Ғайсаға биргән, уҡы шуны.

Инжил китабын, дуҫым, ал ҡулыңа,
Яңы васыят ҡалдырған Ғайса – ҡулланма.
Уны уҡып аңларһың тәүбә юлын,
Йөрәгеңә саҡыр һин Алла Улын.

Һәр юлы китаптың – Алла тураһында,
Хоҙайыбыҙ Ғайса Мәсих тик унда.
Килеп, тыуып, үлеп, терелгән ваҡыт,
Кил иманға, тәүбәгә – сикле ваҡыт.

Һуңламай кил иманыңа һин бөгөн,
Көтә һине Алла Һүҙе көн-төнөн.
Иртәгә лә, бәлки, булыр һуңғы көн,
Хоҙайға кил – кисерелеү Хөкөм көн.



Ҡиәмәт көнө килеп етер барына,
Хоҙай алдында теҙләнер барыһы ла.
Иманлылар килер унда йәннәттән,
Иманһыҙҙар ыҙаланды – йәһәннәм.

Бөтә халыҡ баҫыр Алла ҡаршына,
Ауыҙ ябыҡ, йән дерелдәй алдында.
Бөтә булған гонаһтар күҙ алдында,
Бер нәмәне йәшереп булмай унда.

Ғайсаға иман иткәндәр әҙ булыр,
Уны ҡабул иткәндәр ҙә әҙ тыуыр.
Ләкин, беләм, унан тыуған хур булмаҫ,
Гонаһтары йыуылып, хөкөм булмаҫ.

Уның ҡашына баҫыр балалары,
Һокланып таныр Ғайса иманлыны.
Ерҙә ҡабул иттең, балам, Хоҙайың,
Изге ҡаным йыуҙы һинең гонаһың.

Ожмах ишеге асыҡ һинең өсөн,
Йөрөттө ерҙә һине минең көсөм.
Инжилдәге Алла Һүҙен алдың һин,
Изге ҡанға мансылдырҙым һине Мин.

Гонаһтарың йыуҙым, инде иҫләмәм,
Ғәфү иттем был донъяла – иҫкәртәм.
Таҙарынғас гонаһ итмә һин, иркәм,
Инжил китабын уҡы кисен һәм иртән.
Амин!

*16.11.05.*

## ДОҒА КӨСӨ

Иманлының доға көсө – Алланан,
Хәкикәт, тормош юлы алам Унан.
Доға ҡылмай йәшәп булмай донъяла,
Рухи көсөн биреп тора тик Алла.

Доғаларым ишетелә Аллама,
Иманлының Рухы изге Алланан.
Биргән илаһи көсөн, дарманын да,
Күрһәтер, маһаймаһам, Үҙ данын да.

Маһайыу һәм мактаныу – Иблистән,
Урлау, алдау, саф булмау – ҡара көстән.
Гонаһлыны шайтандар йөрәтә, бел,
Эсеү, тартыу – был донъя яуызлык гел.

Иманға кил, гонаһтарҙан арын һин,
Гонаһтарҙан таҙарта алмаҫ хатта дин.



Тере Хоҙай Ғайса Мәсихте саҡыр,
Унһыҙ үлһәң, дуҫым, булырһың бахыр.

Ғайсаға иман иткәндәр бәхетле,
Ерҙә, күктә йәшәүҙәр мәрхәмәтле.
Йәшәүҙәрҙең сиге юк улар өсөн,
Мәңгелек ғүмер биргән Мәсих көсө.

Үҙе үлеп, йәнен, ҡанын биргән Ул,
Мәңгелектә йәшә һин, тигән Ул.
Һайла Уны, һин, гонаһлы бер бәндә,
Бирә Ғайса – изге Рух йәшәй тәндә.

Кемгә бирелгән Ғайсаның Рух көсө,
Йәшәр Ерҙә, доға ҡылыр, Рух көслө.
Ишетелер һәр доғаһы Аллаға,
Ҡурҡмай йәшәр йәнен биргән Хоҙайға.

Доға ҡылам үҙ телемдә, мин башҡорт,
Иман булһа, өйөмдән дә китмәҫ ҡот.
Ишетә һәр ерҙә Хоҙай доғамды,
Һаклай, өйрәтә, күҙәтә һәр аҙымды.

Доға көсөн күрәм тормошомда,
Алла көсөн һиҙәм һәр уңышымда.
Шөкөр, тиеп көнөм үтә, данлайым,
Хоҙайымдың мәрхәмәтен аңлайым.

Иманымдың сафлығына еткерер,
Шиғыр бирә, көйөн дә үҙе бирер.
Уйнатыр, ышанам, Алла думбыра,
Маҡтау, данлау һүҙе булһын тик Уға.

Туғандарым табып бирер думбыра,
Аҡһаҡалдар яҙған ҡобайыр шуға.
Сәсәндәрҙең һүҙен һаҡлай башҡорто,
Балды ла бит йырлап йыя бал ҡорто.

Телем данлаһын ерҙә тик Тәңремде,
Ылыҡтырһын Ул Үҙенә әҙәмде.
Туғандарым ҡабул итһен Хоҙайҙы,
Кисерә Ул еңгәй, апай, ағайҙы.

Доға көсө, Аллам, һинән, беләмен,
Яуабыңды һуңлатмай һин бирәһең.
Даның күрәм, шөкөр тием аҙым һайын,
Һинһеҙ йәшәп булмай ерҙә, Хоҙайым.
Амин!

*16.11.05.*



## КЕШЕ БУЛ ИМАНЛЫҠТА

Әҙәм тәне яратылған балсыҡтан,
Йән йөрөткән, Рух өйрәткән ожмахта.
Изге Рухты өргән Тәңрем тәнеңә,
Ихтыяр ҙа биргән Алла кешегә.

Мөхәббәт тә һалынған Атабыҙға,
Йөрөгән Ул Эдем тигән баҡсала.
Һауа әсәне яратҡан, һөйгән ул,
Шатлыҡ, бәхет, мәңгелектә булған ул.

Һаулығын да биргән Хоҙай уларға,
Үрсегеҙ, тулһын баҡса балаларға.
Ләкин гонаһ тыуған ожмах эсендә,
Тотҡан Әҙәм Алла һүҙен иҫендә.

Иҫләү генә етмәй, бел, тыңлау кәрәк,
Хоҙайҙың һүҙен мотлаҡ үтәү кәрәк.
Рухи үлемгә дусар булды кеше,
Гонаһлы булды ерҙәге һәр эше.

Тәү кешеләге шатлыҡ ҡайҙа булды,
Уфтаныу ғына йөрәккә һалынды.
"Уф" тигән шул Әҙәм киткәс ожмахтан,
Рухи үлгән Алланы тыңламауҙан.

Алла өҙҙө Әҙәм менән серләшеү,
Ғүмер эҙләне юл,ғәфү үтенеү.
Ҡорбан салды, йәшәү булды үкенеү,
Ҡасан килерен белмәне кисереү.

Әҙәм тәне менән тыуҙы ир бала,
Фәрештә һүҙен ишетте ҡыҙ бала.
Алла һүҙе төштө Мәрйәм анаға,
Изге Рух менән тыуҙы саф Бала.

Ғайса Мәсих тиеп исем ҡуштылар,
Иң беренсе ҡотланы көтөүселәр.
Ғайса – Ҡоткарыусы тыуҙы донъяға.
Мәсих Алла тарафынан майлана.

Ҡоткарыусым – Алла бәрәсе тыуҙы,
Һинең һәм минең өсөн ҡорбан булды.
Оло Ҡорбан Алла үҙе төшөрҙө,
Хаж ағасында үлде һәм терелде.

Уға тәүбә иткәнгә Рух бирелә,
Ошо ерҙә кисерелгән терелә.
Бөтмәҫ шатлык күңелгә кире ҡайта,
Ғүмерҙе Ул мәңгегә оҙонайта.

Рухи тере яктылыкка ынтыла,
Кеше булып, изгелек кенә ҡыла.



Йөрәк яңы "Аллам" тиеп һуға,
Рәхмәт сикһеҙ мәрхәмәтле Аллаға.

Кешелекте Алла үҙе ҡайтара,
Иманыңда нык тор инде, һин, бала.
Доғаңды ҡыл, уҡы Алланың Һүҙен,
Данла тормошоңда Хоҙайҙың Үҙен.

Мөхәббәтле булам тиһәң донъяла,
Изгелекле була алаһың Аллала.
Үҙгәртә Ул рухың, йәнең һәм тәнең,
Мөхәббәтле, мәрхәмәтле Тәң(е)рең.
Амин!

*20.11.05.*

## ХОҘАЙЫМ – ҠЫЛ КҮПЕРЕ

Ҡыл күпере һалған упкын аша,
Гонаһ упкыны тәрән, бәндә ҡаса.
Ошо күперҙе үҙе һалмаҡ була,
Ҡорбан сала мәсеттә, доға ҡыла.

Оло Ҡорбан Ғайса Мәсихтең Үҙе,
Ҡоткара Ул тәүбә иткән кеше.
Данын ташлап, гонаһлы ергә килде,
Һинең һәм минең өсөн йәнен бирҙе.

Ҡубарылып терелде, Күккә ашты,
Килгән юлдан ожмахҡа кире ҡайтты.
Унан тәүбә һорағанға юл асыҡ,
Ҡыл күперен Ғайса һалды, шул анык.

Изге ҡанын түкте Ғайса еремә,
Ҡаны йыуа гонаһлы, һин йөрөмә.
Йәнеңде һин изге Ғайсаға тапшыр,
Йәнең, тәнең тыныслыҡ Унан табыр.

Мең быуынға мәрхәмәтен күрһәтер,
Доғаң ҡылған һайын ишетер.
Ташламай Ул килгән бәндәне мәңге,
Ярата һине гонаһлы, Тәңре.

Бөйөк Ғайса мөхәббәте сикһеҙ, бел,
Йәшәй алмаҫһың Аллаһыҙ, шуны бел.
Изгелегең,байлығың ҡотҡара алмаҫ,
Ҡыл күпере Ерҙә һине һайламағас.
Амин!

*21.11.05.*



## ҒАЙСА ҺИНЕ ЯРАТА

Ошо йәшкә тилем йәшәп, белмәнем,
Хоҙай барын күңелемдә һиҙмәнем.
Бөйөк Ғайса мине тыуғандан белгән,
Гелән минең эргәмдә Ул йөрөгән.

Һаклаған мине бәлә-казаларҙан,
Ваҡыт етер тәүбәгә гонаһтарҙан.
Ишетмәйсә, белмәйсә килмәҫ бала,
Ғайса мөхәббәтен еткер уларға.

Ғайса гелән йөрөй һинең яныңда,
Тәүбә ит, ал мөхәббәтен аңыңа.
Йөрәгеңә ҡабул ит Хоҙайыңды,
Йәнеңде тапшыр Уға һәм уйыңды.

Ғайса Мәсих һаҡлар һине донъяла,
Мөхәббәте үҫер һиндә, бел, бала.
Тормошоңдоң сиге булмаҫ мәңгегә,
Хоҙай биргән рәхмәтем ҙур Тәңрегә.

Һаҡлай Ғайса йәнемде Иблистән,
Доға ҡылмаһаҡ ҡуйған ҡара көстән.
Был донъяны баҫҡан тик ҡараңғылыҡ,
Ғайсаға кил, иманыңда – яҡтылыҡ.

Ғайса Мәсих ярата бар кешене,
Күрә алмай тик гонаһын кешенең.
Изге ҡаны ҡабул итһәң, таҙарта,
Гонаһ бөтә, гелән изгелек ҡайта.

Ғүмереңдең һин ҡәҙерен белерһең,
Ғайса Мәсихте данлап һин йөрөрһөң.
Доға ҡылырһың һәр яҡының өсөн,
Бир, тип, Ғайса, уларға Рухи көсөң.
Амин!

*21.11.05.*

## АМИН!

Доға ҡылам, Хоҙайым,
Көслө булһын иманым.
Тар юлдан йөрөт Үҙең,
Йәннәткә ас ишегең.

Хәҡиҡәт, юл Үҙеңдә,
Мәңге тормош тик Һиндә,
Рухи көстө бирәһең,
Доғамды ишетәһең.



Үҙ балаң иттең мине,
Ҡолоң данлаһын Һине.
Дарманыңды бир миңә,
Дан йырым булһын Һиңә.

Данлай Һине туғандар,
Һинән Рухи тыуғандар.
Төрлө телдә һөйләйбеҙ,
Һине данлап йырлайбыҙ.

Мөхәббәт Һинең сикһеҙ,
Барыбыҙға ла етер.
Балаларға, олоға,
Йәтимгә һәм байына.

Һуҡырҙарың күрәләр,
Ғәриптәр йүгерәләр.
Һаңғырауҙар ишетә,
Быны Ҡөрьән дә әйтә.

Мөғжизәләр күрһәттең,
Бирҙе Һине Тәң(е)рем.
Мөғжизәнең олоһо,
Ҡорбан булдың тоғ(о)ро.

Мәсхәрәләргә түҙҙең,
Минең өсөн Һин үлдең.
Минең өсөн терелдең,
Бөйөк Хоҙайым минең.

Миңә бир түҙемлекте,
Иманда үҫемлекте.
Көслө итеп һөйләүҙе,
Һине данлап көйләүҙе.
Амин!

*21.11.05.*

## ҒӘФҮ ИТ, ХОҘАЙЫМ, КИСЕР ГОНАҺЫМ

Гонаһтарымды ғәфү ит Һин, Хоҙайым,
Гонаһ итә бәндәң Ерҙә аҙым һайын.
Гонаһта тыуа һәр бер бала был донъяла
Ғәфү ит кешеңде Һин, Бөйөк Алла.

Һәр берәүҙе өйрәт, кисер был донъяла,
Ғәфү итә белһен, барыһына яҡмаһын яла.
Күршеһен, туғанын, дуҫын, балаһын –
Кисереп йәшәһен кеше барыһын.



Бөтә кешелек донъяһы гонаһта,
Атабыҙ бирелде гонаһҡа ожмахта.
Әҙәмдән тыуҙыҡ беҙ, ҡол булып гонаһҡа,
Тәүбә итмәһәң, китәбеҙ тамуҡҡа.

Кисерә тик беҙҙе бөйөк Хоҙайым,
"Ғәфү ит, Ғайса" тиеп һорайым.
Оло Ҡорбан булып тыуҙы Ул ерҙә,
Кешелек гонаһын алды Ул Үҙенә.

Бөйөк Хоҙайым – Ғайса Мәсих Үҙе,
Тыуҙы Мәрйәмдән, йәшәне, үлде.
Рухи көс бирелде, үлеп терелде,
Изге ҡаны гонаһ өсөн бирелде.

Уның барлығын ҡабул ит, гонаһлы,
Алла бәрәсен бирҙе Күк Аллаһы.
Ғәфү ит, Хоҙайым, гонаһлы балаңды,
Гонаһтан Һин таҙарт ҡанымды, аңымды.

Йәнемде донъяла мин Һиңә тапшырам,
Гонаһтан кисереү алырға ашығам.
Тәнемдә сағымда саф йөрәк бирәһең,
Һиндә тыныслыҡ, тормош, юл, Тәңрем

Ғәфү ит, Хоҙайым, кисер гонаһым,
Ғәфү ит, Ғайса, изге һинең ҡаның.
Ғәфү ит, Аллам – ожмахҡа ишек асыуым,
Ғәфү ит, Ҡотҡарыусым – минең яҡлаусым.

Һине ҡабул иткән, йөрәккә индергән,
Доғаң ҡыла гел саф күңелдән.
Көн һайын таҙара, йөрәк сафлана,
Алланы ярата, йәне аҡлана.

Мөхәббәт Аллаһы, йөрәкте наҙланы,
Гонаһы йыуылды, аҡланды, аңланы.
Йәшәү тик Хоҙайҙан, Бөйөк Алланан,
Әл-Мәсих-Ғайса, Мәрйәм Улынан.
Аллаға шөкөр!

*22.11.05.*

## АХРЫ ЗАМАН

Йәшәүең – йәшәүме, уйла, уҙаман,
Уйланырға ваҡыт, етте ахры заман.
Ололар һөйләне – уйланың һин әкиәт,
Тормошта күрәһең, был булды хәҡикәт.

Эйе, дөрөҫлөк күҙ йомма, тыңлаусы,
Тыуым бар, үлем бар, бар хөкөм Батшаһы.



Эсһәң дә, тартһаң да, уйлаһаң – бер үлем,
Яманмы, яҡшымы, йәшәйбеҙ – был түҙем.

Ләкин бел, иҫкәртәм, һин үле тыуғандан,
Алла Рухты алған Әҙәмдән тәү замандан.
Тәүрәттә яҙылған, рухи үле бәндә,
Алла Үҙе Ҡорбан бирә аҙаҡтан.

Ҡорбанһыҙ гонаһ йыуылмай, килә ҡандан,
Гонаһ күсә һаман балаларға быуындан.
Ҡорбан Алла Бәрәсе – әл-Мәсих-Ғайса,
Табын Хоҙайыңа, гонаһтарҙан
булмай таҙарынмайса.

Ҡәһәрле Ер, яуыз донъя, яза бирә Хоҙайым,
Хәүеф үлем, афәт үлем көтә һине көн һайын.
Нәпсе арта, алдау, урлау, үлтереү,
Һуғыш, ялған тормош, рәнйетеү һәм һүгенеү.

Кәрт һалдырыу, аҡса уйын,
ярамһаҡланыу уйың,
Кеше йәре – йылы ҡуйын,
наркотикланған буйың.
Ғәзит-журнал шәрә ҡыҙҙар
фотоһүрәтен бирә,
Алла әҙәмгә һарыҡтан тире кейем кейҙерә.

Төрлө диндә йәшәй халыҡ Алла тиеп,
Дин китаптары саҡыра гонаһтан таҙар тиеп.
Тик ишетмәй ҡолаҡтары, йөрәктәре таш
булған,
Килде ергә ахры заман, ярлыҡау һора, туған.

Аллаҡа тәүбәгә кил, кисереү ал, уҙаман,
Атлай ерҙә киң аҙымлап ахры заман.
Ҡиәмәт көнө тыуыр, кешелек йәне өсөн,
Хөкөм Аллаһы – Ғайса, һора Яҡлаусы көсөн.
Амин!

*22.11.05.*

## ЯҢЫ ТОРМОШ БИРӘ ХОҘАЙ

"Яңы тормошҡа" гәзитенә,
Урын табыр тип битенә,
Яҙырға булдым шиғыр,
Бәлки баҫылып сығыр.

Шиғырҙарым күп төрлө,
Төшәләр улар төндө.
Илһам бирә Хоҙайым,
Тик Уны мин данлайым.

Данлайым Рухи көсөн
Миңә биргәне өсөн.
Тәүбә иттем, кисерҙе,
Мәңгелек тормош бирҙе.

Мәңгелек булыр ожмах,
Иретте йөрәктә таш.
Гонаһтарҙы ярлыҡай,
Күктәге тере Хоҙай.

Йәнем тыныс Хоҙайҙа,
Гонаһлы ярлы, бай ҙа,
Айырмай гонаһ бала
Тамуҡҡа китеп бара.

Самогонды ҡояһың,
Эсеү,тартыу гонаһың.
Ғәйбәт телеңдән төшмәй,
Нисек һуң телең шешмәй.

Ҡайҙа булған намыҫың,
Ҡыҙым, ҡайҙа сафлығың?
Тәүфиҡ та юҡҡа сыҡҡан,
Һин иманды онотҡан.

Тәүҙә Хоҙай ярата,
Гонаһтарҙан таҙарта.

Динеңә Ул ҡарамай,
Иманлыны тик барлай.

Кил, дуҫым, Хоҙайға,
Юл күрһәтәм иманға.
Иманың булыр камил,
Кисерер Хоҙай, Амин!

Шиғыр яҙам йоҡламай,
Яңы тормош – тик Хоҙай.
"Яңы тормошҡа" гәзитем,
Иман һүҙенә тулһын битең.
Амин!

*23.11.05.*

## РУС ҺӘМ БАШҠОРТ ДУҪЛЫҒЫ 450-ГӘ ТУЛДЫ

Башҡортостан, тине Мостай,
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Йөрәккә оҡшаған ҡалай,
Ул Рәсәй картаһында.

Дауыллы йылдар айырмаҫ,
Йөрәк тибеше туҡтамаҫ,



Рус һәм башҡорт дуҫлығының,
Иманда, халҡым, нығын.

Иман булһа, ил торор,
Дуҫтарға табын ҡорор.
Эсемлек булһын ҡымыҙ,
Көйө – ҡурай моңобоҙ.

Илебеҙҙе данлайыҡ,
Башҡортса онотмайыҡ.
Рус телендә аралаш,
Башҡорт телендә хушлаш.

Иманлының илендә,
Тел байлығы үҙендә.
Дүрт быуат аша күпер,
Мәңгелеккә Ул илтер.

Мәңгелек Алла һүҙен,
Дүрт китап данлай Үҙен.
Тәүрәт, Зәбүр һәм Инжил,
Ҡулланма – Ҡөрьән Кәрим.

Иманда беҙ йәшәйек,
Алла бер, аңлашайыҡ.

Изге китап уҡыйыҡ,
Иманға беҙ ҡайтайыҡ.

Алла көсө – иманда.
Рус һәм башҡорт булғанда,
Дошмандар яҡынаймаҫ,
Туғандашлыҡ ҡаҡшамаҫ.

Гонаһлы һис аңламаҫ,
Алланы ул данламаҫ,
Башкортса беҙ маҡтайыҡ,
Иманда тик булайыҡ.
Амин!

*23.11.05.*

## АШЫҠ ИМАНҒА,
## ГОНАҺЛЫ БАЛА

Ашыҡ, бала, тыуымда,
Иманда булыуыңда.
Башҡа эштә ашығыу,
Бәлә-ҡазаға тарыу.

Ололар борон әйткән:
Ашыҡҡан – ашҡа бешкән.



Йәйәүләп атлаһаң да,
Бәлә – аяҡ аҫтында.

Машинала еләһең,
Елдән етеҙ китәһең.
Иманһыҙға юҡ Алла,
Афәт үлем юлдарҙа.

Ашыҡма ашағанда,
Ҡарлығырһың ашыңа.
Ашыҡма әсәң янында,
Һөйөләп туймағанда.

Ашығыу – Иблистән,
Йөрөгән ҡара көстән.
Рулдә күҙҙе бәйләй,
Кеше йәрен күҙ күҙләй.

Ашыҡма һөйләгәндә,
Ете ҡат үлсәгәндә.
Ашығыу һаулыҡ китеү,
Йәһәннәмгә ул илтеү.

Ашығыу – юҡ тыныслыҡ,
Тәнебеҙ йоҡоһоҙлоҡ.
Баш ул төрләһөн уйлай,
Уйҙарҙың осо булмай.

Ашыҡ – кәрәк килеүгә
Мотлаҡ һәр бер кешегә.
Ашығығыҙ иманға,
Тәүбә итеү Хоҙайға.

Ашыҡ таҙарынырға,
Гонаһтан арынырға.
Тән үлеме язаһы,
Алланың ихтыяры.

Кисерелеү Ул биргән,
Алла Һүҙен төшөргән.
Ул беҙҙең өсөн үлгән,
Бурысыбыҙ түләнгән.

Ашыҡ тәүбә итергә,
Аллаға һин килергә.
Иманың булыр таҙа,
Бирелмәҫ һиңә яза.

Бирелер мәңге тормош,
Йәннәттә булыр торош.
Иманда Ул терелтә,
Ожмахта Үҙе көтә.

Дүрт китапты уҡыйым,
Мин иманда, аңлайым.



Тәүрәт, Зәбүр һәм Инжил,
Ҡөрьәндә лә Алла бер.

Хоҙай юлын һайлағыҙ,
Изге китап уҡығыҙ,
Үлергә ашыҡмағыҙ,
Муйынға бау һалмағыҙ.

Килегеҙ тәүҙә иман,
Һаҡлар иманда Аллам.
Бөтәбеҙгә бер үлем,
Ләкин Хоҙайҙа – түҙем.

Иманлы ул ашыҡмаҫ,
Ҡулы ла ашҡа бешмәҫ.
Машина шәп елдермәҫ,
Тәмәке ул көйрәтмәҫ.

Хәмерҙе ул бар тимәҫ,
Һүгенеүҙе ул белмәҫ.
Күңелендә Хоҙайым,
Һаҡла һин аҙым һайын.

Доғаһы үҙе менән,
Изге Рух уның менән.
Күңеле уның сафлы,
Йөрәге уның аҡлы.

Хоҙайҙы ҡабул иткән,
Йәнен дә Уға биргән.
Һаҡла, Хоҙайым Аллам,
Үлгәс мин һиңә барам.

Әле йәшәйем әле,
Һине данлайым йәме.
Ваҡыт еткәс алырһың,
Беләм, һиңә барырмын.

Таҙарылыу көн һайын,
Ҡыуаныс аҙым һайын.
Осрашыу булыр, ҡалмаҫ,
Күңелдә үҙең булғас.

Иманымды Һин нығыт,
Доғаға һәр саҡ ваҡыт.
Яҡындарым килерен
Көн һайын мин теләрмен.

Ураҙамды ҡабул ит,
Гонаһтарҙы ары илт.
Ҡаршы тороу Иблискә,
Донъяға һәм тәнемә,
Рухымды көсәйт кенә.
Амин!

*27.11.05.*



## ИМАНЛЫ БУЛЫП ТЫУМАЙ, ГОНАҺЛЫ ТЫУА БАЛА

Тәү кеше ул тыумаған,
Алла уны яратҡан.
Ир булып яралған ул,
Балсыҡтан "яһалған" шул.

Йәннәт баҡсаһы иркен
Әҙәм һәм һауа өсөн.
Мөхәббәт булған унда,
Гонаһ та тыуған шунда.

Алла, ашама, тигән,
Ләкин улар үрелгән.
Гонаһ уларға кергән,
Алла язаһын биргән.

Алданы шайтан үрҙә,
Ожмахтың ҡап түрендә.
Әҙәмгә һәм Һауаға,
Емеш тине үлмәүгә.

Ергә ҡыуылды Әҙәм,
Тапманы донъяла йәм.
Тыуҙы балалар гонаһлы,
Иблис булды алдаҡсы.

Иблис маһайҙы күктә,
Булды ул тәү фәрештә.
Аллаға ҡаршы сыҡты,
Күктән ергә атылды.

Күренмәгән Рух ерҙә,
Йөрөй шайтан һәм ен дә.
Кеше тыуа гонаһлы,
Ҡандан килә гонаһы.

Гонаһ ҡоло биреше,
Алдау, урлау килешә.
Араҡы, һыра эсә,
Тыя алмай уны әсә.

Гонаһ ҡоло етәкләй,
Ҡара көстәр этәкләй.
Наркотик, ти, шәп нәмә,
Ҡаҙа үҙеңә энә.

Тормош булғас гонаһлы,
Ҡулын һелтәй балаһы.
Ен-пәрейҙәр шул ерҙә,
Бауын күрһәтә беләү.

Гонаһта тыуа бала,
Иманы булмай унда.



Иманды ҡабул итеү,
Булыр тәүбәгә килеү.

Алла һине ярата,
Гонаһлыны ҡарата.
Алла биргән ҡорбанды
Ҡабул ит һин ни бары.

Алла Һүҙен төшөрҙө,
Мәрйәм анаға бирҙе.
Ир булып тыуҙы Хоҙай,
Быға ышанмай булмай.

Ҡөрьәнде асып ҡара,
Ышанмаһаң һин, бала.
Ғайса Мәсих саф бала,
Оло Ҡорбан донъяға.

Йәшәп, үлеп, терелде,
Ҡөрьән дә иҫбат итте.
Тәүбә итеү юлы шул,
Кисерелеү булыр – Ул.

Шунда тыуыр иманың,
Кисерелеү Хоҙайың.
Гонаһ ҡоло булмаҫһың,
Инде гонаһ ҡылмаҫһың.

Етәкләр һине Хоҙай,
Туғандар һине ҡотлай.
Алланы тибеҙ Атай,
Һәр бала Уны данлай.

Йәннәт ишеге асыҡ,
Ожмахта йәшәү аныҡ.
Рухи йәшәүҙә нығын,
Һөйләмә һин артығын.

Ныҡ бул, донъя ҡаршылыҡ,
Иманда булыу – һаулыҡ.
Иблис артыңдан йөрөр,
Ләкин Алла көс бирер.

Ул булыр Рухи көсөң,
Йәнең мәңгелек өсөн.
Тәнең булыр ҡаршылыҡ,
Ҡалыр ерҙә ул балсыҡ.

Күктәргә китмәҫ элек,
Аллаң йөрөр эләгеп.
Бер аҙым һинән ҡалмаҫ,
Йәнгә Иблис тейә алмаҫ.



Ураҙа тот – нығыныу,
Тәнеңә ҡаршы тороу.
Тағы доғаң көс бирә,
Алла һүҙен өйрәтә.

Туғандарың күп булыр,
Улар һағынып торор,
Доға йорто Алланан,
Бик үтенеп һораһаң.

Иманлы тыумай балаң,
Гонаһлы тыуа һаман.
Һәр бере яуап бирер,
Хоҙай алдына килер.

Хоҙай – хөкөм батшаһы,
Башында Уның тажы.
Алла һүҙе – Ул Үҙе,
Бирҙе уны Тәң(е)ре.
Амин!

*28.11.05.*

## ЮРАМА ГОНАҺ,
## БУЛ ИМАНДА

Эй һин, кеше, донъяла,
Юраусыны тыңлама.
Юрау килә Иблистән,
Ен-пәрей, ҡара көстән.

Йондоҙ, имеш, теҙелгән,
Һиңә ул шуны биргән.
Юлға сыҡма һин бөгөн,
Афәт көтә, үлемең.

Ә юлға сығыу кәрәк,
Ҡартайҙы ерләү кәрәк.
Тиҙлек арттыра ҡулың,
Күҙҙе бәйләй шайтаның.

Бәлә аяҡ аҫтында,
Машина тайҙы юлда.
Тура килде, юраны,
Йәнем ҡалды, арбаны.

Арбаны һине Хоҙай,
Алып ҡалды үлтермәй.
Иаманға кил, бала, тип,
Иманһыҙға яза тип.



Доғаң һаҡлар юлыңда,
Ышанма юраусыға.
Тура килтерер һүҙен,
Иблистең ҡоло енең.

Юрама төшһә ҡалаҡ,
Килер тип өйгә ҡунаҡ.
Буш күнәк юлға сыҡһа,
Төкөрмә лә һин, ҡасма.

Ҡара бесәй ғәйепһеҙ,
Булмаҫһың һин бәхетһеҙ.
Юлың уңыр, юламан,
Иманда булһаң, балам.

Төшөңдө лә юрама,
Кәрт һалыусыға барма.
Өшкөрөүсе борондан
Ен-пәрей менән булған.

Аңла һүҙем, уҡыусым,
Юраусыға барыусым.
Тура килһә әйткәне,
Иблис шуны эшләне.

Иманда булһаң әгәр,
Доғаңды ҡылһаң мәгәр.
Тормошоңда уңышты,
Тик Алла булдырыусы.

Ҡабул ит һин Хоҙайҙы,
Булдырған ҡояш, айҙы.
Иблис этә юрауға,
Юха йылан булғанға.

Күҙем тарта һулаҡай,
Уңыш булмаҫҡа оҡшай.
Һин гонаһ ҡоло, кеше,
Йөрөтә Иблис эше.

Иманға кил, юрама,
Тәүбәгә кил Аллаңа.
Һаҡлар һине Хоҙайым,
Рәхмәтем аҙым һайын.
Амин!

*28.11.05.*



## АЛЛАНАН ТЫУҒАНДАРҒА ИБЛИС УҒЫ ҠАҒЫЛА

Ҡурҡмаҫ Алланан тыуған,
Ғайса Мәсихте алған.
Изге ҡанға мансылған,
Алла һүҙен уҡыған.

Доға ҡылһаң, килә алмаҫ,
Иблис тә яҡынаймаҫ.
Ләкин китмәҫ ул алыҫ,
Көтәлер һине алыш.

Балам, түҙергә тырыш,
Ҡылыс менән һин һуғыш.
Алла Һүҙе – ул ҡылыс,
Белмәй иманһыҙ алыш.

Бер һуғыш һәр йән өсөн,
Бирә Хоҙай Рухи көсөн.
Күренмәй торған алыш,
Аллаға Иблис ҡарыш.

Башланды һуғыш күктә,
Ожмахтың ҡап түрендә,
Был һуғыш бер туҡталыр,
Иблис тамуҡта булыр.

Тамуҡҡа тартыр кеше,
Гонаһлы булды эше.
Иманлыға ожмах бар,
Барыусыға юлда тар.

Тар юлдан барам атлап,
Алла Һүҙҙәрен ятлап.
Ҡылысты үткер тотам,
Иблис уғын һындырам.
Аллаға шөкөр!

*28.11.05.*

## УРЫН АЛДЫ АЛЛА ЙӨРӘГЕМДӘ

Урын алды Алла йөрәгемдә,
Йөрәгемдең иң түрендә.
Йөрәгемдең тәхетендә,
Әле ерҙә йөрөһәм дә.

Йәнемде тапшырҙым Уға,
Мәңгелек Унда булғанға.
Кисерелеүем Хоҙайҙан,
Һөйләрмен һораһаң – ҡайҙан.

Күктә Батшалығы Унын,
Ергә төштө Алла, Улың.



Һинең мәрхәмәтең сикһеҙ,
Гонаһлы бәндәне кисер.

Хоҙай төштө ергә бер саҡ,
Даны – Күктә, тыуҙы Ул саф.
Яҡтылыҡ килде донъяға,
Гонаһһыҙ тыуҙы ир бала.

Үҫте, мөғжизәләр ҡылды,
Әҙәмдең тәнендә булды.
Уны ҡаны менән йыуҙы,
Арҡыры ағаска ҡаҙап ҡуйҙы.

Әҙәм һәм Һауа гонаһты
Ағастан алып татыны.
Гонаһлы тән элеп ҡуйҙы,
Изге ҡан түгелеп йыуҙы.

Бөйөк гонаһлы кәүҙәне,
Йөрөттө Хоҙайым Үҙе.
Шулай кәрәк ине алдан,
Муса пәйғәмбәр бит яҙған.

Гонаһ өсөн ҡорбан кәрәк,
Мал ҡорбаны етмәҫерәк.
Әҙәм тәнле гонаһ иткән,
Тәнле ҡорбан кәрәк икән.

Ундай ҡорбан юҡ еремдә,
Гонаһ итә һәр бер бәндә.
Ибраһимдың улын да бит,
Алмай Алла, гонаһлы тип.

Алыштыра уны һарыҡ,
Булмаһын ул бик үк арыҡ.
Ҡорбан сала һау һарыкты,
Көндәге гонаһ арытты.

Әҙәмдән килгән гонаһты,
Риза итәм тиһәң Аллаһты,
Ул биргән ҡорбанға ышан,
Таҙарыныу килә Унан.

Алыштырған Ул һарыкты,
Килеп еткәс Үҙ ваҡыты.
Алла биргән Үҙ Бәрәсен,
Алла Һүҙен Ғайса Мәсихен.

Иҫбат итә Уны Ҡөрьән,
Алла Һүҙе Мәрйәмгә төшкән.
Изге Ғайса ерҙә тыуа,
Мәсих ҡоткарыусы була.

Ҡоткара тамуҡ утынан,
Күпер – гонаһ упҡынынан.



Ышанып һин иманға кил,
Бүтән юл юҡ, һин шуны бел.

Берҙән-бер юл Үҙе һалды,
Иман нуры Инжилдә ҡалды.
Ҡабул ит һин Хоҙайыңды,
Тапшыр йәнең һәм аңыңды.

Йөрәк менән ҡабул итһәң,
Йәнемде һин таҙарт тиһәң.
Аңымды Һин ялма, аңла,
Уйымда бул, сыкма, Алла.

Биргән дарманың яҙҙыра,
Шиғыр юлдары һалына.
Йыр булып та яңғыраһындар,
Килер иман – гонаһлылар.

Таш йөрәкте иретерлек,
Гонаһ ҡолона ireклек
Бирәһең Хоҙай – мәңгелек,
Элек бирҙең һәм бөгөнлөк.

Кисерелеү тик Һинән,
Алланың Бәрәсенән.
Ҡорбан булып терелдең,
Мәңгелек ғүмер бирҙең.

Рәхмәтем сикһеҙ, Тәғәлә,
Һиндә генә тормош, мәғәнә.
Йәшәүем һинең өсөн,
Хеҙмәтем, Рухи көсөм.

Риза бул хеҙмәтемә,
Өйрәт Үҙең тәнемә.
Кәрәк сакта һин һөйләт,
Йыр йырлаһам, һин көйләт.

Данлайым тик һине мин,
Йыуатаһың мине һин.
Ҡыуанысым да һиндә,
Ҡоткарыусым, һин миндә.

Йәшәүемдең миҙгеле,
Нисә икән? – билдәле.
Тыуҙым һинән данларға,
Барыңды иҫбатларға.
Амин!

*28.11.05.*



## ДАНЛАҺЫН ХОҘАЙҘЫ ТЕРЕКЛЕК

Тереклек – тын алыу, йәшәүең,
Алланың барлығын беләһең.
Үләндәр, бөжәктәр, хайуандар,
Тын ала, Алланы данлайҙар.

Үләндәр үҫәләр ҡояшка үрелеп,
Һыу эсә, үрсейҙәр донъяға йәм булып.
Бөжәктәр осалар сәскәнән сәскәгә,
Туҡлана-данлайҙар Тәң(е)рем сәскәнгә.

Һәр ҡошсоҡ тауышы – Аллаға дан йыры,
Тумыртка туҡылдай, кеткелдәй тауыfew.
Һандуғас моңаймай, Хоҙайға дан йырлай ,
Тын алған тереклек, Алламды тик данлай.

Хайуандар тауышы, Хоҙайҙың булмышы,
Күмелгән тәбиғәт, тереклек ауазы.
Тик асмай дан тиеп кешелек ауазы,
Йөрәк таш, ҡурка йән, гонаһта ҡалыуы.

Иманға кил, данлыҡ яҙырһың Аллаға,
Гонаһың йыуылғас, рәхмәтең Хоҙайға.
Дарманың тик Унан, тереклек Аллаҙан,
Һулыш алыуың Хоҙайың булғандан.

Тын алыу туҡтатыр Хоҙайың бер заман,
Иманлы йәннәткә юл алыр уҙаман.
Тик Ерҙә һин данла, Аллаға барырһың,
Иҫбат ит, тереклек, Хоҙайым барлығын.
Амин!

*28.11.05.*

## ҠӘҺӘРЛӘМӘ, АЛЛА ҠУШМАЙ

Ҡәһәрләне Ерҙе Алла,
Гонаһ ҡыуылды донъяға.
Гонаһ менән тыуа бала,
Тереклек тулған гонаһҡа.

Бөжәктәр үҫемлек ашай,
Сәсәләр ағыу йыландай.
Сәскә түгел, сәнске үҫте,
Йырткыс хайуан ашау китте.

Үлән ашаны ожмахта,
Арыҫлан, хатта жираф та.
Ҡәһәрле ер – ҡый үләне,
Тулды паразит бөжәге.



Тырыша әҙәм, үкенә,
Ҡәһәрле ерҙә үҫтерә
Ашай торған ризығын,
Күрә гонаһ-язаһын.

Тик ҡәһәрләмә, кеше,
Дошманыңды, күршеңде.
Ул да әҙәм балаһы,
Ҡәһәрләй тик Аллаһы.

Аллаға тапшыр барыһын,
Ғәфү ит һин барыһын.
Ризалыҡ бирһен Алла,
Уй булмаһын алама.

Һуң түгел, һин илама,
Килер ваҡыт иманға.
Һуңғы сәғәт бит һуғыр,
Шул ваҡытта һуң булыр.
Амин!

*28.11.05.*

## ИМАН ҺҮҘЕ

Гонаһлы бөтә кеше,
Ярата Алла беҙҙе.
Гонаһ булыу ҡарамай,
Әҙәм балаһын барлай.

Тәүбәгә килер юлын,
Ебәргән үҙе улын.
Алла Һүҙен – Мәрйәмгә,
Изге Рухын – Әҙәмгә.

Әҙәм тәнле ир бала,
Мәрйәмдең ҡорһағында.
Атайһыҙ тыуа бала,
Алла ҡарамағында.

Ҡөрьән быны иҫбатлай,
Ғайса Мәсих саф малай.
Мөғжизәләр күп булды,
Үләләр тере булды.

Һуҡырҙар күрер булды,
Аҡһаҡтар торор булды.
Үлеп терелде Ғайса,
Дан, сәләм булһын Уға.



Шикләнмә һин, ҡабул ит,
Гонаһтарҙан ярлыҡ ит.
Килгән Хоҙай, йөрөгән,
Ҡорбан булып ул үлгән.

Өс көндән һуң терелгән,
Ожмахҡа Ул мендергән,
Хөкөм батшаһы иткән,
Сөнки Һин лайыҡ, тигән.

Кеше Һиңә төкөрҙө,
Таш бәрҙе һәм екерҙе.
Түҙҙең шуға Һин, Балам,
Хөкөмдә һиңә һалам.

Алланды риза иттең,
Ҡорбаның ҡабул һинең.
Булдың Һин оло Ҡорбан,
Мәрхәмәт Һиндә, Балам.

Һарыҡ ҡорбанын алмам,
Тәнле ҡорбанды алам.
Ундай тән юк донъяла,
Гонаһлы һәр бер бала.

Ибраһимдың балаһы,
Гонаһлы булып тыуҙы.
Ҡорбан алманым унан,
Һарыҡ тәкәһе ҡулдан.

Был ҡорбан ул бер көнлөк,
Гонаһты йыуҙы элек.
Ләкин бурыс түләнде,
Ғайса ҡаны түгеде.

Тәне хажға эленде,
Шунда тороп ул үлде.
Ағасҡа ҡайтты гонаһ,
Ҡаҙалды шунда Илаһ.

Гонаһ йыуылды ҡанға,
Изге ҡаны булғанға.
Изге ҡаны Ғайсаның,
Риза бул һин, Атайым.

Атам тиер һәр кеше,
Гонаһ булмаһа эше.
Ғайсаны ҡабул итһә,
Ғәфү ит, Хоҙай, тиһә.

Гонаһтарым ярлыҡа,
Ышанам Һин барлыҡҡа.



Изге Рухың бир миңә,
Иман итәм мин Һиңә.

Иманым Һиндә – камил,
Әйтәмен шуға – амин.
Йәннәт ишеге – Һин,
Ҡыл күпере тик Үҙең.

Юл, хәкикәт тик Һиндә,
Йырым булһын Үҙеңә.
Мәңге тормош Һин Үҙең,
Алла икмәге Үҙең.

Һөйләйем мин тик Алла,
Йырым да булһын Уға.
Унһыҙ йәшәй алмайым,
Ғәфү ит, Хоҙайкайым.

Гонаһта мин тыуғанмын,
Иманлы тип алдандым.
Иман тик Хоҙайымда,
Уның изге ҡанында.

Тәүбә килгән таҙара,
Йөрәктәре ағара.
Күңелдәре сафлана,
Иманға ҡайта бала.

Балам, һине беләмен,
Иманың юҡ, күрәмен.
Иманһыҙҙар күп бында,
Хәйбулла районында.

Иманлы бала эсмәй,
Алкогольды ул белмәй:
Һыра, араҡы, вино,
Самогоны, бурҙаһы.

Барыһын ғәфү итә,
Яман һүҙ телдән китә.
Уйы була изгелек,
Сәләм бирә иң элек.

Алла Һүҙе уйында,
Инжил тота ҡуй(ы)нында.
Ятлай ул Алла Һүҙен,
Күрә тормош көҙгөһөн.

Бар ғүмерең барларһың,
Ниңә йәшәү – аңларһың.
Барабыҙ беҙ Хөкөмгә,
Ҡиәмәт көнө бергә.

Үлем килер төрлөсә,
Үлмәйбеҙ үҙебеҙсә.



Иманлыға йәннәткә,
Хоҙайға килеүсегә.

Йәһәннәм иманһыҙға,
Дин тотоп тороусыға.
Намаҙын ҡылыусыға,
Эстән таҙармаусыға.

Эстән таҙарыу мөһим,
Сынаяҡ түгелһең һин.
Тыштан тик чиста булыу,
Түгел иманда тороу.

Тормош булһын гел айыҡ,
Эсеү, балам, ҡуяйыҡ.
Башҡорт эсһен ҡымыҙын,
Өйрәтһен шуға улын.

Эскелекһеҙ булһын туй,
Араҡыны, улым, ҡуй.
Дүрт китапта мәғәнә,
Алла бер, ти Тәғәлә.

Хоҙай бар – Ул эргәңдә,
Кермәгән йөрәгеңә.
Иманлыҡҡа көсләү булмай,
Ихтыяр бирә Хоҙай.

Иман бирә тик Хоҙай,
Килегеҙ һеҙ һуңламай,
Ҡыҙым, улым Хоҙайға,
Мәрхәмәтле Аллаға.
Амин!

*28.11.05.*

## ОЛО ҠОРБАН

Гонаһ ожмахта тыуған,
Әҙәм һәм Һауа булған.
Емешкә баҡса тулған,
Баҡсала ағас торған.

Ағаска яҡын барма,
Емешен уның алма.
Алһаң, үлемең булыр,
Гонаһың һиндә тыуыр.

Алла бирҙе ихтыяр,
Белде, емешкә тейәр.
Бер генә тыйыу ҡуйҙы,
Ынтылды тәүҙә ҡыҙы.

Иблис бик маһайған,
Фәрештәлектән туйған.



Алла булғыһы килгән,
Маһайыу – гонаһ, белгән.

Мин генәме гонаһлы,
Булһын Әҙәм гонаһлы.
Алдайым әле үҙен,
Кереп баҡсаға Эдем.

Алдағанды белмәҫтәр,
Йылан мин, тип күрмәҫтәр.
Ағаска ылыктырам,
Емеште мин ҡаптырам.

Әҙәм рухы нык, түҙҙе,
Татлы һүҙҙе ул һиҙҙе.
Алланы тыңлау кәрәк,
Тыйыуҙы үтәү кәрәк.

Ләкин Һауа үрелде,
Гонаһка ул бирелде.
Ауыҙ итте емеште,
Тәмле-татлы килеште.

Бирҙе Әҙәм ҡулына,
Гонаһ керҙе ҡанына.
Бөтә тән гонаһ итте,
Тәғәләм килеп етте.

Тауыш бирҙе: кил, балам,
– Мин шәрә бит, оялам.
– Тыйған емеш ашаның?
– Бирҙе миңә ҡатыным.
-– Ҡыҙым, һин ниңә алдың?
– Бирҙе миңә йыланың.
– Тыңламанығыҙ һүҙем,
Кешеһеҙ ҡалды Эдем.

Гонаһты кер(е)ткәнгә,
Яза бирәм Иблискә.
Йәшә һауала, ерҙә,
Шайтандар менән бергә.

Ғүмерең һинең ҡыҫҡа,
Китерһегеҙ тамуҡҡа.
Еңер һине ир бала,
Ҡыҙ орлоғонан тыуа.

Һауаға бирә яза:
Ыҙаланып тап бала.
Әҙәм, тирләп ер эшкәрт,
Ғаиләңде һин ашат.

Ҡәһәрләйем мин ерҙе,
Ерҙәге тереклекте.



Үлгәс ергә китерһең,
Балсыҡ булып серерһең.

Гонаһ Әҙәмдән китте,
Был көнгә килеп етте.
Гонаһтан бар ҡотолоу,
Мәрйәмдән Хоҙай тыуыу.

Ҡөрьәндең сүрәһендә,
Йыландар сүллегендә,
Сағылғандар үлмәгән,
Баҡыр йылан күргәндән.

Ҡорбан салған гонаһлы,
Бер ғәйепһеҙ һарыҡты.
Бер гонаһын йыуған ул,
Ҡандағыһы ҡалған шул.

Ҡандағыһы йыуылды,
Тәңре һүҙе Һүҙ булды.
Оло Ҡорбан бирелде,
Мәсих Алланан килде.

Үҙ-Үҙен иҫбат итте,
Хоҙайығыҙ мин, тине.
Мөғжизә күрҙе ғаләм,
Ышанманы, тән – Әҙәм.

Хоҙай тәнле буламы,
Кеше Алла буламы.
Үлтерер кәрәк Уны,
Кеше был гонаһ ҡоло.

Бәрәс һымаҡ барҙы Ул,
Арҡыры ағаста үлде Ул.
Кеше гонаһы – Үҙендә,
Бурысты түләне Тәңрегә.

Еңеү килде бер заман,
Хоҙай тән булып тыуған.
Ҡан изге – гонаһ өсөн,
Бирә Ул Рухи көсөн.

Тере Хоҙай Мәсихем,
Бирҙе йәнен, ғүмерен.
Йәшәһен тиеп кеше,
Иманлы булһын эше.

Ҡабул итер Тәң(е)ре
Һине йәннәткә Үҙе.
Ғайса ҡаны – ышанһаң,
Иманда һин нык булһаң.
Амин!

*29.11.05.*



## БАЛЫҠСЫ БУЛ, ТИНЕ АЛЛАМ

Балыҡсы бул, ти Аллам,
Бирәм мин үҙем ярҙам.
Балыҡ йөҙә диңгеҙҙә,
Гонаһлы – ҡара ерҙә.

Балыҡ тоторға өйрән,
Ауҙы һал һин бик тәрән.
Шунда буш булмаҫ ауың,
Тотһаң ҡулда китабың.

Балыҡ булыр иманһыҙ,
Алла күрә – тәүфиҡһыҙ.
Гонаһлы Ерҙә бәндә,
Алла бар тип белмәһә.

Балыҡ тотам, оҫтарам,
Өйрәт мине, Һин, Аллам.
Күңелемә һалып ҡуй,
Бир Һин миңә яҡты уй.

Балыҡтарҙы Үҙең ҡыу,
Эсерербеҙ тере һыу.

Һыуһаған, сарсағанға
Юл өйрәтәм Хоҙайға.

Балыҡсы пәйғәмбәрҙәр,
Артынан йөрөгәндәр.
Өйрәтеп ау һалырға,
Балыҡты күп тоторға.

Аллам, Һин Үҙең миндә,
Балыҡ тотабыҙ бергә.
Ҡармаҡлау үтте ваҡыт,
Ауға тотайыҡ балыҡ.

Ҡайҙа балыҡ күберәк,
Һалам ауҙы тиҙерәк.
Ваҡыт бит уҙып бара,
Ғүмерем етмәҫ, ҡара.

Кеше ғүмере ҡыҫҡа,
Ышанмайым һаулыҡҡа.
Ышанамын тик Һиңә,
Хоҙайым Тәғәләмә.

Бар тотолған балыҡтар,
Иманда үҫә улар.
Таҙа һыуҙа йөҙәләр,
Һин барлығын беләләр.



Һаҫыҡ һыуҙа йөҙгәндәр,
Бар араҡы эскәндәр.
Быс(ы)раҡ һыу үлтерә,
Тамуҡҡа алып китә.

Был донъя – ағыулы һыу,
Балыҡтарҙы ауға ҡыу.
Ишет Һин, Хоҙайҡайым,
Һинһеҙ булдыра алмайым.

Алып сыҡ таҙа һыуға,
Туғандарҙың барын да.
Иремде Һин ҡалдырма,
Булһын Һинең янында.

Диңгеҙ шаулай, ағыулы,
Йота хәлһеҙ балыҡты.
Көн дә улар үләләр,
Йәһәннәмгә китәләр.

Ағыу булды тәмәке,
Ауыҙ һүҙе – әшәке.
Наркотик, араҡыһы,
Һыра һәм самогоны.

Ағыуланды был донъя,
Азартлы уйындарға.

Фәхишәле ҡыҙҙарға,
Экстрасенс апайҙаға.

Күрәҙәсе күрәме?
Ниндәй һыуҙа йөҙгәне?
Кино, гәзит, журналы,
Шәрә ҡыҙҙар торғаны.

Иблис ике мөгөҙ,
Хоҙайға тик йөҙөгөҙ.
Ҡапҡаны – антенналар,
Өй һайын телевизор бар.

Ни күрһәтмәй экраны,
Йөҙҙөрә ул баланы.
Тарта гонаһ упҡыны,
Уның һәр бер каналы.

Таҙартып булмай һыуҙы,
Һөҙөп булмай ағыуҙы.
Күпме закон сығарҙы,
Хөкүмәт тә арыны.

Талыу белмәй Хоҙайым,
Көн-төнөн мин һорайым.
Доғаларын ҡыламын,
Тағын бир Һин дарманың.



Ауҙы беҙ киң үрәйек,
Балыҡсы күбәйтәйек.
Иман һүҙен әйтәйек,
Тере һыу эсерәйек.

Үлеп бара балыҡтар,
Ағыуланалар улар.
Ғәрип тыуа кәүҙәһе,
Зәғиф булмаһын йәне.

Килтерәйек иманға,
Ынйы сәсеп аңына.
Алла Һүҙе ул алтын,
Быс(ы)раҡ һыуҙа – ялҡын.

Ҡояш ялҡынын күрер,
Балыҡтар үҙе килер.
Өҫкә табан йөҙөрҙәр,
Ҡанаттарын килерҙәр.

Йәшәргә ынтылырҙар,
Иман һыуын ҡосорҙар.
Ғәфү ит, тип һорарҙар,
Гонаһтарын ҡоҫорҙар.

Ғәфү итеү Хоҙайҙа,
Уның изге ҡанында.

Бирер һиңә тере һыу,
Ғайса Мәсих – Алла Ул.

Тәүбәгә кил, һин үле,
Йөҙәһең һин гел кире.
Тәүбә һора Хоҙайҙан,
Килде бит ахры заман.

Терелерһең иманда,
Аҡланырһың ҡанында.
Ҡаны изге Ғайсаның,
Таҙарыр йөрәк аңың.

Йөҙөрһөң һин ыңғайға,
Таянырһың Хоҙайға.
Йәшәрһең һин иманда,
Аллаң булыр янында.
Амин!

*29.11.05.*

## МИН ЯРАТАМ АЛЛАНЫ

Мин яратам Алланы,
Гонаһтан таҙаланы.
Мәңгелек ғүмер бирҙе,
Йөрәктә хәҙер Үҙе.



Күңел күҙем асылды,
Гонаһтар төшөп ҡалды.
Гонаһ ҡоло быҒауым,
Алда тере Хоҙайым.

Иблис булды хужа,
Тәнемдә булғас яза.
Йөрөттө ул гонаһҡа,
Ихтыярым булһа ла.

Тәнгә яза Алланан,
Әҙәм төшкән ожмахтан.
Тән менән гонаһ итте,
Ашаны бит емеште.

Ҡанға күсте гонаһы,
Алланы тыңламауы.
Гонаһ ҡоло ул булды,
Тәнгә быҒау һалынды.

БыҒау һәр иманһыҙҙа,
Күренмәй ҡулығыҙҙа.
Йөрөтә бит Иблис,
Ерҙәге ҡараңғы көс.

Эсертә кешегә араҡы,
Булмаһын дихлофос яраҡлы.

Тәмәке тарттыра ағыулы,
Һүгенә тыялмай ауыҙҙы.

Йоҙ(о)роҡ төйә ул әсәгә,
Туҡмаҡ тиҙ эләгә бисәгә.
Ғаилә таркала, бутала,
Ҡыуана Иблис шуға ла.

Атайһыҙ тыуалар балалар,
Тыялмай йәштәрҙе ололар.
Наркотик иҫертә аҡылың,
Булырмы Аллаға ҡайтырың.

Урлаған байытыр донъяһын,
Нәпсеһе туҡтамаҫ гонаһың.
Алдауға ҡоролған йәшәүең,
Иблис ҡыҫҡарта ғүмерең.

Йөрәгем түрендә Хоҙайым,
Шиғырҙы мин Уға арнайым.
Данлайым, мактайым Үҙеңде.
Йәнемдәй күрәм мин Үҙеңде.

Яратаһың бөтә кешеңде,
Данлайым Ерҙә эшеңде.
Кисерәһең килгән кешеңде,
Яратам шуға Үҙеңде.



Яратам мин Һиндә булғанға,
Бер ваҡыт мин Һинән тыуғанға.
Яратам Һин Атай булғанға,
Кисереп гонаһты алғанға.
Аллаға шөкөр!

*30.11.05.*

## ВАҠЫТ ЕТТЕ ИМАНҒА

Ерҙә йәшәү дәүерен,
Һәр бер кеше ғүмерен,
Аллам үҙе сикләгән,
Мәңгелек тә бар тигән.

Йәнебеҙгә мәңгелек,
Иманға кил иң элек.
Тәү заман – Тәүрәттә
Ахры заман сиратта.

Эйе, етте ахыры,
Замандың аҙаҡҡыһы.
Борон әйтте олатай,
Булыр ул заман шулай.

Донъя үҙе боларыр,
Төрлө ауырыу булыр.

Кешеләр кейер күлдәк,
Ялан сәскәһе – биҙәк.

Ерҙең көсөн күрерҙәр,
Күбәйер тет(е)рәүҙәр.
Дауыл булыр аждаһа,
Йотар ул ҡалаһын да.

Диңгеҙ һыуы ҡоторор,
Күпереп ҡайнап торор.
Кеше йәйәү йөрөмәҫ.
Үлем дә һайлап килмәҫ.

Туҡ булыр, күптәр ҡоҫар,
Ҡалған аслыкҡа дусар.
Йүгәнһеҙ булыр теле,
Тәртибе булыр кире.

Тәртипһеҙ булыр ҡыҙҙар,
Ирһеҙ бала табырҙар.
Донъяла китер боҙоҡ,
Ир ирҙе ятыр ҡосоп.

Ҡыҙ ҡыҙҙы йәнем тиер,
Малды ла ҡатын итер.
Боҙоҡлоҡ шуға етер,
Яһалма енес китер.



Бала әсәне белмәҫ,
Ата баланы күрмәҫ.
Тыуыр бала ташланыр,
Әсәйлектән ҡыҙ талыр.

Йыйылырҙар ҙур йортка,
Ҡарт атай менән ҡортка.
Кәрәкмәҫ балаларға,
Күрәһең файҙаһыҙға.

Донъя көтөр алдашып,
Байыр бәндә урлашып.
Һуғыш ҡубыр донъяла,
Аптырама һин, бала.

Йәне тыныслыҡ тапмаҫ,
Йоҡо йоҡоло булмаҫ.
Бөтөр ерҙә дуҫлыҡ та,
Көс булыр яманлыкта.

Кеше булыр ялағай,
Һүҙҙе белмәҫ – ярамай.
Ярамһаҡланыу уйы,
Башында көнө буйы.

Ултырыр һорап мөйөш,
Уның өсөн шул килеш.

Эше юҡ уның, имеш,
Ялҡаулыҡ уға килмеш.

Дин йорттары күп булыр,
Эсе уның буш торор.
Ҡыҙҙар һатыр үҙ тәнен,
Ҡәҙерләмәҫ үҙ йәнен.

Үҙ үлемен көтә алмаҫ,
Аллаға тапшырмағас.
Иблискә бирер йән,
Үҙ-үҙен бауға элгән.

Ваҡыт етте иманға,
Еттек ахры заманға.
Боронғоларҙың һүҙе
Тормошҡа ашты үҙе.

Был һүҙ китапта булған,
Боронғолар уҡыған.
Тәүрәт бит тәү донъяһы,
Зәбүр маҡтау йырҙары.

Инжилдә иман нуры,
Ҡөрьән раҫлаусы шуны.
Был ерҙә булды яза,
Туфан һыу, ялҡын алда.



Иман юлы Аллала,
Күрһәткән Ул донъяла.
Ҡөрьән юлы иҫбатлай,
Тыуған ергә саф малай.

Фәрештә төшкән ергә,
Күренгән Ул Мәрйәмгә.
Алла һүҙен төшөргән,
Ҡорһағында Ул үҫкән.

Ғайса тигән исем ҡуш,
Алла Һүҙе булмаҫ буш.
Ҡотҡарыр Ул гонаһтан,
Булыр ерҙә Ул ҡорбан.

Уның тәне Әҙәмдән,
Рух, йәне – Тәғәләнән.
Алла Уны майланы,
Мәсихте Ул һайланы.

Алла һүҙе тән булды,
Мәрйәмдә Ул яралды.
Йәнен бирҙе, данланы,
Изге ҡаны ҡойолдо.

Изге ҡаны таҙарта,
Йөрәктәрҙе ағарта.

Әҙәмдән ҡандан гонаһ,
Ғайса Ул изге Илаһ.

Ерҙә мөғжизә ҡылды,
Йөрөгән Хоҙай булды.
Ышанып кил һин уға,
Үлеп терелгән Алла.

Тере Хоҙай Ул ерҙә,
Йөрөй гелән эргәңдә.
Керет һин йөрәгеңә,
Ғәфү ит, тип Тәңреңә.

Гонаһтарыңдан танма,
Ул белә, яҙып бара.
Ышанып иманға кил,
Тәүбәңде көтә Ул гел.

Йәнеңде тапшыр уға,
Йәшәтер Ул донъяла.
Маҡтау булыр Хоҙайға,
Уның изге ҡанына.

Алланан һин тыуғанһың,
Доғаңды һин ҡылырһың.
Алла йорто эсендә,
Тыныслыҡ булыр һиндә.



Тәү Әҙәм һынау үткән,
Һынауҙа ул бирешкән.
Бер бөртөк һынау булған,
Ашауҙан тыйылмаған.

Ашама был емеште,
Эдем баҡса һинеке.
Емеш булмаған хикмәт,
Тыйыуҙы үтәү кәрәк.

Күпме һынау был Ерҙә,
Тыйылыу кәрәк беҙгә.
Татлы емеш-эсеүҙән,
Тартыуҙан, һүгенеүҙән.

Алдауҙан һәм урлауҙан,
Әшәке һүҙ ауыҙҙан.
Наркотик ҡулланыуҙан,
Самогонды ҡойоуҙан.

Нәпсене тыймау килер,
Ауырыу булып елер.
Иманға килер байыу,
Ауырыуға сик ҡуйыу.

Гонаһың килә ҡандан,
Килә тәүге быуындан.

Быуын быуынға бирә,
Бел, гонаһ шеше үҫә.

Нәпселек тә тиҙ арта,
Тәбиғәт тә бысрана.
Күп сығарыу химикат,
Кеше йәненә ул ят.

Тәненә ят нәмә ул,
Алергия була шул.
Үпкәгеҙ ҡабул итмәй,
Тын ҡыҫа, тамаҡ үтмәй.

Эшләйбеҙ беҙ ағыуҙы,
Самогон, араҡыны.
Ағыуланған тәнебеҙ,
Дарыуын эҙләйбеҙ беҙ.

Спид баҫты ер шарын,
Наркотиктан һин арын.
Инде грипп ҡоштарҙа,
Һауала осоп бара.

Ғәйепләйбеҙ уларҙы,
Теле юҡ бахырҙарҙы.
Беҙ бысраттыҡ һыуҙарҙы,
Алла биргән һауаны.



Тәбиғәттә эше юҡ,
Байығанға юл асыҡ.
Ул үҙен генә уйлай,
Тамуҡҡа юлы ыңғай.

Алла, ти, мине эҙлә,
Йондоҙҙарҙы һин күҙлә.
Минең эшем күрәһең,
Иманһыҙ һин үләһең.

Емеш бирә яманлыҡ,
Бирҙе бергә яҡшылыҡ.
Белемең артҡан һайын,
Яман килер моғайын.

Телевизор яҡшы нәмә,
Бәйләнһәң, яман килә.
Компьютер яҡшы нәмә,
Ауырырһың бәйләнмеш.

Азарт уйын отошло,
Кит тиҙерәк һин, юлсы.
Еңел табыш гонаһ, бел,
Ең һыҙғанып эшлә гел.

Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ,
Тыйған емеш ашамлыҡ.

Береһенән береһе ҡалмай,
Гел бергә атлай шулай
.
Изге тиһең үҙеңде,
Эстән кем белер һине.
Тик Алла ғына белә,
Эстән яманды күрә.

Үҙеңде һынап ҡара,
Эштә яҡшы һин бала.
Кешегә итәғәтле,
Маҡтайҙар, изгелекле.

Өйҙә һин бит киреһе,
Торғаны бер тиҫкәре.
Йүгәнһеҙ ат кеүек һин,
Алла адында кем һин?

Эйе, гонаһ артығы,
Алдаҡсы һин, маскалы.
Маска бит һинең тәнең.
Гонаһлы һинең йәнең.

Күпме яҡшы булһаң да,
Хәйер, доға ҡылһаң да.
Алла күрә уйыңды,
Йәшерә алмаҫ яманды.



Яман эстә, ҡаныңда,
Һаҫыҡ эрен бар унда.
Таҙарта уны Хоҙай,
Изге ҡанына буяй.

Ваҡыт етте иманға,
Ерҙәге һәр балаға.
Иртәгә бит һуң булыр,
Сәғәт ҡыңғырау һуғыр.

Һуңғы сәғәт билдәһе,
Аллаға килер мәле.
Иман – тере Хоҙайға,
Аллаһы Тәғәләгә.

Хөкөм көнө – ҡиәмәт,
Йәнебеҙ беҙҙең ҡиммәт.
Бурысыбыҙ түләнде,
Һатып алды Тәң(е)ре.

Ҡиммәт булды Аллаға,
Һатып алды Ул ҡанға
Һәр бер йәнде донъяла,
Изгелекле бер Бала.

Иманға килгән генә,
Кисерелеүҙе һиҙә.

Изге Рух Ғайса бирә,
Алланы күңел белә.

Иманға ынтылығыҙ,
Тере һыу алырһығыҙ,
Ғайса – юл һәм хәҡиҡәт,
Тормошта булыр Икмәк.
Амин!

*04.12.05.*

## ИМАНҺЫҘҘЫҢ КҮҘЕ ЙОМОҠ – ЯПҠАН ҠОРМА, ОЛО ҒАЗАП ИМАНЛЫНЫҢ ҺҮҘЕН ҠАҠМА.

*Ҡөрьән, 2с-7а.*
*Күнелдәре, ҡолаҡтары һаңғырауҙар*
*Алла янына кире ҡайтарылмайҙар.*
*Ҡөрьән 2с -12а.*

*Башҡорт телендә данлайым*
*Аллаһы Тәғәләне*

Башҡорт телендә яҙам
Шиғырымды, Тәғәләм.
Данлайым бар эшеңде,
Телем, халҡым, илемде.



Башҡортостан илендә,
Урал арты ерендә.
Ҡылған үҫкән далала,
Мәрхәмәтең бар, Алла.

Ҡар яуҙыраһың ҡышын,
Юрған аҫтында – ужым.
Ямғырың яуа ләйсән,
Халҡың сапһын тип бесән.

Ҡояшлы көн бирәһең,
Башаҡ бешһен тиһең.
Кешеләр иген һуҡһын,
Тамаҡтары туҡ булһын.

Хөкүмәтең бит йөрөй,
Һыуһаҡлағыстар төҙөй.
Һаҡлап ҡалды урманды,
Газ торбалары һалды.

Йылға аша күперҙәр,
Тигеҙ асфальтлы юлдар.
Яңы бейек биналар –
Бөтәһе Һинән былар
.
Маҡтарлыҡ, Хоҙай, эшең,
Тәбиғәт күренешең.

Бейек ҡаялы тауҙар,
Урманда күп хайуандар.

Алла бирә, ти халҡым,
Тик даның һинең артһын.
Башҡортом Алла тиһен,
Доғаға ул теҙләнһен.

Иманлы йәшәйек беҙ,
Иманға Үҙең килтер.
Ылыктыр башҡортомдо,
Ергә яуҙыр ҡотоңдо.

Ямғыр кеүек һибелә,
Иманһыҙлыҡ – ул бәлә.
Бәлә аяк аҫтында,
Афәт, үлем юлдарҙа.

Хәйбулла – сикһеҙ дала,
Акъярға аҡ ҡар яуа.
Урамдарҙа аҡ балаҫ,
Ҡар күңелде аҡламаҫ.

Ҡарттар йөрөй мәсеткә,
Йәштәр эсә кафела.
Ҡартайғас барыу уйы,
Үләләр йәшләй көйө.



Хәмер эсеү ҡайҙа ла,
Ҡөрьән быны тыйһа ла.
Хоҙайға килеү мотлаҡ,
Шунда булыр күңел аҡ.

Нишләп улар аңламай,
Аңды хәмер томалай.
Йоҡламай үпкә, төтөн,
Тәмәке көйрәтеүең.

Нәпсе арта, байыта,
Хәләл ит "Олимп" һата.
Хәмер шешәһе тулды,
Динең һуң ҡайҙа булды?

Аҙым һайын магазин,
"Татлы" емеш күрәһең,
Төрлө сортлы тәмәке,
Шәрә ҡыҙыҡай кәрте.

Парнография тиеп,
Хөкүмәт тыйҙы элек.
Типография баҫа,
Шәрә ҡыҙ күҙен ҡыҫа.

Тәнен баҫа гәзиткә,

Тәнен һата егеткә,
Сафлығың ҡайҙа, ҡыҙым?
Тәүфиғың ҡайҙа, улым?

Күҙен йомған балалар,
Наркотик ҡаҙай улар.
Уйҙарын томалайҙар,
Һуңынан ауырыйҙар.

Әсәй түгә күҙ йәшен,
Атай түҙә, нишләһен.
Яҡшы һүҙ юҡ баланан,
Күңеле томаланған.

Был михнәттән сығыу бар,
Шиғырымды тыңлап бар.
Иман ғына ҡоткара,
Һаҙлыктан тартып ала.

Мәсеткә бармаҫ балаң,
Доғам ишетә Аллам.
Йәштәргә кәрәк бөгөн.
Доға йорто төҙәлһөн.

Башҡорт телендә доға,
Уларға килеш була.



Дөрөҫ юлға сығарыр,
Иман уны ҡоткарыр.

Шайтан тыуҙыра уйнаш,
Әсә йөрәгенә таш.
Атайһыҙ балалар тыуа,
Ҡыҙлыҡ юҡ, мода ҡыуа.

Быс(ы)раҡ бит был донъя,
Ҡәһәрле Ер булғанға,
"Татлы" емеш ашайбыҙ,
Иблисте ҡыуалайбыҙ.

Ҡыуырға хәлебеҙ юҡ,
Сөнки иманыбыҙ юҡ.
Хоҙайға килһәң әгәр,
Иманлы булһаң мәгәр,

Изге Рух көсөн бирер,
Шайтаның ары китер.
Тыуғанһың гонаһ менән,
Таҙарын иман менән.

Бушлай бирә ҡоткарыу,
Хоҙайҙан уны алыу.
Һора унан кисереү,
Тере Һыуҙы эсереү.

Тере һыу – Алла һүҙен,
Ҡөрьәндән уҡы үҙең.
Шул һыуҙы мин эсәмен,
Алла һүҙе икмәгем.

Килтерҙе мине Алла,
Тере иман юлына.
Тере Хоҙай үҙемдә,
Ҡорма ине күҙемдә.

Пәрҙәне Алла элгән,
Эҙләһен мине, тигән.
Гонаһлы булдың бәндә,
Иманды эҙлә көн дә.

Иман юлын беләм мин,
Өйрәтермен һине мин.
Дин менән генә булмай,
Иманға кил һин, апай.

Гонаһлы бөтә кеше,
Гонаһлы булыр эше.
Иманға диндә эҙләй,
Шайтандар һине күҙләй.

Ҡотҡарыусы Хоҙайым,
Кил иманға, туғаным.



Доғам тик һинең өсөн,
Бирһен Хоҙайым көсөн.

Ылыҡтырһын Ул һине,
Юлыма сыҡһаң ине.
Һөйләрмен изге һүҙҙәр,
Асылыр һинең күҙҙәр.

Хоҙайым асыр уны,
Аңлаһын тип гонаһты.
Иман булһын ынтылыш,
Үҙең килергә тырыш.

Алланы кеше эҙләй,
Хәйер тип артыҡ түләй.
Әллә ҡайҙан эҙләмә,
Алла эргәңдә генә.

Тере Хоҙай янында,
Ал һин уны аңыңа.
Изге Рух һиңә бирер,
Башҡортса доға килер.

Алла менән серләшеү,
Хоҙай менән һөйләшеү –
Доғаң булыр шул үҙе,
Ятламайһың һин һүҙҙе.

Ятлаған доға булмай,
Алла уны яратмай.
Бер үк доға көн һайын,
Ялыҡтырыр моғайын.

Доға йорто кәрәкле,
Булыр ул мөбәрәкле.
Йәштәрҙе йыйыр Үҙе,
Хоҙайым – Алла Һүҙе.

Башҡортса шиғыр яҙам,
Башҡортса доға ҡылам.
Телем биргән Хоҙайым,
Тик Уны мин данлайым.
Амин!

*05.12.05.*

## ИЗГЕ РУХ БИРӘ МИҢӘ КӨС

Аллам бирҙе Изге Рух,
Уның менән мин бик дуҫ.
Кисереү бирҙе Хоҙай,
Шиғыр яҙам туҡтамай.

Төнөм көнгә алмаша,
Йоҡом да килеп ҡаса.



Дәфтәр асып ултырам,
Шиғырға мин тултырам.

Яҙам данлап Хоҙайҙы,
Ултырып бик уңайлы.
Изге Рухым көс бирә,
Гел дәртләндереп тора.

Үҙгәртә Ул һораһам,
Яңылыш юлдан тайһам,
Хоҙайым көсөн биргән,
Минең өсөн Ул үлгән.

Гонаһым юҡ, йыуҙы Ул,
Изге ҡанын түкте Ул.
Рух менән мин йәшәйем,
Аллаға дан эҙләйем.

Гонаһ килә, тиҙ йоға,
Йәбешкәк кеүек ҡала.
Үпкәләтәм Рухымды,
Бирелгән яҡлаусымды.

Тағы доғама киләм,
Ғәфү ит, Хоҙай, тием.
Ә Ул тәүҙә кисерә,
Изге Рухты көсәйтә.

Аңлай мине Хоҙайым,
Шуға Уны данлайым.
Гонаһлы тәндә йөрөү,
Тәүбәгә көн дә килеү.

Аллам Үҙе күрһәтә,
Ҡайҙан һуң гонаһ килә?
Килә ул тыңламауҙан,
Тәкәббер булғанлыҡтан.

Алла һүҙен үтәмәү,
Үҙ-үҙеңә үпкәләү.
Ғәфү ит, Хоҙайҡайым,
Үҙ һүҙле балаҡайың.

Үҙгәрт мине көн һайын,
Тик Һинән мин һорайым.
Һинән, бөйөк Алламдан,
Шиғырымда һинән Дан.

Изге Рухҡа рәхмәт,
Ул булғас миңә рәхәт.
Өйрәтә Ул көн һайын,
Үҙгәрермен моғайын.

Тәкәбберлегем китер,
Тыңлаусанлығым килер.



Үпкә һүҙҙәрем бөтөр,
Хоҙайҙан дарман килер.

Килә минең йырлағым,
Хоҙайымды данлағым.
Думбыра сирткем килә,
Быны тик Алла белә.

Унан булһа, уйнатыр,
Думбыраһын да табыр.
Сиртергә лә өйрәтер,
Маһайма тиеп әйтер.

Даның бир Һин Рухыңа,
Хоҙай биргән дуҫыңа.
Данлаһаң Хоҙайыңды,
Үҫтерер дарманыңды.
Амин!

*06.12.05.*

## НУХТЫ ҺАЙЛАҒАН АЛЛА

Ер гонаһҡа тулғанда,
Нухты һайлаған Алла.
Нух итәғәтле булған,
Гел ярлыҡау һораған.

Ергә бирәм мин яза,
Батырам туфан һыуға.
Гонаһы баштан ашты,
Түҙемлегем ҡалманы.

Килмәҫ кеше тәүбәгә,
Һорамаҫ кисереү ҙә.
Ярлыҡа тип баш эймәҫ,
Алла бар тип һис белмәҫ.

Төҙө һин, Нух, көймәне,
Әле ваҡыт килмәне.
Һөйлә Минең турала,
Үтеп барыусыларға.

Нух көймәне төҙөнө,
Өс улына һөйләне.
Алла Һүҙен үтәне,
Өс килен, һөйгән йәре.

Һөйләне ул кешегә,
Күп йыл төҙөнө көймә.
Йөҙ егерме йыл үтте,
Көймә төҙөлөп бөттө.

Ике енес хайуандар,
Бөжәктәр һәм ҡошсоҡтар



Көймәлә урын тапты,
Алла бит шулай ҡушты.

Алла Һүҙен үтәне,
Көймәне Ул бикләне.
Һигеҙ кеше көймәлә,
Ғаләм батты – көлгәнгә.

Ҡырҡ көн ямғыр яуҙырҙы,
Ер аҫты һыуы ҡалкты.
Ҡоро ерҙәге көймә,
Өйрөлттө һыу өйөрмә.

Тере ҡалды ғаилә,
Алланы белде иллә.
Тәүге яза гонаһка,
Мисәт һалды һауаға.

Мисәтен һин күрәһең,
Йәйғор тиеп беләһең.
Ямғыр ваҡыты булыр,
Мисәте күктә торор.

Иҫләтә Хоҙай Үҙен,
Буш булмай Уның Һүҙе.
Утка тотасаҡ ерҙе,
Был да иҫбатлау Һүҙе.

Кил һин, бәндә, иманға,
Мәрхәмәтле Хоҙайға.
Ул бит һүҙен һүҙ иткән,
Ергә төшөп йөрөгән.

Ғайса бирә Изге Рух,
Кисереү һорарһың, дуҫ.
Кисереү Хоҙайыңда,
Уның изге ҡанында.

Китабыңды ас әле,
Хоҙайыңды тап әле.
Төшөргән Алла Һүҙен,
Тыуҙы Ғайса Мәсихең.

Ҡорбан буды Ул ерҙә,
Килде ғазап сигергә.
Һинең өсөн үлергә,
Гонаһ өсөн түләргә.

Бурысыбыҙ юҡ хәҙер,
Ышанырға бул әҙер.
Тәңрем булды риза,
Мәсихтә булды яза.

Һинең өсөн язаны,
Алла бит Уға һалды.



Бөтә кеше гонаһын,
Ҡапланы изге ҡаны.

Ҡанһыҙ гонаһ йыуылмай,
Ундай ҡан ерҙә булмай.
Һарыҡ ҡорбан – хайуан,
Әҙәм бит кеше булған.

Кеше ҡорбанын алмай,
Гонаһлы ҡан ярамай.
Ғайса булған саф малай,
Быны Ҡөрьән иҫбатлай.

Кем уны ҡабул итә,
Хоҙай кисереү бирә.
Изге Рух бирә көсөн,
Ерҙә йәшәүең өсөн.

Бер нимә лә уйлама,
Кешеләрҙе тыңлама.
Бирерһең үҙең яуап,
Гонаһың ҡалһа – ғазап.

Ғазапланырһың утта,
Булыр йәнең тамуҡта.
Иблис тә шунда китә,
Шайтандар менән бергә.

Гонаһың алыр Ғайса,
Һорарһың Унан тәүбә.
Иманың булыр тере,
Мәсих үлеп терелде.

Нухты иҫлә һин, бала,
Яза көтә бит алда.
Килмәгән тағы ҡала,
Көймәнең арьяғында.

Көймә йөҙә дарьяла,
Гонаһлы океанда.
Ишеге әле асыҡ,
Йәнеңде бир, тән балсыҡ.

Йәнең тәндә булғанда,
Иманға кил һин, бәндә.
Йәнең сыҡһа тәнеңдән,
Көт яза Тәң(е)реңдән.

Йәнең тапшырһаң Уға,
Йәшәрһең һин донъяла.
Өйрәтер һине Рухың,
Ул булыр һинең дуҫың.



Яҡлаусың булыр ерҙә,
Тейә алмаҫ һиңә ен дә.
Иман юлын күрһәтәм,
Бөгөн кил һәм дә иртән.
Амин!

*06.12.05.*

## ҠОТҠАРЫУСЫМ ҺИН – ХОҘАЙЫМ

Хөкүмәт оран һала,
Президент Указ яҙа.
Башҡорттар бик аҙ ҡалды,
Халҡым бит эсә – аҙҙы.

Йыл буйы тырышайыҡ,
Эсеүҙе беҙ тыяйыҡ.
Яҙайыҡ аҡ ҡағыҙға,
Ҡаршы торайыҡ быға.

Күпме булыр түҙергә,
Булды сәбәп үлергә.
Аңламай бит халҡыбыҙ,
Ҡырыла башҡортобоҙ.

Эсәһең шуға, бала,
Шайтан эргәлә тора.
Гонаһлы булды бәндә,
Иманға кил Тәңреңә.

Эсәһең һин араҡы,
Һулыш булыр аҙаҡҡы.
Самогон алыштыра,
Бөтһә, дихлофос бара.

Эсә ирҙәр, ҡатындар
Быяла таҙартҡыстар.
Йәш ҡыҙҙар һәм малайҙар
Шешә төбөн ялайҙар.

Ҡайҙа булған маһирлыҡ,
Һабан туй -– баһадирлыҡ.
Зәғиф тыуа балалар,
Ҡорһаҡтан "алкаш" улар.

Эсеү килтерә үлем,
Ағыулы тәнгә түҙем.
Афәтле үлем юлда,
Хәүефле үлем унда.

Экән кеше ерәнгес,
Һаҫыҡ ауыҙ, һары теш.



Быс(ы)раҡ, туҙған кейем,
Нисек һуң быға түҙем.

Хәмер эсмә, ти Ҡөрьән,
Самогон ҡойма, бирән,
Йәнеңде Алла алыр,
Йәһәннәмгә ырғытыр.

Эс һин емеш һуттарын,
Эсмә шайтан һыуҙарын.
Йырлама уның йырын,
Фәхишә ҡылма, ҡыҙым.

Эскән кеше болара,
Ғаиләлә ғауға ҡуба.
Тарҡала, бәхет китә,
Йәһәннәмгә юл илтә.

Атайҙың ҡәҙере юҡ,
Әсәй йәшәй бойоғоп.
Ниңә тыуҙым донъяға,
Бәхетем булмағанда.

Бындайҙарға һүҙем бар,
Алла биргән түҙем бар.
Йолҡоп ташлай гонаһты,
Эскелек – һағыҙаҡты.

Килегеҙ, мин беләмен.
Иман һүҙе һөйләрмен.
Кисерер һеҙҙе Алла,
Хоҙайым бар донъяла.

Иҫеңә төшөр Ҡөрьән,
Нисек ағаска килгән.
Әҙәм һәм Һауа белгән,
"Емеш ашама" тигән.

Алла әйткән: ожмахта
Үлерһең бит һин, бала.
Шайтан булған татлы тел,
Урлата, алдата гел.

Ул һөйрәгән уларҙы,
Аяҡтар шунда барҙы.
Тыйғанды оноттолар,
Емеште ашанылар.

"Татлы емеш" туйымлы,
Улар тик ауыҙланы.
Тыңламаны Алланы,
Ни бары бер тыйыуҙы:

Барлыҡ емеште аша,
Тик быныһына барма.



Ярамай! һиңә емеш,
Имсеме былай имеш.

"Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ",
Шул булдымы ашамлыҡ.
Туйымлыкта эш тормау,
Алла Һүҙен тыңламау.

Инде белде яҡшылыҡ,
Ләкин бергә яманлыҡ.
Тыңламағас Хоҙайҙы,
Баҫты гонаһ ҡоллоғо.

Ҡулға кейелде бығау,
Ерҙә тотабыҙ һынау.
Ҡанға күсте гонаһы,
Гонаһлы һәр балаһы.

Гонаһлы тыуа кеше,
Иманлы булмай эше.
Яҡшылыкты яманлыҡ
Баҫа көн дә, ни ҡылмаҡ.

Ҡайҙа барып боҫайыҡ,
Гонаһтан беҙ ҡасайыҡ.
Гонаһтан һис ҡотолмаҫ,
Күләгәң килә, ҡалмаҫ.

"Татлы емеш" телевизор,
Киноларҙа секс булыр.
Шәрә ҡатын һүрәте,
Тулды гәзит биттәре.

"Татлы" була тыйғанда:
– Араҡы эсмә, бала,
Тәмәкене көйрәтмә.
– Әсәй, мине өйрәтмә,
Бөтә донъя шулайта,
Ҡыҙҙар тәмәке тарта.

– Үҙеңде бел, әсәйем,
Нисек һуң мин эсмәйем?
Ҡайҙа барма, маҡтайҙар,
"Татлы" бит рекламалар.

Үҙенә тартып тора,
Шайтандар ылыҡтыра.
Гонаһ ҡоло быҒауҙы,
Алла сисә ул ауҙы.

Иманға килеү кәрәк,
Тешләп булмай бит терһәк.
Тарта гонаһ татлығы,
Яманлыҡ өҫкә сыға.



Бала тыйыуҙы белмәй,
Киреһен генә һөйләй.
Тыябыҙ: эсмә ағыу.
– Ниңә эсәһең, атыу?
Тыябыҙ: тартма төтөн.
– Тартҡандан ишетәмен.

Яуабы уның әҙер,
Ҡыҙыңдың һәм улыңдың.
Үҫә көн һайын гонаһ,
Туҡтата уны Аллаһ.

Килергә кәрәк иман,
Иманды һайла, балам.
Уҡы Изге Китаптар,
Бынан һине тыймаҫтар.

Килмәгәнгә ихтыяр,
Ләкин кил һин, кем тыяр.
Яҡшылыҡҡа тыйыу юҡ,
Яманлыҡҡа урын юҡ.

Айырмай шуны бала,
"Татлы" емеште тота.
Урлай, күренеп ята,
Алдай, өйрәтә ата.

Урлап байый берәүҙәр,
Алдап байый бүтәндәр.
Көнләшеү һәм рәнйетеү,
"Татлы" емешкә етеү.

Һөйрәй һаман Иблис,
Иртән һөйрәй, ҡалмай кис.
Кафе аса ауылда,
Рестораны ла була.

Кисен бит йоклап булмай,
Шайтан көйө яңғырай,
Ҡайҙа ҡурай моңдары,
Ҡайҙа башҡорт йырҙары?

Аңламаһа ла ҡуя,
Барабан һуҡһын ғына.
Ҡолактары ишетмәй,
Ауыҙ ҡысҡырып һөйләй.

Әллә улар һаңғырау,
Сәсе аҡ, төшкән ҡырау.
Модаһы шулай икән,
Йәшләй ҡартайыу микән.

Моданы ҡыуалайҙар,
Ярыҡ кейем даулайҙар.



Яланғас тән күрәһең,
Дин тыя белмәҫһең һин.

Дүрт китапта тыйыу бар,
Ожмахҡа юл булыр тар.
Дин менән килмәҫ бала,
Тыйыуҙы белмәҫ ана.

Ана ла бала булған,
Үҙе ул тыйылмаған.
Әсә-атанан алмаған,
Алыр бала имандан.

Уҡы шиғырым, балам,
Түҙем ал һин Алланан.
Бөйөк Хоҙай Рух бирер,
Иманға алып килер.

Эсеүең булыр туйым,
Уйыңа килер ҡуйым.
Тәмәкене бырғарһың,
Йүтәлләп һин ҡоларһың.

Тәнеңдән һаулыҡ киткәс,
Үлемгә барып еткәс,
Анларһың һин моғайын,
Бар бит ерҙә Хоҙайың.

Эҙлә, бала, иманды,
Эҙләмә наркоманды.
Наркотик ҡанға китә,
Һине ул йүләр итә.

Татлы емеш баҡсала,
Ул үҫемлек мәк була.
Балын йыйҙы бал ҡорто,
Наркотикты башҡорто.

Ҡара, уйла иң элек,
Бөтә ағыу үҫемлек.
Мәк, киндер һәм тәмәке,
Ҡомалаҡтан икмәге.

Киндер күлдәк ирҙәргә,
Тәмәке – көйәләргә,
Ләкин кеше гонаһы,
Ағыу уйлап сығарҙы.

Хәҙер килеп уйландыҡ,
Беҙ бит, күр, ағыуландыҡ.
Ғәрип балалар таптыҡ,
Аңыбыҙҙы юғалттыҡ.

Һаулыҡ киткәс дин ҡайтты,
Ләкин күп таҙартманы.



Гонаһ күңелдә ҡалды,
Аллаға ярам булды.

Ярарға тырышабыҙ,
Йолаһын атҡарабыҙ,
Ибраһимды тыңлайбыҙ,
Ҡорбанын да салабыҙ.

Аллам әйтә: мөкиббән
Йәнеңде тапшыр, балам.
Йөрәгеңә ал мине,
Һаҡлармын ерҙә һине.

Кисереү һора минән,
Гонаһың ҡалды тием.
Хоҙайҙы һин ҡабул ит,
Алла Һүҙен уҡып кит.

Дүрт китапты уҡыһаң,
Уларҙы һин аңларһың.
Иманға килер юлың,
Аңлатыр шиғыр юлым.

Түрәт, Зәбүр һәм Инжил,
Ҡөрьән уҡый мосолман.
Инжилдә иман нуры,
Раҫлаусы Ҡөрьән юлы.

Иманға килмәй булмай,
Ләкин тыңламай малай.
Ҡыҙы ла унан ҡалмай,
Ҡартайғас киләм – уңай.

Күрәм, ерҙә үләләр,
Афәт үлем күрәләр.
Ауырыу гонаһ шеше,
Алып китә йәштәрҙе.

Донъяла һуғыш бара,
Тәбиғәт ҡоторона.
СПИД ауырыуы атлай,
Үләләр күпләп аслай.

Ашаныҡмы емеште,
"Татлы" булды, килеште.
Наркотик, тәмәкеһе,
Һыра һәм араҡыны.

Эшләйбеҙ беҙ ағыуҙы,
Ҡоябыҙ самогонды.
Байрамдар бит күбәйҙе,
Өмәселәр эсмәйме?

Эсергән башҡорт ҡымыҙ,
Уйнаған ауыҙ ҡумыҙ.



Ат һымаҡ көслө булған,
Шундай ир бармы, туған?

Бармаҡ менән сүпләрлек,
Ун ир бармы эсмәҫлек?
Уларҙан малай булыр,
Батырҙар бәлки тыуыр.

Күбәйҙе алдаҡсылар,
Экстрасенс, булдыҡһыҙҙар,
Имеш, һаулыҡ ҡайтара,
Аҡсаға ул байыға.

Булды элек сихырсы,
Ундайҙарҙы дин тыйҙы.
Хөкүмәт нимә ҡарай,
Динлеләр әллә йоҡлай?

Йоҡлата Иблис беҙҙе,
Һәр ерҙә йөрөй үҙе.
Күрәҙәселәр тулды,
Кәрт һала, банкир булды.

Кешеләр тиҙ алдана,
Гонаһ ҡоло булғанға.
Гәзит тулы йондоҙсоҡ,
Ғилемле сихырсылыҡ.

Тура килтерер һүҙен,
Иблистең ҡоло, енен.
Юрама күрһәң йондоҙ,
Шайтан эргәлә торор.

Иблис килгән күктән,
Шайтан бит йөрөй куптән.
Аҙғынлыҡ килә унан,
Тыңламай һине балаң.

Иблис – ҡара йылан –
Сәсә ағыуын гелән.
Ағыуы керә һиңә,
Гонаһлы йөрәгеңә.

Донъяла гонаһһыҙ юҡ,
Иблис йөрөй, ата уҡ.
Уҡ сәнселә эс балам,
Ал да, урла, үл, балам.

Нәпсене ул арттыра,
Гонаһың ҡалмай арта.
Күләгә һымаҡ килә,
Яҡтыла ул күренә.

Яҡтылыҡ көндөҙ Ҡояш,
Иманың булһын юлдаш.



Уҡыусым, тыңла һүҙем.
Хоҙайым бирә түҙем.

Ҡөрьәнде һин уҡыһаң,
Ғайса Мәсихте тапһаң,
Хоҙайың булыр Үҙе,
Мәрйәмгә төшкән Һүҙе.

Алла Һүҙен төшөргән,
Ергә Хоҙайҙы биргән.
Орлоҡ булған Мәрйәмдән,
Саф бала – тәне әҙәм.

Оло Ҡорбан бирелгән,
Алла бәрәсе килгән.
Ғаләм мөғжизә күргән,
Иҫбатлай быны Ҡөрьән.

Үлеләрҙе терелткән,
Ауырыуҙары киткән.
Балсыҡтан эшләй ҡошсоҡ,
Өрә тын, китә осоп.

Доға ҡыла Аллаға,
Ризыҡ төшә барына.
Ғайса пәйғәмбәр була,
Һөйләй Алла турында.

Иманға килеү мөһим,
Иманда йәшәрһең һин.
Иблис һиңә ҡағылмаҫ,
Һине Алла һаҡлағас.

Ҡорбаным Ғайса Мәсих,
Имананыма ҡуймай сик.
Башҡортса доға ҡылам,
Телде биргән бит Аллам.

Үлеп терелгән Хоҙай,
Ышанмай быға булмай.
Ҡөрьән быны иҫбатлай,
Тыуған, үлгән саф малай.

Ҡубарылып терелгән,
Мәрйәм анаһы күргән.
Хоҙайым, тип үрелгән,
Шикләнмәй сәләм биргән.

Изге Ҡаны түгелгән,
Ул һинең өсөн үлгән.
Бурысың бит түләнгән,
Ни кәрәк һуң үҙеңдән?

Ни кәрәген әйтәмен,
Иманға кил, тиәмен.



Алла һине ярата,
Гонаһтарҙан таҙарта.

Сакыр һин Хоҙайыңды,
Ғайса пәйғәмбәреңде.
Терелде Ул, күренмәҫ,
Ләкин эргәңдән китмәҫ.

Гел йөрөй Ул эргәңдә,
Белмәй инең һин генә.
Хәҙер инде беләһең,
Ҡабатла һин һүҙемде.

Ғәфү ит мине, Аллаһы,
Тыуғанмын икән мин гонаһлы.
Ышанам, Хоҙай, һиңә,
Изге Алла һүҙенә.

365 көн йылымда,
365 юл шиғырымда.
Данлайым Хоҙайымды,
Ҡотҡарыусым Ул булды.
Амин!

*07.12.05.*

## АТАМ ТЕЙЕМ АЛЛАҒА

Атам тейем Аллаға,
Мин Алланан тыуғанға.
Доғамды ул ишетә,
Атай тейеп әйт миңә.

Атам минең бар ерҙә,
Әҙәм тәне үҙендә.
Ул да иманға килде,
Алланы атай тине.

Булған тәү ерҙә Атай,
Балсыктан тыуған малай.
Быуын килеп тоташҡан,
Әҙәм тәнле беҙ булған.

Әҙәм тәүге атабыҙ,
Беҙ гонаһлы тыуғанбыҙ.
Тәнен балсыктан яһай,
Әҙәмдең тәнен Атай.

Йәнен, Рухын өргән Ул,
Ҡатын Һауа биргән Ул.
Иманлы булған Әҙәм,
Алланы Атам тигән.



Бәхет һәм шатлыҡ менән,
Йәшәгән улар гелән.
Бер-берен улар һөйгән,
Ҡайғыһыҙ йәшәй биргән.

Эдем баҡсаһы – ожмах,
Биргән уларға Илаһ.
Барлыҡ емештәр үҫкән,
Хайуандар ҙа йөрөгән.

Бөтә нәмә бар бында,
Уйна, көл, эшлә, бала.
Сәскәләргә һыу һипкән,
Йом(о)шартып ул үткән.

Хайуан, ҡош ашай үлән,
Бер-беренә теймәгән.
Ҡый үләне үҫмәгән,
Мәңге тормош үлмәгән.

Алла бер тыйыу биргән,
Ағаста емеш үҫкән,
"Яуызлыҡ һәм яманлыҡ"
Ашама уны бер үк.

Күп йылдар йәшәгәндәр,
Һөйөләп йүгергәндәр.

Яланғас йөрөгәндәр,
Тыйыуҙы үтәгәндәр.

Булған унда фәрештә,
Тыуған гонаһ эсендә.
Ағаска уралған ул,
Йылан булып тыуған ул.

Әҙәм менән Һауаны,
Ылыктырған ағаска,
"Татлы" теле ағыулы,
Алдау Иблистең уйы.

Алданы аша тиеп,
Үлмәйһең, бала, тиеп.
Алла һымаҡ булырһың,
Уны һин булдыраһың.

Юханы тыңланылар,
Тыйыуҙы оноттолар.
Алла булабыҙ, имеш,
Ашаны улар емеш.

Гонаһ керҙе, һиҙҙеләр,
Тыңламауҙы белделәр.
Күҙҙәре оят күрҙе,
Үләнгә улар керҙе.



Алла килде, эҙләне.
Һораужарҙы теҙләне.
Ниңә ашаның емеш,
Беҙ икәү булдыҡ килеш.

Һауа ҡатыным бирҙе,
Ашайыҡ емеш, тине.
Һауа һүҙе бер булды:
Миңә йылан тотторҙо.

Йыланды, Иблисте,
Юханы – ҡара көстө
Ҡыуҙы Алла ожмахтан,
Үлем менән һин туҡлан.

Шунан бирле туҡлана,
Гонаһлыһы бау һала.
"Татлы" емеш күрһәтә,
Тыңламаҫка өйрәтә.

Тыңламаны тәү ата,
Бер тыйыуҙы – ашама.
Язаны Алла бирҙе,
Үлемлеһең һин, тине.

Үлдең – алдым Изге Рух,
Булмам хәҙер һиңә дуҫ.

Эҙләрһең ғүмер Тәңрең,
Үлер ҡәҙерле тәнең
.
Балалар тыуа һинән,
Гонаһың ҡалыр тимә.
Күсер гонаһ ҡаныңа,
Килер быуын балаңа.

Ҡорбан ҡаны йыуасаҡ,
Бер ир бала тыуасаҡ.
Саф булыр уның ҡаны,
Ерҙә һәм күктә даны.

Әҙәм оҙаҡ йәшәгән,
Тир түгеп ул эшләгән.
Балалары күп булған,
Һәр бере ҡорбан салған.

Гонаһ күскән быуынға,
Килтерә тыңламауға.
"Татлы" емеш ашайбыҙ,
Алланы тыңламайбыҙ.

Тыйылған емеш – ағыу,
Тәмәкене ул тартыу.
Араҡы, һыра алыу,
Сафлыҡтан ҡыҙҙар ҡалыу.



Алдау, урлау, рәнйетеү,
Иблистән килеп етеү.
Йөрөй ул арабыҙҙа,
Гонаһлы барыбыҙ ҙа.

Үҫә ағыулы емеш,
Киндер, мәк һиңә килеш.
Киндерҙе кейҙе әҙәм,
Ағыуҙы эшләй балаң.

Яҡшылыҡ булды мәге,
Баҡсаны ул биҙәне.
Булкаларҙы тәмләне,
Яуызлыҡ етте мәле.

Кеше гонаһы үҫә,
Яҡшыны яуыз итә.
Спирт микроб үлтерә,
Хәҙер кешеләр үлә.

Йылан ағыуын сәсә,
Йәштәр наркотик сәнсә.
Яҡшы тип уйлай улар,
Ағыуҙар тәнде боҙар.

Боҙоҡ аңды томалай,
Ағыулы тыуа малай.

Тыуғандан ул наркоман,
Әскесе булып тыуған.

Нәҫелдән килә гонаһ,
Ҡотҡарыр һине Илаһ.
Иманға кил, гонаһлы,
Бирҙе Ҡорбан Аллаһы.

Мал ҡорбаны алынмай,
Гонаһтарың йыуылмай.
Тән гонаһ иткән беҙҙең,
Тәнле ҡорбан бирелгән.

Ир бала ерҙә тыуа,
Атаһы уның – Алла.
Саф була уның тәне,
Шул була ҡорбан тәнле.

Әҙәмдән була тәне,
Мәрйәм уның әсәһе.
Фәрештә килә янға,
Тыуҙырырһың һин бала.

Изге Рух бирер Алла,
Гонаһтан Ул ҡотҡара.
Исем ҡуш – Ғайса Мәсих,
Ҡыуанысҡа ҡуймаҫ сик.



Оло Ҡорбан Алланан,
Үлергә килгән булған.
Атам гонаһты һалған,
Һарыҡты алыштырған.

Һеҙ һарыҡ түгел, тигән,
Гонаһың ҡандан килгән.
Ҡорбан булды ул элек,
Беҙ гонаһ йыуҙыҡ биреп.

Гонаһың бераү түгел,
Гонаһ бит ҡандан килеү.
Бурысты алды Ғайса,
Аллам булды риза.

Ҡорбан Ул Үҙе бирҙе,
Мәрйәмгә – Алла Һүҙе.
Ул Һүҙ тән булып тыуҙы,
Ғайса Мәсих – ир булды.

Алла Һүҙендә торҙо,
Ир бала ерҙә тыуҙы.
Оло Ҡорбан Атамдан
Алла бәрәсе булған.

Ике тыуғандар булыр,
Ғайсаны ҡабул иткән.

Гонаһын Уға биргән,
Алламды Атам тигән.

Ундайҙарға бер үлем,
Бармайҙар, көкөрт күле.
Ул күлгә бырғай Алла,
Иблисте – ҡара көстө.

Хөкөм батшаһы Алла,
Ҡиәмәт көнө була.
Тәхеттә Ул ултыра,
Хөкөмдө Ул сығара.

Хөкөм итмәҫ балаһын,
Уны ҡабул иткәнен.
Уны Хоҙай тигәнен,
Тере иман килгәнен.

Рухтан тыуа улар,
Алланы атай тиҙәр.
Күңелдәре сафланыр,
Йөрәктәре аҡланыр.

Мәңгелек юлда улар,
Тәң(е)ремдән тыуғандар.
Бер-берен тыуған тиер,
Рухлы ожмахҡа китер.



Барыһына ла еткер,
Алланың барын белдер.
Тыйыуҙы белһен бала,
Тамуҡҡа китеп бара.

Йәнеңде мин йөрөтәм,
Телеңде мин һөйләтәм.
Күңелеңә шиғыр бирәм,
Кәрәк тапһаң, йырлатам.

Тик маһайма һин, балам,
Мин күптән ҡарап барам.
Юлыңда һиңә һалам,
Яратам һине, балам.

Мин дә Һине яратам,
Һине, һөйөклө Атам.
Талмаҫ минең беләгем,
Арымаҫ минең телем.

Һин үҙең көс бирәһең,
Аяҡты йөрөтәһең.
Күңелде күтәрәһең,
Аяҡты йөрөтәһең.

Һинһеҙ йәшәү юҡ миңә,
Көн дә ғәфү ит кенә.

Гонаһлы бысраҡ тәнем,
Ҡарыша бысраҡ Тәңрем.

Рухи көс биреп тор,
Тәнемде һин тыйып тор.
Ураҙала көс ҡайта,
Тәнемә ҡаршылыҡҡа.

Һин бирәһең талантты,
Ергә күмдермә уны.
Талантлы ит балаңды,
Данларға тик Ғайсаны.

Доғамды ныҒытаһың,
Ҡылысты тоттораһың.
Үткер ҡылыс аямай,
Дошмандарҙы ҡыуалай.

Дошманым өсәү минең,
Гонаһлы минең тәнем.
Иблис, ҡара көстәр,
Донъялағы "емештәр".

Татлы емеш күп бында:
Нәпсе, байлыҡ, машина,
Модалы матур кейем,
Кәрт һала күрәҙәсем.



Ялтыр тышлы журналдар,
Эсе тулы гонаһтар.
Экранда секс бара,
Бисә кәрәкмәй уға.

Бала кәрәкмәй уға,
Бала йорто уларға.
Әсә-ата эләгә,
Ҡарттар йорто төҙөлә.

Йырҙарыңдың моңо юҡ,
Һүҙҙәре мәғәнәһеҙ.
Йәшәйҙәр Тәғәләһеҙ,
Иманһыҙ үләһегеҙ.

Алла язаһын бирә,
Тәү тормошта Әҙәмгә.
Тыңламағаны өсөн ,
Ала Ул ерҙең көсөн.

Ҡәһәрләй ерҙе Алла,
Ҡый үләндәре баҫа.
Хайуан ашай хайуанды.
Бөжәктәр ашай малды.

Гонаһ үҫә, ҡабара,
Кил һин, малай, иманға.

Иманға юл күрһәтәм,
Доғаңды мин өйрәтәм.

Башҡортса доға ҡылам,
Ишетә мине Атам.
Данлайым Хоҙайымды,
Тапшырам Уға йәнде.

Йәнемде һаҡлай Атам,
Данлайым, шиғыр яҙам.
Йәштәргә доға йорто,
Йөрөһөн тип башҡорто.

Теләйем мин һәр көндө,
Теләгемде ишетер.
Кәрәкһә Үҙе бирер,
Ваҡытты етте тиер.

Тыңлауың ғына килһен,
Телем һөйләүҙе белһен.
Данлайым Хоҙайымды,
Килтерһен башҡортомдо.
Амин!

*07.12.05.*



## САБЫРЛЫҠ БИРӘ ХОҘАЙ

Сабырлыҡ эҙләй әҙәм,
Бирә Аллаһы Тәғәләм.
Килһәң һин иманыңа,
Бәхет килә барына.

Бәхет килтерә шатлыҡ,
Бөтә һиндә яманлыҡ.
Йәнгә бирә сабырлыҡ,
Килә Хоҙайҙан дуҫлыҡ.

Хоҙай менән дуҫ булған,
Элек Ибраһим атаң.
Алланы ул тыңлаған,
Иманлыкта ныҡ торған.

Тыңлай белгән Алланы
Ғүмерен Уның данланы.
Ҡөрьән быны иҫбатлай,
Тәүрәт Һүҙен ҡабатлай.

Уҡы изге китаптар,
"Сабырлыҡ" тиҙәр улар.
Тик Хоҙайымдан килә,
Кил һин, әҙәм, тәүбәгә.

Кисереү бирә Хоҙай,
Мәрйәмдән тыуған малай.
Ҡөрьән быны иҫбатлай,
Саф булған, тине, ҡалай.

Сабырлыҡ килә Унан,
Уның изге ҡанынан.
Кисерә һине Хоҙай,
Донъяла изге малай.

Хоҙай үлергә тыуған,
Алланан оло Ҡорбан.
Үлеп, терелгән кәүҙә,
Ерҙә күренде тәүҙә.

Сабырлыҡ бирә беҙгә,
Таҙалыҡты күңелгә.
Инсафлы була кеше,
Иманлы уның эше.

Гонаһлы тыуа бала,
Иманы булмай унда.
Иманды Хоҙай бирә,
Тәүбәгә Ул килтерә.

Хоҙай, Ғайса Мәсихең,
Эргәңдә йөрөй һинең.



Йөрәгеңә ал Уны,
Ғәфү ит, Мәрйәм Улы.

Шикләнмә һин Ғайсанан,
Ҡөрьәнде уҡы, балам.
Инжилдә – иман нуры,
Ғайсаға биргән уны.

Үлеп терелгән Хоҙай,
Ҡөрьән дә Уны данлай.
Донъяла һәм әхирәттә данла, тигән,
Мәрйәм улы Ғайсаға Ул сәләм биргән.
Амин!

*08.12.05.*

## ӨГӨТ-НӘСИХӘТ ИМАНДАН

Тыңла һин, балам, һүҙем,
Кәрәк донъяла түҙем.
Түҙем бирә Хоҙайым,
Көн һайын мин һорайым.

Түҙәм ауыр һүҙҙәргә,
Ҡолаҡтар ишеткәнгә.

Түҙәм, боҙоҡ күренеш,
Йәштәрҙә мода, имеш.

Мода тәмәке тартыу,
Тартма һин, ул бит ағыу.
Мода – һыра һемереү,
Егеттәр менән йөрөү.

Мода – иҫерек йөрөү,
Килтерә ул үлтереү.
Хәүеф, үлем модала,
Бауҙы муйынға һала.

Афәт, үлем модала,
Модала бит машина.
Ҡайҙа килтерә был юл,
Тамуҡка китеп барыу.

Ололарға юҡ хөрмәт,
Тапшыралар хөкүмәт.
Йәшәй "йортта" ҡарт-ҡоро,
Тел дә ҡәһәр һуҡҡыры

Ҡәһәрләне был ерҙе,
Алла бит оҙаҡ түҙҙе.
Ҡәһәрләмә һин, кеше,
Ғәйеп гонаһ "емеше".



Балаңды өгөтләмә,
Һүҙеңде күп һөйләмә.
Тыңлауҙы белмәҫ бала,
Иманға килтер, Алла.

Иман һүҙе нәсихәт,
Балаңа тоттор китап.
Алла һүҙен уҡыһын,
Тыңламауҙы ул ҡуйһын.

Тере иман Хоҙайҙа,
Алла һүҙе файҙаға.
Иман үҙгәртер балаң,
Тыңлау килтерер Аллаң.

Тере һыу бирә Алла,
Килгән һәр бер балаға.
Ғәфү үтенеү кәрәк,
Иманға кил тиҙерәк.

Эҙләмәй Алла һине,
Эҙлә, бала, һин, тине.
Ныҡ тырышып эҙләһәң,
Табыр илап теҙләнгән.

Ниңә һуң тыңламаныҡ,
Беҙ иманда тыуманыҡ.

Гонаһлы тыуа кеше,
Гонаһлы бөтә эше.

Эсеү, тартыу, һүгенеү,
Үҙ-үҙеңде үлтереү,
Ата-әсәңде тыңламау,
Ялған һүҙ, алдау, урлау.

Тамуҡ юлында бала
Гонаһлы китеп бара.
Гонаһтан ҡотолоу бар,
Шиғырымды уҡып бар.

Өгөт-нәсихәт һүҙен,
"Зәбүр"ҙә табырһың һин,
"Инжил"дә иман нуры,
Ҡөрьән раҫлаусы шуны.

Тәүге китап "Тәүрәт",
Алла Һүҙеңде өйрәт.
Килер бала иманға,
Тере Алла янына.

Дүрт китап Алла Һүҙен,
Данлай бөйөк Тәңреһен.
Аллаһы Тәғәлә ти,
Бер Алла – Хоҙайым, ти.



Кисереү һора Унан,
Кил тәүбәгә һин, балам.
Гонаһың баштан ашҡан,
Һин балам бит аҙашҡан.

Аҙашҡан бәрәсһең һин,
Көтөүҙән ҡалғанһың һин.
Көтөү – иманлы балалар,
Алланы данлай улар.

Көтөүсе бар донъяла,
Ул Ғайса Мәсих бала.
Тере Хоҙайың һинең,
Көтөүсе һаҡлай йәнең.

Дүрт китап данлай Уны,
Хоҙайҙы, Мәрйәм Улын.
Кисереү һора унан,
Таҙарырһың һин Ҡандан.
Амин!

*09.12.05.*

## ХОҘАЙЫМ КИСЕРӘ

Кисереү эҙләйбеҙ донъяла,
Кисереү бирә бит тик Алла.
Дин тип йөрөйбөҙ мәсеткә,
Сафланыу бар микән йөрәктә.

Бар микән аҡланыу күңелдә,
Ҡала бит шикләнеү үҙеңдә,
Яуап юҡ йөрәктең түрендә,
"Уф Аллам" бар икән телеңдә.

Бушлығың бар һинең йәнеңдә,
Алланың юҡ унда эҙе лә,
Алданып йөрөйһөң һин ерҙә,
Бушлыҡта Хоҙайың юҡ, бәндә.

Бушлыҡҡа тултырҙың рәнйетеү,
Ҡысҡырыу,һүгенеү,үлтереү.
Алдашыу, урлашыу,көнләшеү,
Хоҙайҙың асыуын килтереү.

Бушлыҡҡа керт һин Хоҙайҙы,
Мәрйәмдән тыуҙырған малайҙы,
Саф бала донъяны ҡотҡарҙы,
Алла Һүҙен тормошҡа ашырҙы.



Саҡыр һин йөрәккә Хоҙайҙы,
Тыуғандан эргәңдә Ул барҙы.
"Ғәфү ит" Мәсихем гонаһтан,
Кисереү һорайым Илаһтан.

Дини йорт тапманым, Хоҙайым,
Эргәмдә гелән һин торғанһың.
Буш эсем, тәхетем, Һин ултыр,
"Уф" тимәм, йәшәүем һин булыр.
Амин!

*09.12.05.*

## КӨТӨҮСЕМ БАР ДОНЪЯЛА

Был донъяла бүре бар,
Иблис – шайтан, ендәр бар.
Бүре күк һағалай,
Һәр йәнлене ыҙалай.

Ыҙалай шуның өсөн,
Гонаһлы булған өсөн.
Кеше – аҙашҡан һарыҡ,
Көтөүсе кәрәк һаҡлыҡ.

Яҡшы көтөүсе Хоҙай,
Ғүмерен бирҙе аямай.

Йәнен бирҙе донъяла,
Ҡанын түкте, бел, бала.

Оло Ҡорбан бирелде,
Иблис бит еңелде.
Еңеүсе булды Хоҙай,
Быға ышанмай булмай.

Ҡөрьәнгә һүҙ яҙылған,
Ҡубарылып терелгән.
Донъяла йәшәп, үлгән,
Шикләнмә, балам, тигән.

Ул Ғайса Мәсих булыр,
Донъяға даны тулыр.
Әхирәттә лә данлы,
Сәләмле Мәрйәм улы.

Алла һүҙен төшөргән,
Мәрйәмгә малай биргән .
Саф малай күңел түре,
Ары китһен бүреһе.

Һәр гонаһлы һарыктар,
Донъяла аҙашҡандар.
Бүре йөрөй һағалап,
Йәнеңде һинең алмаҡ.



Гонаһтарҙы ул бәрә,
Тиҙерәк үлһен генә.
Ағыу эс – араҡыны,
Тәмәке тарт – ағыуҙы.

Алдап өйрәтә байыу,
Эшсәндәргә маһайыу.
Урлата, нәпсе тыймай,
Һүгенә ҡыҙ, оялмай.

Аҙашҡан һарык күрмәç,
Йәшәүҙең йәмен белмәç.
Араҡы менән баçыр,
Бүреләр бауға аçыр.

Йәштәргә наркотик тәм,
Аҙашҡандар таба йәм.
Көтә уларҙы бүре,
Кәүҙә табалар үле.

Көтөүсе бар донъяла,
Ғайса Мәсих, бел, бала.
Тәүбә итеп кил Уға,
Бүрегә бирмәç Ғайса.

Гонаһтарың таҙарыр,
Йөрәк һинең ағарыр.

Кисерер һине Хоҙай,
Мәрйәмдән тыуған малай.

Көтөүсемде мин алдым,
Ярата Уны аңым.
Йөрәк түрендә Үҙе,
Йән һаҡлай Алла Һүҙе.

Доға ҡылам, нығынам,
Гонаһтан таҙарынам.
Көтөүсем ылыҡтырһын,
Аҙашҡан һарыҡтарын.
Амин!

*10.12.05.*

## ҺӨЙЛӘРМЕН БАШҠОРТОМА АЛЛА ҺҮҘЕ ТУРАҺЫНДА

Һөйләйем мин башҡортса,
Шиғыр яҙам башҡортса.
Башҡорт булып тыуғанмын,
Башҡорт булып үлермен.

Телемде биргән Аллам,
Башҡортса һөйлә, балам.



Шиғыр төшә башҡортса,
Һүҙемде тыңла, бала.

"Әсәй", "атай" тәүге һүҙ,
Өләсәм әйтте: балам, түҙ,
Тәүфиғың булһын, балам,
Эстән гел әйт – "бар Аллам".

Дүрт китап изге һүҙҙәр,
Уҡығыҙ һеҙ, кешеләр.
Алланы һеҙ эҙләгеҙ,
Алла бер, белерһегеҙ.

Дүрт китап иҫбат итә,
Алла Һүҙе бер тейә.
Ергә төшкән – Мәрйәмгә,
Ғүмер биргән әҙәмгә.

Кешеләр була әҙәм,
Сөнки Әҙәмдән киткән.
Тәү атабыҙ донъяла,
Әсәбеҙ булған Һауа.

Улар булды гонаһлы,
Тыйған емеште ҡапты.
Ожмахтан ҡыуылдылар,
Ерҙә томош ҡорҙолар.

Уларҙан килә быуын,
Ҡандан күсә гонаһың.
Быуын һайын ул арта,
Иманға кил, тик ятма.

Гонаһтан таҙар, бала,
Кисереү тик Аллала.
Ҡайҙа барайым, тимә,
Алла һинең эргәлә.

Кешеләр эҙләнәләр,
Тубыҡҡа теҙләнәләр.
Ғәрәп телен белмәйҙәр,
Доғаларын көйләйҙәр.

Ләкин Алла Рух була,
Иманлыға дуҫ була.
Ишетә тик Рух көсөн,
Ҡабул иткәне өсөн.

Изге Рух бирә Хоҙай,
Бәндәне үле һанай.
Рухын алған ожмахта,
Рухи үле һәр бала.

Кемгә бирә Рух көсөн,
Яҡлай Ул шуның өсөн.



Хоҙайымды ҡабул ит,
Ғайса Мәсих Алла бит.

Алла һүҙен төшөргән,
Мәрйәмгә Ул Рух өргән.
Малай табырһың тиҙҙән,
Хоҙайың булыр, тигән.

Тәнле Әҙәм гонаһ иткәс,
Тәнле ҡорбан ваҡыт еткәс,
Тәүге ҡорбан һарыҡ булған,
Бер гонаһты таҙалаған.

Ҡандағы Әҙәм гонаһы,
Йыуылманы, ҡанда ҡалды.
Һәр быуынға тапшырыла,
Ерҙә булмай таҙа бала.

Саф бала тыуа Мәрйәмдә,
Иҫбатлай быны Ҡөрьән дә.
Инжилдә – иман нуры,
Уҡы, балам, һин шуны.

Ғайса Мәсих ҙур үҫә,
Ил буйлап йөрөй, күсә,
Мөғжизәләр күрһәтә,
Гонаһлыһың, тип әйтә.

Кешеләр ул сынаяҡ,
Эсе тулы быс(ы)раҡ.
Тыштан йыуына тәһәрәт,
Булмай таҙарып, хәҙрәт.

Алла һүҙе таҙарта,
Ышанып кил һин Уға.
Үлеп терелгән Хоҙай,
Ҡан изге, ул таҙалай.

Һарыҡ ҡорбан кәрәкмәй,
Гонаһтарҙы таҙартмай.
Оло Ҡорбан – Ғайса Үҙе,
Ерҙә тыуған Алла Һүҙе.

Күктә Ул Алла Һүҙе,
Ерҙә Ул тәнгә керҙе.
Хоҙай булып йөрөнө,
Ғайса пәйғәмбәр Үҙе.

Гонаһтар булды бысраҡ,
Көн һайын ул ҙурыраҡ.
Тыуған балала бар ул,
Бергә шулай үҫә ул.

Бәләкәй сакта ул тыңлай,
Боҙоҡлоҡка ул бармай.



"Гонаһ" емешен ашай,
Көн һайын үҫә малай.

"Татлы" емеш тәмәке,
Тыңламаны, эләкте.
Атай, әсәй һуғалар,
Тыңламауҙы тыялар.

Ләкин ҙур үҫте бала,
Сыға башланы ҡырға.
Был донъя татлы емеш,
Араҡы ярай, имеш.

Бөтә гонаһ бар ерҙә,
Татлы була алдау ҙа,
Татлы емеш урлашыу,
Күрше менән даулашыу.

Иблис-шайтан донъяла,
Татлы емеште таба.
Наркотикты сығарта,
Кәрт һала, ҡыҙлыҡ ҡала.

Бала таба атайһыҙ,
Йөрөй бала иманһыҙ.
Туҡмап өйрәтеп булмай,
Һөйөп өйрәтә Хоҙай.

Әрләү баланы боҙа,
Һөйә белмәүең – бәлә.
Ни эшләмәк, бармы юл?
Бар, дуҫым, иманлы бул.

Ҡандан килгән гонаһтан,
Йыуылыу кәрәк, балам.
Кисереү һора Унан,
Тәүбәгә кил һин, балам.

Килмәһәң, яза китә,
Ерҙә лә, шунан күктә.
Заманы килеп етте,
Иманға ваҡыт сикле.

Афәт үлем ул яза,
Хәүеф үлем донъяла.
Аҫылына йәш бала,
Тура тамуҡҡа бара.

Ожмах юлы бер, балам,
Уны үҙең һайлаһаң.
Башҡортса доға ҡылһаң,
Уны һин ятламаһаң.

Еңел бирелә иман,
Бушлай бирелә, балам.



Бирә уны тик Аллам,
Эргәңдә тора, балам.

Йөрәгеңә саҡыр һин,
Гонаһыңды таны һин.
Саф йөрәк бирә Хоҙай,
Уға килеүе уңай.

Ышаныу ғына һорай,
Эргәңдә тора Хоҙай.
Оло Ҡорбан донъяға,
Һәр телле халыктарға.

Уның һүрәтен элмә,
Түшеңдә һин йөрөтмә.
Ишек башына һин ҡуйма,
Машинаға ҡаҙама.

Алла Ул һүрәт түгел,
Доға түгел, яҙыу түгел.
Иконала, креста ла,
Юҡ Алла барында ла.

Күралмаҫ һине Аллаң,
Һүрәткә һин бағаһың,
Экстрасенстарға барһаң,
Өшкөртөп тоҙҙо алһаң.

Күрәҙәсегә – тамуҡ,
Имләүселәргә шул уҡ.
Экстрасенс шунда юлы,
Сихырсы бара тағы.

Ләкин иманға килһә,
Барыһы ла ҡотола.
Ҡоткарыусым бар – Алла,
Ожмахҡа алып бара.

Ҡоткарыусы, яҡлаусы,
Иманға кил юраусы.
Ғайса Мәсих Хоҙайым,
Иманһыҙҙы барлай Ул.

Ылыктыр һин Үҙеңә,
Иманһыҙҙың барын да.
Гонаһлы тыуа бала,
Иманһыҙ был донъяла.

Аңлағас иман килә,
Ете йәштә өлгөрә.
Килмәһә, юлы ябыҡ,
Ожмахҡа бүтән юл юҡ.



Юлды һалған Алла Һүҙе,
Күктән төштө бит Үҙе.
Килде Ул үлер өсөн,
Оло Ҡорбан булыр өсөн.

Изге ҡаны ҡойолдо,
Алла "бәрәсе" үлде.
Өс көндән һуң терелде.
Ҡырҡ көн ерҙә йөрөнө.

Хөкөм Батшаһы Үҙе,
Алланың изге Һүҙе.
Ҡиәмәт көнө булыр,
Ул тәхеттә ултырыр.

Иманһыҙ хөкөм булыр,
Тамуҡҡа юлды борор.
Иманлылар ҡотолор,
Ожмахҡа килеп тулыр.
Амин!

*10.12.05.*

## ТЕРЕ ҺЫУ – САРСАҒАНҒА, ИКМӘК УЛ АСЛЫЛАРҒА

Тере һыу биргән Аллам,
Эҙләһен һыуһағандан.
Мин көн дә уны алам,
Үҙемдә йәшәй Аллам.

Ҡулдан төҙөлгән йортта
Йәшәмәм, ти бит Алла.
Кешегә Үҙем керәм,
Саҡырғанын мин көтәм.

Күңел түренә Алла,
Саҡырһаң ине бала.
Эргәлә генә тора,
Йөрәгеңә Ул һуға.

Туҡ та туҡ һуға Алла,
Керт һин мине, бала.
Һин бит, балам, йүләрһең,
Иманһыҙ һин үләрһең.

Иман һүҙе – ышаныу,
Алла эргәңдә тороу.
Күренмәй тере Алла,
Янында ғына тора.



Күренмәгәс ышанмай,
Тотком килә, ти, малай.
Рух Ул Алла күренмәҫ,
Йән күренмәҫ бит үлгәс.

Йән барыр ике ергә,
Йәннәткә, йәһәннәмгә.
Һайла һин ошо ерҙә,
Ҡайҙа йәшәйһең килә.

Тәүбә итһәң Хоҙайға,
Ғайса Мәсих Аллаһҡа.
Гонаһтарымды аҡла,
Ышанам һин барына.

Тән ул балсыҡҡа китә,
Йәнем йәннәткә етә.
Аллам булһа күңелдә,
Тоғро булһам Үҙенә.

Хеҙмәт итәм мин ерҙә,
Хоҙай Икмәк Ул беҙгә.
Ул Икмәк асыҡтырмай,
Туйымлыҡ бирә Хоҙай.

Алһын Ерҙә иманды,
Һәр бала бит гонаһлы.

Гонаһтарың таҙарыр,
Юлың ожмахҡа барыр.

Тере һыу эскән һайын,
Мин хәҙер сарсамайым.
Күнел туйҙыра – Икмәк,
Алла Һүҙе Ул хикмәт.
Амин!

*10.12.05.*

## ТЕЛЕМ ДАНЛАҺЫН ҺИНЕ АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘНЕ

Телемде бирҙе Хоҙай,
Данлаһын тине, буғай.
Дарманын Үҙе бирҙе,
Шиғыр яҙырһың, тине.

Шиғыр юлдары доға,
Ышанмай булмаҫ бығa.
Һәр бер юлы мәғәнә,
Һүҙ Аллаһы Тәғәлә.

Бисмилла тип башлайым,
Шиғырымда данлайым.
Белһен тиеп бар ғаләм,
Бөйөк Аллаһ Тәғәләм.



Мәрхәмәте киң Уның,
Ялмап алһын Ул аңың.
Тирбәлә йөрәк ҡылым,
Тәғәлә Аллаға йырым.

Йыһан барлығында Ул,
Әҙәмгә әйткән Ул бул.
Балсыкка өргән йәнен,
Һауа ҡыҙ һөйгән йәрен.

Һулыш алған һәр йәнле,
Данлаһын Тәғәләне.
Күренгән, күренмәгән,
Бөтә нәмәне биргән.

Тәнемдәге һәр ағза,
Данлаһын һине, Алла.
Телемде йүгәнләп бар,
Һөйләмәһен буш хәбәр.

Биргәнһең һин телемде,
Башҡортса һөйләүемде.
Телем данлаһын һине,
Аллаһы Тәғәләне.
Амин!

*16.12.05.*

## АЛЛА ИШЕКТЕ АСА

Һәр кеше был донъяла,
Шул ишекте таба ала.
Ул ишек була Алла,
Ышанып кил һин Уға.

Күрәһең һин Уның эшен,
Тәбиғәт күренешен.
Яҡтылыҡ бирә Хоҙай,
Кил һин Уға һуңламай.

Гонаһтарың бар һинең,
Тыуғандан гонаһлы һин.
Ҡалдыр ишек артында,
Үт үҙең түргә таба.

Күренмәй торған ишек,
Бирҙе Хоҙай – кешелек.
Мәрхәмәте киң Уның,
Изге Мәрйәм Улының.

Исеме Ғайса Мәсих,
Кәрәкмәй тартыу тәсбих.
Алла башҡортса беләә,
Телде Ул Үҙе бирә.



Ишек асыҡ алдыңда,
Атла, гонаһлы бала.
Һора һин Мәсихеңдән,
“Таҙарт гонаһтарымдан”.

Һин, Ғайса, тере Хоҙай,
Ҡаның гонаһ таҙалай.
Үлеп терелдең, Аллам,
Мин шул ишеккә барам.

Күңелде Һин аҡлайһың,
Донъяла Һин һаҡлайһың.
Арттан килә арыҫлан,
Гонаһ итмә, һин һаҡлан.

Һаҡлар һине Хоҙайың,
Ғүмерең үткән һайын.
НыҒын һин иманыңда,
Доға ҡыл, уҡы, бала.

Ғайса Мәсих Хоҙайым ,
Көн һайын мин аңлайым.
Иманым камил булды,
Донъяға Алла тыуҙы.

Тыуҙы Ул тик тән булып,
Булды бит Ул мәңгелек.

Беҙҙең өсөн оло Ҡорбан,
Шулай бит кәрәк булған.

Шуға Ул хәҙер ишек,
Кергәндәргә Ул – бишек.
Балам, тип әйтә беҙгә,
Һаҡлай Ул беҙҙе Ерҙә.

Һаҡлай Ул Иблистән,
Йөрөгән ҡара көстән.
Таҙарта гонаһтарҙан,
Ас ишекте, кер, балам.

Һәр кешенең алдында.
Шул ишек тора, бала.
Иман итеүселәргә,
Керт тиеүселәргә.

Ул ишек алып бара,
Мәңгелеккә бел, бала.
Ожмахта урын таба,
Килгәнгә Бөйөк Алла.

Гонаһтарың һанамай,
Быс(ы)раҡҡа ҡарамай.
Алла бит һине белә,
Саҡыра гел, кил генә.



Өйрәтә Ул йәшәргә,
Нисек гонаһ итмәҫкә.
Доғаларҙы өйрәтә,
Телде Ул бит һөйләтә.

Ауыҙҙы ауыҙлыҡлай,
Донъяла тере Хоҙай.
Матур һүҙҙәр һөйләрһең,
Маҡтау йырын көйләрһең.

Дарманын бирә Хоҙай,
Теләгеңде Ул барлай.
Доғаң һөйләшеү була,
Эргәңдә тора Алла.

Һинең менән һөйләшә,
Теләһәң, кәңәшләшә.
Һораһаң, яуап әҙер,
Инжилде уҡы хәҙер.

Иманлы шуны аңлай:
Иблис уны һағалай.
Йәнең Алла ҡулында.
Нығын һин иманыңда.
Амин!

*01.12.05.*

## ТЕЛЕМДЕ, ИЛЕМДЕ ДАНЛАЙЫМ, ХОҘАЙЫМ!

Башҡортома уҡыу кәрәк,белем кәрәк,
Башҡорт телен күтәрәйек беҙ тиҙерәк.
Быуат аша ҡаршы сыға наҙанлыҡҡа,
Аҡмулланың мөнәжәте һәр башҡортка.

Башҡортомдоң теле матур, иле кәрәк,
Ирекле ил, ирекле ер булыу кәрәк.
Оран һалды, илһеҙ ҡалды Әхмәт-Зәки,
Башҡорт булды, Төркиәлә үлде тәки.

Ниңә шулай тере ваҡыт ҡәҙере юҡ,
Тура әйткән Аҡмуллабыҙ йөрәккә үк.
Телебеҙҙе күтәрәбеҙ, ҡәҙерләйбеҙ,
Иман һүҙе "Аллаға шөкөр" тиәбеҙ.

Илебеҙ ирекле алды "Башҡортостан",
Ун биш йыл алға атлайбыҙ ошо юлдан.
Әхмәт-Зәки Вәлидиҙең һүҙе ҡалды,
Ирекле Башҡортостан абруй алды.

Иманға ла юл асылды, шөкөр, Алла,
Алла бар тип ышанмаған иман ала.
Күнеленә һалып ҡуйһын һәр бер ана,
Изге уйлы, яҡты йөҙлө булһын бала.



Ана һүҙен тыңламаһа, тыңлар Алла,
Доға ҡылып тапшыр балаң Хоҙайыңа.
Алла һүҙе – Кеше булған был донъяла,
Башҡорт икән,уҡы китап, һал аңыңа.

Йөрәгеңдән аклау һора, Хоҙайыңдан
Тәүбә кәрәк, гонаһлыбыҙ беҙ тыуғандан.
Аңлау мотлаҡ, ошо һүҙҙә эскерһеҙмен,
Аҡлай беҙҙе тере Хоҙай, уҡы Үҙең.

Мөнәжәтте, ҡобайырҙы яҙа халҡым,
Телде маҡтай, илде данлай, һүҙе алтын.
Һүҙен биргән Тәғәләмде данлайым мин,
Йырым аша, шиғырым аша аңларһың һин.
Амин!

*23.12.05.*

## ТЕЛЕ БАРҘЫҢ – ИЛЕ БАР

Башҡорт telendә һөйләшәм
Башҡорт илендә.
Башҡортса мин шиғыр яҙам
Башҡорт ерендә.
Башҡорт телендә йырлайым,
Башҡортса уйҙар уйлайым,

Башҡортса көйҙәр көйләйем,
Башҡортса теләк теләйем.
Башҡортса мин доға ҡылам,
Башҡортса мин әйтәм: "Аллам!"
Башҡорт телендә данлайым,
Башҡортса әйтәм: "Хоҙайым!"
Данлайыҡ беҙ Тыуған илде,
Телде бит Хоҙайым бирҙе.
Башҡа телдәрҙе беләйек,
Ләкин башҡортса һөйләйек.
Башҡортса әйтәйек: Әсәй,
Атай, олатай, ҡәртәсәй.
Ағай, апай һәм һылыуҙар –
Ниндәй матур һүҙҙәр былар.
Ғәфү ит Һин, Аллам, тиеп,
Кисер гонаһлы балаң, тиеп,
Әйтер ваҡыт килде беҙгә,
Иманға юл асыҡ илдә.
Башҡорт телен, әсәм телен,
Оноткайныҡ, бирҙе Тәңрем,
Оран һалды башҡортҡа,
Оло рәхмәт Рәхимовҡа.
Башҡортса китап уҡырға,
Доға йорто булдырырға,
Йәштәрҙе ылыҡтырырға,
Таҙа юлға баҫтырырға
Һорайыҡ Хөкүмәттән,



Булайыҡ беҙ тик берҙәм.
Аҡ юлға баҫыу кәрәк,
Аҡъярға иман терәк.
Амин!

*24.12.05.*

## АМАНАТ

Йәштәргә яҙам аманат,
Осорға яҡтыға был ҡанат.
Йәш саҡта ишетһен Изге һүҙ,
Алланы килә Ул – балам түҙ.

Фәрештә күренгән Мәрйәмгә,
Һүҙ төшөр Алланан үҙеңә.
Малай табырһың һин бер мәл,
Ғайса тип исем ҡуш үҙенә.

Ҡотҡарыр гонаһтан кешелек,
Азатлыҡ бирер Ул, изгелек.
Саф малай булыр Ул ҡорһаҡтан,
Ҡорбандың олоһо Алланан.

Изге ҡан ҡойолор Ҡорбандан,
Барғандар таҙарыр был юлдан.
Ағастан алынды, бел, гонаһ,
Ағаска эленде Һүҙ – Илаһ.

Бәрәсте биргән, бел, Аллабыҙ,
Гонаһ бар, быс(ы)рак ҡаныбыҙ.
Тыуҙы Ул, йәшәне, күрһәтте мөғжизә,
Мәңгелек ғүмер Ул, иманға кил генә.

Тыйылған емеште ашаны атабыҙ,
Тәү кеше Әҙәмде балсыктан яһаны.
Бер тыйыу ҡуйылды: ашама емеште,
Ожмахтан ҡыуҙы Ул гонаһлы кешене.

Беҙ Әҙәм балалары, гонаһлы ҡаныбыҙ,
Гонаһлы рухыбыҙ, гонаһлы йәнебеҙ.
Тик Ғайса таҙарта, ҡоткара гонаһтан,
Ожмахҡа юл аса, ҡотолоу тамуҡтан.

Хөкөм юк тәүбәгә, Хоҙайға килгәнгә,
Ғәфү ит, Хоҙайым, аңланым, тигәнгә.
Изге ҡан – мәңгелек йәннәткә барыуың,
Ҡиәмәт көнөндә хөкөмдән арындың.

Тик Алла тип йәшә ерҙәге донъяла,
Данла Хоҙайҙы тормошта һин, бала.
Күрәһең һин айҙы, ҡояшты, йондоҙҙо,
Тереклек донъяһы – Хоҙайҙың булыуы.

Бел, тыуғас, гонаһлы һин, бала,
Көн үтә,. йыл үтә, үҫә бит гонаһта.



Тыуғас һин эсмәнең, эстең һуңынан,
Тыуғас тартманың, тартыуың быйылдан.

Һүгенеү белмәнең, өйрәтте яҡындар,
Яманлыҡ эшләнең, әрләне туғандар.
Үпкәләү, рәнйетеү, китте ғәйепләү,
Үҙ-үҙеңә лә китте үпкәләү.

Ибилис, шайтандар барлайҙар эшеңде,
Дошман итәләр туғанды, күршеңде.
Һин гонаһ ҡолоһоң, ҡотолоу тик Хоҙай,
Тиҙерәк ҡоллоҡтан ҡотол һин, туғанкай.

Гонаһ ҡоло һин, бығауың бар ҡулда,
Күренмәй ул һиңә, һалынған тыумыштан.
Шул бығауҙы тота шайтандар башлығы,
Бау һала, эсерә, ҡаҙата ағыуҙы.

Һин бурыслы түгел Аллаға, туғаным,
Ул Үҙе түләгән, йән биргән, изге ҡанын,
Ул һине ярата, изге ҡан таҙарта,
Бығауың сиселә, йөрәгең гонаһтан ағарта.

Гонаһтан таҙарыу эҙләй һәр кеше,
Сөнки белә ул, гонаһлы һәр эше.
Төҙөйҙәр ҡулдары доғалыҡ йорттары,
Күңелгә, йөрәккә алмайҙар Алланы.

Алтындан, көмөштән эшләйҙәр доғалыҡ,
Эләләр мөйынға, ишеккә намаҙлыҡ.
Мәсеттә, сиркәүҙә тик динде эҙләйҙәр,
Алла эргәһендә, Ул тере, белмәйҙәр.

Хоҙайым Мәсихе хажда үлде бит,
Гонаһтан ҡотолоу - изге ҡан түгелеү.
Бурысың Аллаға түләнде, белдең бит,
Тормошҡа үрелеү, өс көндән терелеү.

Терелде был ерҙә Хоҙайым Мәсихем,
Ҡотҡарҙы кешелек, тәүбәгә кил, һеңлем.
Ҡабул ит Хоҙайҙы, эргәһендә тере Ул,
Күренмәй Алла Рух, Ғайсаны ит ҡабул.

Йәшәрһең донъяла, йәшәүең тик Алла,
Быҕауың сиселде, белерһең Рух Алла.
Шатлыҡтар күп булыр, йыуаныс Хоҙайҙа,
Данларһың Мәсихте – Хоҙайҙы ҡайҙа ла.
Амин!

*20.01.06.*



## ҒӘФҮ ИТЕГЕҘ, ТУҒАНДАР

Шиғыр килә күңелемә,
Шиғыр яҙам мин төндә.
Данлайым Хоҙайҙы көн дә,
Тыйылмаҫ булды телдә.

Тыялмаҫ телемде бирәү,
Йәшәгәнгә иман тиреү.
Тыйыр телемде Хоҙай,
Йәнемде алғас буғай.

Тере саҡта данлайым,
Яратам мин Хоҙайым.
Камил минең иманым,
Ишетһен бар туғаным.

Һеҙгә теләйем һаулыҡ,
Теләйем мин татыулыҡ.
Көн-төн доға ҡыламын,
Бойоғоп ултырамын.

Ғәйеплемен мин шуға,
Әйтә телем тик тура.
"Эсмәгеҙ" тип әйтәмен,
Барса кешегә лә мин.

Иманды мин белмәнем,
Алла барын һиҙмәнем.
Мин дә эстем, һүгендем,
Ләкин иманға килдем.

Алланың барын белдем,
Йәнемдә Уға бирҙем.
Йөрәгем түре – Хоҙай,
Тик Уны йөрәк тыңлай.

Балалар беҙҙең бишәү,
Туй булыр әле өсәү.
Эскелекһеҙ булыр туй,
Аллам һалды шундай уй.

Ғәйеп тапһағыҙ минән,
Тәрән ғәфү үтенәм.
Кисереүҙе һорайым,
Күңелемдә Хоҙайым.

Уҡыйым изге китап,
Иман һүҙен күҙем тап.
Ҡөрьәндә лә бар иман,
Уҡыһаң уны, туған.

Эсмә, тигән, хәмерҙе,
Ҡойма, тигән әмерҙе



Пәйғәмбәр (Мөхәммәт) үҙе яҙған,
Эсмәһен барса туған.

Ожмах юлына баҫтым,
Тамуҡ юлынан ҡастым.
Аллаға шөкөр, тимен,
Йырымды ла бир тимен.

Данлармын ғүмер буйы,
Балаларҙың булыр туйы.
Башымда көнө буйы,
Изгелек эшләү уйы.

Килегеҙ, йөҙөм яҡты,
Аш булыр, тамаҡ туҡлы.
Йомшаҡ урын һеҙҙеке,
Ҡаты иҙән – минеке.

Барһам, иҙәнде йыуам,
Ҡашығаяҡ таҙартам.
Керен дә йыуып ҡуям,
Инде ни кәрәк, туған?

Ғәйеплемен мин шуға
Данлау һүҙен Хоҙайға
Барса ерҙә һөйләйем,
Тыйыла мин белмәйем.

Инде хәҙер мин алйот,
Ләкин өйҙә булыр ҡот.
Алла һүҙендә торам,
Эскән ергә мин бармам.

Өҫтәлдә булһа шешә,
Китәм мин, ғәйеп итмә.
Гонаһтан мин ҡасамын,
Иманға юл асамын.

Был юлды асты Хоҙай,
Йәнен бирҙе аямай.
Алла һүҙе донъяла,
Һайлаһын Уны бала.
Амин!

*29.12.05.*

## АЙЫРМА, ҒАЙСА, ДОҒАҢДАН

Ерҙә изге доғаларҙы,
Тик Ғайсанан табамын.
Мине тапты, аҙашҡанды,
Йәннәткә мин барамын.

Ташлама, Ғайса, ташлама,
Мине изге доғаңдан,
Ташлаһаң изге доғаңдан,



Мин бәхетле булалмам.

Айырма, Ғайса, айырма,
Мине изге доғаңдан.
Айырһаң изге доғаңдан,
Мин бәхетле булалмам.

Ғәфү итте гонаһтарҙы,
Таҙартты йөрәгемде.
Йәшәргә көс, дәртен бирҙе,
Йөрөмә Минһеҙ, тине.

Кешеләр тыуа гонаһлы,
Алла һүҙе – Ғайса ул.
Мәрйәм анаға ташлаған,
Саф баланы тапкан ул.

Йәшәгән Хоҙайым ерҙә,
Беҙҙең өсөн үлгән ул.
Ҡубарылып терелгәнгә,
Күренмәй эргәңдә Ул.

Туғандарым, күршеләрем,
Килһен тере иманға.
Тере иман (Ғайса), тере Ғайса (Хоҙай),
Йөрәгеңә ал ғына.
Амин!

*10.01.06.*

## ЙЫРЫМ ДАНЛАҺЫН АЛЛАНЫ

Маҡтайым, Алла, эшең бөйөклөктә,
Тирә-як Һинең – мәрхәмәтлектә.
Һөйәһең беҙҙе, гонаһлыларҙы,
Ғәфү итәһең иманһыҙҙарҙы.

Иман юлына сығарҙың мине,
Мәрхәмәтең киң, һөйәмен Һине.
Ҡотҡарҙың мине тамуҡ утынан,
Мәңгелек ялҡын ғазаптарынан.

Тормошом йәмен Һиндә табамын,
Рәхмәтем сикһеҙ Һиңә, Аллаһым.
Доғаларымды Һин ишетәһең,
Мөхәббәт хисен миңә бирәһең.

Яраттың барлыҡ кешеләрҙе Һин,
Миңә өйрәттең яратырға Һин.
Кешеләр дошман түгел донъяла,
Ибилис – дошман, белеп ҡуй, бала.

Дошман булыр донъя михнәте,
Алдау, урлашыу, байығыу – нәпсе.
Үпкә һүҙҙәре, көнләшеү, һүгенеү,
Дошманың булыр үҙеңсә йөрөү.



Ошо өс дошман ҡаршылыҡ бирә,
Ғайса Мәсихтән Изге Рух килә.
Иблистән һаҡлай Ғайсаның ҡаны,
Донъя михнәтен айыра аңың.

Тәнеңә лә Ул көс, дарман бирә,
Гонаһтарҙан тән арыраҡ китә.
Доға, һөйләшеү Хоҙайың менән,
Инжилде уҡыу – хат ул Тәңренән.

Алла Һүҙе ул – Ғайса Мәсихең,
Ҡотҡара Һеҙҙе гонаһтарҙан гел.
Хоҙайым Ерҙә тыуған бер мәлдә,
Данланы Үҙен бөтә ғаләмгә.

Үлем ғазабы булды йәнендә.
Гонаһтарыбыҙ Уның тәнендә.
Күтәрҙе тәнде хаж ағасына (арҡыры ағаска),
Бөйөк гонаһлы торҙо алмашҡа.

Бөтә кешенең гонаһын алды,
Үҙ ҡаны менән гонаһты йыуҙы.
Еңде Иблисте Хоҙайым Ғайса,
Бушлай бирелә ярлыҡау Унда.

Эргәңдә тора тере Хоҙайың,
Йөрәгеңә ал, тәүбә һора һин.

Ғәфү ит, Аллам, гонаһтарымды,
Ҡабул итәм мин изге ҡаныңды.
Амин!

*02.02.06.*

## ИМАНДА БУЛ, ЮЛИӘ

Юлиә килгән беҙгә,
Түшкә тағып бер билдә.
Кеҫәгә элгән гильза,
Һуғыш билдәһе була.

Ә муйында ялтырай,
Сыйырға аҫкан малай,
Фашистарса свастика,
Эргә-тирә черепа.

Нимә аңлата тиһәң,
Мин үҙем әйтеп бирәм.
Еңеү килтерҙе ҡартаң,
Фашистҡа ҡаршы саҡкан.

Ә ейәне маһайған,
Кресты түшенә аҫкан.
Әллә фашист ярата,
Әллә Ибилис тарата.



Бәлә-ҡаза килмәһен,
Аллам һине һаҡлаһын,
Бер ваҡыт Ул аҡлаһын,
Гонаһтарың таҙартһын.

Бел, килеү һинән була,
Хоҙай эргәңдә тора.
Килһәң, иман таҙарта,
Йөрәгеңде ағарта.

Хоҙай һине ярата,
Иблис тамуҡҡа тарта.
Бәлә килһә, алып бәр,
Булма, һылыу, тәкәббер.

Иблис тағы муйынға,
Айҙы ла, кресты ла.
Һуңламай кил иманға,
Тере Хоҙай Ғайсаға.
Амин!

*02.02.06.*

## ТЕРЕ ХОҘАЙ КҮҢЕЛДӘ

Һәр кеше эҙләй Хоҙай,
Уйында ғүмерен барлай.
Ниңә йәшәй донъяла,
Ҡайҙа икән, тип, Алла.

Йола үтәй донъяла,
Изгелек бар, бар Алла.
Күңелдә бушлыҡ ҡала,
Унда Хоҙай булмаһа.

Алла бар, ти һәр бәндә,
Хәбәр бирә ҡарсәйгә.
Йола-хәйер ҡоткармаҫ,.
Алла һиндә булмағас.

Гонаһлы ерҙә кеше,
Яуызлыҡ уның эше.
Ярамһаҡланыу уйы,
Алла күрәлмай уны.

Хоҙай юлын күрһәткән,
Кисереү минән, тигән.
Изге ҡанын Ул түккән,
Ул һинең өсөн үлгән.



Өс көндән һуң терелгән,
Беҙгә мәңгелек биргән.
Иблис – алдаҡсы, юха,
Еңелгән был донъяла.

Иман ит Хоҙайыңа,
Ғайса Мәсих Аллаңа.
Уның изге ҡанына,
Ҡотолоу килер һиңә.

Мәңгелек тормош бирә,
Күңелгә Рухы килә.
Йәшәргә Ул өйрәтә,
Гонаһтар ары китә.

Доғаңды Ул ишетә,
Үҙең һин Унан китмә.
Гел данла Хоҙайыңды,
Аҡланы Ул йәнеңде.
Амин!

*02.02.06.*

## КЕШЕ ТӘҮБӘҺЕН
## ТИК ХОҘАЙЫМ ҠАБУЛ ИТЕҮСЕ

Хөкөм көнөнөң Батшаһы – Алла Һүҙе
Гонаһлы кешеләргә ҡулланма бирҙе Үҙе.
Тәүрәт – Мусаға, Зәбүр Дауытҡа биргән,
Инжил – Ғайса Мәсихтән, раҫлаусы
Ҡөрьәндән.

Ғүмер буйы бәндә эҙләй ярлыҡау,
Гонаһлы булғанға тәүбәне – Алланан һорау.
Хәйер, йола һәм ҡорбан салыу,
Алланың мәрхәмәтенән ҡалыу.

Дин һәм изгелегең килтермәҫ Аллаға,
Ике йөҙләләктә күрәлмәҫ Хоҙайҙа.
Алла Һүҙен ташлаған Мәрйәм анаға,
Саф ир бала тыуған был донъяға.

Атаһыҙ тыуған Ғайса Мәсих,
Изге Һүҙ Алланан, тартма һин тәсбих.
Асыуын килтермә Алланың,
Мәрхәмәтле лә, ҡәһәрле лә Хоҙайың.

Алланан ҡабул ит һин бар нәмәне,
Яҡшылыҡты, яманлыҡты һәм ҡәһәрҙе.



Ләкин иман иткән һәр бәндәне,
Ярлыҡай тере Хоҙай, килгәндәрҙе.

Тере Хоҙай – Ғайса Мәсихең,
Иман итһәң, һин терелерһең.
Гонаһлы һин, үлеһең Алла өсөн,
Һиндә юҡ бит Изге Рух көсө.

Изге Рухты бирә Хоҙай иманлыға,
Уға килгән, таҙартылған һәр балаға.
Ғайса түккән изге ҡанын беҙҙең өсөн,
Оло Ҡорбан булып үлгән, биргән көсөн.

Бурысыбыҙ юҡ Аллаға, Ғайса алды,
Йәнен бирҙе, ҡанын түкте, үлеп ҡалды.
Өс көн үткәс Ул терелде, Хоҙайыбыҙ,
Күпер һалды, йәннәткә беҙ баралабыҙ.

Бөйөк Алла мәрхәмәтен асты беҙгә,
Алла Һүҙен – Кеше итте еребеҙгә.
Оло Ҡорбан – Ғайса Мәсих – тыуҙы, үлде,
Өс көн үткәс Хоҙайыбыҙ бит терелде.

Үлеһең һин, гонаһлы бәндә, был ерҙә,
Терелтә һине тик Ғайса, кил Үҙенә.
Изге Рухын бирә, гонаһтарҙы ярлыҡай,
Кил һин үҙең Ғайсаға, Ул һиңә тере Хоҙай.

Кисерә Ғайса гонаһлы йөрәкте,
Таҙарта ҡаны гонаһлы йәнде.
Изге Рух йәшәй күңел түрендә,
Өйрәтә Алла, йәшәй үҙемдә.

Яуыз тормошта бирә тыныслыҡ,
Түҙемлек бирә, бирә сабырлыҡ.
Йәннәт ишеге асылды миңә,
Мәңгелек тормош бирә килгәнгә.
Амин!

*03.12.06.*

## АЛЛА ҺҮҘЕ САҠЫРА ИМАНҒА
## ҺӘР БӘНДӘНЕ
## БЫЛ ГОНАҺЛЫ ДОНЪЯЛА

Алла Һүҙе күңелдә,
Доға йорто – үҙемдә.
Тәүбә иттем, кисерҙе,
Мәңге йәшәрһең, тине.

Алла һүҙе икмәк ул,
Иманлыға – "тере һыу".
Иманда ғына һин бул,
Алланан һин килеп тыу.



Ике тыуған бер үлер,
Алла менән ул булыр.
Йәннәт ишеге асыҡ,
Тәнең ҡалыр, ул – балсыҡ.

Әсәйҙән һин тәү тыуҙың,
Иманға тоғро булдың.
Изге Рухҡа мансылдың,
Һин икенсегә тыуҙың.

Килер ваҡыт бер заман,
Иманға кил, уҙаман.
Аллаң – Атаң булыр саҡ,
Йөрәгең саф, булыр аҡ.

Мөхәббәт ташып торор,
Телең тик Алла тиер.
Йәнеңдә һаҡлар Хоҙай,
Иманға кил һин, малай.

Алла Һүҙе – ул Хоҙай,
Ерҙә тыуҙы ул малай.
Ғайса Мәсих исеме,
Мәрйәм ана изгеле.

Ғайса беҙҙе ярата,
Донъяға килеп тыуа.
Кеше булып йәшәгән,
Кеше өсөн Ул үлгән.

Бурыстан беҙ ҡотолған,
Гонаһ өсөн ул Ҡорбан.
Терелгән беҙҙең өсөн,
Бирә ул Рухи көсөн.

Рух көсө йәшәй миндә,
Хоҙай һиңә лә бирә,
Ҡабул итһәң Хоҙайҙы,
Тере Ғайса Мәсихте.

Гонаһты йыуа ҡаны,
Ҡабул итһәң һин Уны.
Ғәфү ит, Хоҙай, тиһәң,
Гонаһыңды таныһаң.

Гонаһлы бөтә донъя,
Гонаһлы тыуа бала.
Гонаһты Ғайса йыуа,
Ҡабул ит Уны, бала.
Амин!

*03.12.06.*



## ИМАНҒА КИЛ, БАЛА, АЛЛАҒА

Бала тыуа донъяға,
Хоҙайҙы һөйлә уға.
Гонаһта була бит йән,
Бала быны белмәгән.

Әҙәмдән килә гонаһ,
Хоҙайым изге Илаһ.
Гонаһтарҙы Ул ала,
Белмәй уны тик бала.

Һөйлә Хоҙайыңды балаға,
Килһен балаң иманға.
Тере Алла янында,
Ҡабул итһен йәненә, аңына, йөрәгенә.

Аҡ бәрәс төшкән күктән,
Алла бит Һүҙен биргән.
Изге Рух килер, тигән,
Саф малай тыуыр һинән".

Фәрештә шулай тигән,
Мәрйәм ана ишеткән.
Ул бер ҙә шикләнмәгән,
Мин – Алла ҡоло, тигән.

Малай исеме Ғайса,
Гонаһтарҙан таҙарта.
Изге бит Уның ҡаны,
Ул -– Алланың Ҡорбаны.

Тыуҙы, йәшәне, үлде,
Кеше мөғжизә күрҙе.
Мин – Хоҙай, тине Илаһ,
Тыумыштан ҡаның гонаһ.

Ғайса ҡаны таҙарта,
Түкте арҡыры ағаста.
Ҡаҙаҡланы үҙ халҡы,
Таныманы Хоҙайҙы.

Ул Үҙен Хоҙай тине,
Үлтерерһегеҙ Мине,
Һеҙҙең өсөн үләмен,
Өс көндән тереләмен.

Әйткәне дөрөҫ булды:
Ҡаҙаҡланылар ҡулды,
Язаланылар Уны,
Булды Ул Алла Улы.

Өс көндән терелде Ул,
Гонаһ өсөн Үлде Ул.



Ҡаны гонаһ таҙарта,
Килһәң тере иманға.

Тере Алла эргәңдә,
Ул бөтәһен дә күрә.
Тыуғандан китмәй килә,
Ал һин Уны үҙеңә.

Ғәфү ит, Хоҙай, тиһәң,
Гонаһымды йыу минән.
Изге Рухҡа мансылдыр,
Үҙеңдән мине тыуҙыр.

Алла һине ишетер,
Йөрәгеңә Ул керер.
Иманыңда йөрөтөр,
Йәннәттә урын бирер.

Яңынан һин тыуырһың,
Гонаһ өсөн үлерһең.
Йәбешмәҫ һиңә гонаһ,
Данларһың гелән – Илаһ.

Ғайса Мәсих Илаһың,
Һин тик Унан булырһың.
Тотарһың һин Инжилде,
Алла китапты бирҙе.

Был китапты уҡырһың,
Иманыңда үҫерһең.
Алла һүҙен белерһең,
Донъяла терелерһең.

Гонаһҡа бармаҫ телең,
Гонаһ теләмәҫ тәнең.
Доға ҡылып йәшәрһең,
Алла һүҙен данларһың.

Ҡорбаның – данлау һүҙе,
Ғайсаны – Алла һүҙен.
Еткереү үҙ халҡыңа,
Тәүбә юлын аңына.
Амин!

*09.02.06.*

## ЙОМШАҠ БАЛСЫҠ БУЛҒЫМ КИЛӘ АЛЛАМ ҠУЛЫНДА

(Әҙәмде яһаған кеүек Хоҙайым,
Балсыктан ожмахында,
Минең тәнде лә йомшаҡ балсыҡ итеп,
Үҙгәрт, Аллам, Һинең ихтыярыңда.)



Тән кешене балсыктан,
Яһаған күктә Аллам.
Мин дә Әҙәм тәненән,
Үҙгәрт Аллам – йән биргән.

Йәнемде Һин һаклайһың,
Тәнем Һине маҡтаһын.
Йомшаҡ балсыҡ ит мине,
Үҙгәрт Үҙеңсә тәнде.

Еңел булһын йөрәүгә,
Данлаһын һине гел дә.
Ҡулдарым шиғыр яҙһын,
Бер ваҡыт та талмаһын.

Күҙҙәрем күрһен эшең,
Хоҙай бар, тиһен кешең.
Ҡолаҡтарым ишетһен,
Аллаһыҙ йәшәмә һин.

Телемдә булһын доға,
Шөкөр, тием Хоҙайға.
Йөрәгем тибә – Алла,
Һинһеҙ ул да туктала.

Аңымды ла Һин арба,
Уйламаһын алама.

Уйымда булһын данлау,
Хоҙайҙың эшен мактау.

Тирә-яғыңды ҡара,
Хоҙайҙың эшен данла,
Һыу, һауа, ҡояшыңды,
Ер, ағас, хайуандарҙы.

Һандуғас һайрай йәйен,
Һикерә ҡуян, тейен.
Балаңа һоклан, кеше,
Ул да Хоҙайҙың эше.

Ләкин гонаһлы донъя,
Гонаһлы тыуа бала.
Үҫеп еткәс күрәһең,
Кем булырын беләһең.

Теләгең, әсә, изге,
Йәшәйһең бит һин динле.
Дин килтермәй Аллаға,
Кил һин тәүҙә иманға.

Тере Алла, иманға,
Тәүбәгә кил Хоҙайға.
Ғәфү һора һин Унан,
Һин бит гонаһлы тыуған.



Иман мине үҙгәртә,
Йәнем тыныс күңелдә.
Доғаларым ишетә,
Тәнгә лә һаулык килә.

Үҙгәртә Ул тәнемде,
Тынысландыра йәнде.
Балам булһын ти йәмле,
Данлар ул балсыҡ-тәнде.

Бирешмәһен гонаһҡа,
Артыҡ күпте ашауға.
Бирән булмаһын балам,
Һөйә шул мине Аллам.
Амин!

*10.02.06.*

## УРАҘА – АЛЛАНЫ ДАНЛАУҒА

Ураҙаны тотамын,
Алланы онотмамын.
Тәнемә һаулык бирә,
Данлаһын мине тейә.

Ураҙала ныҡланам,
Доғам ишетә Аллам.
Иманда нығыт мине,
Данлармын мәңге һине.

Данлауға лайыҡһың һин,
Ҡотҡарҙың упҡындан һин.
Гонаһ упҡыны ине,
Тартып алдың һин мине.

Ураҙала мин торһам,
Тәнемә ҡаршы торһам.
Ул бит гонаһҡа тарта,
Рухта Алла нығыта.

Доға ҡылам Хоҙайға,
Уның изге ҡанына.
Һүҙ булып килгән ергә,
Кеше булып йөрөргә.

Гонаһ Унда булмаған,
Саф малай ерҙә тыуған.
Мәрйәм булған анаһы,
Алла Уның атаһы.

Изге Рух биргән көсөн,
Үлгән Ул гонаһ өсөн.



Арҡыры ағасҡа ҡаҙалған,
Хоҙай гонаһты алған.

Кешелек гонаһтарын,
Алған Ул үҙ иңенә.
Алла бәрәсе булған,
Үлгән бит оло Ҡорбан.

Ҡаны изге Ҡорбандың,
Таҙарта гонаһтарың.
Өс көндән һуң терелә,
Мәңгелек тормош бирә.

Тора Хоҙай эргәңдә,
Ярлыҡауҙы Ул бирә.
Тере Хоҙай күренмәҫ,
Гонаһлы әҙәм белмәҫ.

Һөйләтә мине Хоҙай,
Мәрйәмдән тыуған малай.
Шиғыр яҙҙыра ҡалай,
Туғандар Уны данлай.

Уны ҡабул иткәндәр,
Инжил уҡып киткәндәр.
Һәр береһенә туған,
Сөнки Алланан тыуған.

Алла Рухы уларҙа,
Улдарҙа һәм ҡыҙҙарҙа.
Яҡлаусы була Үҙе,
Йыуатыусы күңелде.

Атлайым күккә табан,
Көн һайын яҡынаям.
Аллам асты ишекте,
Йәннәт тигән бишекте.

Тышҡы кешем иҫкерә,
Эске кешем йәшәрә.
Иҫкергән ҡәбер китә,
Йәшәргән йәннәт етә.

Таҙарта мине Хоҙай,
Кешеләрсә ярамай.
Алла ҡушҡанды эшлә,
Шулай һиңә килешә.
Амин!

*21.02.06.*



## МӘҢГЕ ЙӘШӘҮ – ХОҘАЙҘА, УНЫҢ ИЗГЕ ҠАНЫНДА

Тыумай кеше мәңгегә,
Тәне китә ҡәбергә.
Йәне лә урын тапмаҫ,
Алланы һайламағас.

Иманға килеү мотлаҡ,
Шунда булыр йөрәк аҡ.
Ҡан менән таҙарыныу –
Хоҙайыңа табыныу.

Хоҙайым тыуған ергә,
Беҙҙең өсөн үлергә.
Изге ҡанын түгергә,
Мәңге тормош бирергә.

Мәрйәм тапҡан баланы,
Күңеле саф малайҙы.
Ғайса – Ҡотҡарыусыны,
Мәңге майланыусыны.

Алла һүҙе донъяла,
Кеше булған, бел, бала.
Кил тиҙерәк иманға,
Тере Ғайса – Хоҙайға.

Алланан тыуырһың һин,
Тыуҙым бер ваҡытта мин.
Иҙге Рухы – йөрәктә,
Йәшәргә Ул өйрәтә.

Гонаһ өсөн үлдем мин,
Йәшәү өсөн тыуҙым мин.
Мәңгелек тормош бирҙе,
Йөрәктә йәшәй Үҙе.

Күңел түрендә Хоҙай,
Гонаһ эшләү ярамай.
Тере Ғайса ярлыҡай,
Көнө-төнө һағалай.

Һағалай Иблистән,
Ерҙәге ҡара көстән.
Йәнем бирҙем Аллаға,
Һаҡлай мине донъяла.

Донъя тулған гонаһҡа,
Ышан изге Илаһҡа.
Ерҙә тыуған Хоҙайға,
Саф йөрәкле малайға.

Оло Ҡорбан булғанға,
Үлтерҙе яуыз донъя.
Иблис бит еңелде,



Пәйғәмбәрҙәр бит белде.

Улар Китап уҡыйҙар,
Эстәлеген аңлайҙар.
Үҙҙәре яҙған Инжил,
Изге Рух биргән еңел.

Рух килә тик Хоҙайҙан,
Уның изге ҡанынан.
Өйрәтә Ул йәшәргә,
Нисек дөрөҫ эшләргә.

Доғаны һин ҡылаһың,
Изге Рухҡа тулаһың.
Яҡтылыҡ бирә Хоҙай,
Сәсәһең ерҙә бойҙай.

Бойҙай – орлоҡ бөртөгө,
Тупраҡтар була төрлө.
Уңдырышлы тупраҡ,
Сәселгән орлоҡ шытмаҡ.

Алла үҫтерә уны,
Сәсеүең һинән булды.
Сәскә атыр үҫенте.
Орлоҡ сәсер бер көндө.
Амин!

*21.02.06.*

## ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРҒА ИМАН ҺҮҘЕ

*"Һеҙгә яңы әмер бирәм – бер-берегеҙҙе яратығыҙ"*
*(Яхъя тәғбир иткән Инжил, 13:34)*

Мөхәббәт булған ожмахта,
Аллам кешене ярата.
Балсыҡтан атамды – Әҙәмде,
Яртыһы Һауаны -– әсәмде.

Тәүрәттә яҙылған дөрөҫ бит,
Тәү донъя баҡсаһы Эдем бит.
Ҡауышыу бер бөтөн булалыр,
Мөхәббәт Алланан тыуалыр.

Сәскәнән таж үргән әсәбеҙ,
Шатлыҡта йәшәгән атабыҙ.
Бер-берен яратып һөйгәндәр,
Аллаһыҙ йәшәү юҡ, тигәндәр.

Тик гонаһ айырҙы Алланан,
Ҡыуылды ата-әсә ожмахтан.
Тыйылған емеште ҡаптылар,
Ҡәһәрле ергә ҡайттылар.

Мөхәббәт һүрелмәй Алламдың,
Килерһең иманға, аңларһың.



Тик гонаһ күсәсәк быуынға,
Ҡан менән бирелер балаңа.

Гонаһты күрәбеҙ донъяла,
Тәүбә ит, иманға кил, бала.
Тәү кеше Әҙәмгә һүҙ атма,
Ир заты тәү булды ожмахта.

Ғаиләлә татыулыҡ шундалыр:
Ирҙе ир итеүҙән булалыр.
Мөхәббәт хисендә яндырыу,
Ҡатын-ҡыҙ, тик һинән торалыр.

Әсә, һин баланы һөйәһең,
Ул емеш, ир затын беләһең.
Тыңла һин Алланың әйтеүен,
Мөхәббәт, иманда йәшәүең.

Ҡатын-ҡыҙ ир затын ятһын,
Мөхәббәт быуынға таратһын.
Иманға Хоҙайға килһендәр,
Ул һалған һөйөүҙә һөйһөндәр.

Мин килдем иманға, беләмен,
Һөйөү тик Аллала, күрәмен.
Шул хистәр яндыра йөрәкте,
Барын да һөйөргә өйрәтте.

Алламдың әмерен үтәйек
Бөтә йөрәк, аң һәм йән менән.
Хоҙайҙы, кешеләрҙе, үҙебеҙҙе,
Тәрән һөйөүгә етәйек.

Яратыу һалына Аллаға.
Иманда йәшәһә барһы ла.
Бер ата, әсәнән тыуғандар,
Уйла һин, кешеләр-туғандар.

Яртылар тоташа ғүмергә,
Бер бөтөн буласаҡ был ерҙә.
Мөхәббәт данланы Хоҙайҙы,
Ожмахҡа юл таба иманлы.
Амин!

*01.03.06.*

## ХОҘАЙЫМ МИНЕҢ БАЙРАҒЫМ!

*"Әгәр ҙә бойҙай бөртөгө*
*ергә төшөп үлмәһә... "*

*1. Алла ихтыярына бойһоноу – үҙең өсөн түгел, Уның даны өсөн күберәк емеш килтерергә ынтылыу (үҙ ихтыярыңды үлтереү!).*



*2. Вакытлыса (ерҙәге) ғүмер өсөн үлеү. Кем Алланың даны өсөн йәшәй, шул күп емеш килтерә. Тормошоңдо, ғүмереңде Аллаға хеҙмәт итеүгә бағышлау (Алла ҡоло булыу!).*

*3. Үҙеңдең мин-минлегеңдән баш тартыу, Алла ихтыярына бойһоноп йәшәү. Маһайыу, "мин"де үҙүҙеңдә үлтереү, Алланың данына юл биреү, шөкөр тип йәшәү.*

Еңеү килер шунда ғына,
Хоҙай булһа байрағыңда.
Уның даны өсөн йәшә,
Китап аша һүҙ өндәшә.

Һүҙ булған тәүҙә Аллала,
Ул Һүҙ булған Үҙе Алла.
Шул һүҙ аша барлыҡ донъя
Яратылған тәү донъяла.

Тәү донъя һәм тәүге кеше,
Тәне балсыҡ Алла эше.
Йәне, Рухы ла бирелгән,
Изге Рухты ла өргән.

Изге Рух ул үҙе Алла,
Бирелә ул ышанғанға.

Тәүбә тиеп гонаһтарҙан,
Таҙарынһа тик Хоҙайҙан.

Алла Һүҙе – Хоҙай Үҙе,
Ул бит Үҙе ергә килде.
Кеше тәнле булып тыуҙы,
Мәрйәм ана тапты Улды.

Оло Ҡорбан бирҙе Алла,
Кеше гонаһлы булғанға.
Ҡандан китте быуындарға,
Туҡтатыу бирҙе Хоҙайға.

Ҡанһыҙ гонаһ йыуылмаҫ ул,
Ундай ҡан ерҙә булмаҫ шул.
Гонаһлы бит бөтә бәндә,
Мал ҡорбанын алмай Алла.

Үҙе юлын бирҙе Хоҙай,
Килеп тыуҙы ергә малай.
Изге Рухтан тыуҙы бала,
Мәрйәм булды изге ана.

Уҡытыусы булды Ерҙә,
Пәйғәмбәрҙәр тыуҙы илдә.
Изге Рухтан хәбәр килде,
Теркәп барҙы Инжил Һүҙҙе.



Хаж ағаста ҡаты яза,
Беҙҙең өсөн Хоҙай ала.
Тән гонаһын изге ҡанға
Мансылдырҙы Мәсих Ғайса.

Үлеп кенә ҡалманы Һүҙ,
Ҡубарылып терелде, күр.
Ике мең йыл булды был хәл,
Ҡотҡарылыу килде бер мәл.

Тере Хоҙай күренмәҫ ул,
Тора һуҙып тоғоро ҡул.
Бир йөрәгең, тапшыр Уға,
Мәңгелек тормош – Хоҙайҙа.
Амин!

*11.03.06.*

## Мөнәжәт

Оран һалам мин халҡыма,
Иманға килһен барыһы ла.
Ҡотҡарылыу тик Алламда,
Уның оло Ҡорбанында.

Донъя ҡыуып алданмағыҙ.
Тере булһын иманығыҙ.

Тик Алланан ғына тыуған
Үҙ телендә доға ҡылған.

Телебеҙҙе Хоҙай бирҙе.
Әҙәмгә,эҙләрһең, тине.
Һынау үтә кеше ерҙә,
Тик Алла тип кенә йәшә.

Гонаһтарҙан таҙарыу бар,
Тәүбәгә килеү юлы тар.
Оло Ҡорбан – Ғайса Мәсих,
Ерҙә тыуған, шикләнмә һис.

Мәрйәм ана тапҡан бала,
Саф малай буған донъяла.
Һинең өсөн Ҡорбан булған,
Арҡыры ағаста ҡанын ҡойған.

Тере Хоҙай һинең менән,
Ҡалдырмай йөрөй ул гелән.
Гонаһлымын тип белдерһәң,
Ғәфү итә ҡаны менән.

Һора Унан изге юлды,
Һине тапты – аҙашҡанды.
Данла ерҙә Уның эшен,
Ерҙә Хоҙай булды кеше.



Мөнәжәтем яҙа-яҙа,
Ҡәләм тотҡан ҡулым тала.
Ике күҙҙән йәшем аға,
Сабырлыҡ бир, тере Алла.

Мөнәжәттәрем һис бөтмәҫ,
Ҡағыҙ менән ҡара етмәҫ.
Йөрәгемдән доға китмәҫ,
Иманһыҙ Алланы белмәҫ.

Мөнәжәтем һеҙгә булһын,
Тууғандарым доға ҡылһын.
Доғалары ҡабул булһын,
Иманлылар ерҙә тыуһын.
Амин!

*18.03.06.*

## ДОҒАҢДА НЫҒЫТ, АЛЛАМ

Һәр иртә доға ҡылам,
Мәрхәмәтең киң, Аллам.
Гонаһтарым алдында,
Йыу Һин изге ҡаныңда.

Йәшәргә өйрәт, Алла,
Был гонаһлы донъяла.

Сәсәм һүҙеңде – бойҙай,
Үҫтерһен тиеп Хоҙай.

Шыҡкан орлоктар килә,
Һүҙеңә бит баш эйә.
НыҒыт Үҙең иманда,
Ҡараңғы был донъяла.

Яратам Һине, Аллам,
Мөғжизә күрәм һаман.
Киткәндәр килә тағы
Һин бит Бөйөк – Юғары.

Доғам тормошҡа аша,
Йөрәктә шатлыҡ таша.
Мәңгелек тормош Һиндә,
Йөрәк, аң, йәнем һиҙә.
Амин!

*28.03.06.*

## ИЗГЕ ҺҮҘ

Тормошом мәшәкәттәрен,
Аллаға тапшырамын.
Бөтә нәмә Алланан,
Тик Уға ышанамын.



Ҡайғы килһә, иң элек,
Бирә Хоҙай түҙемлек.
Сабырлыҡ килә Унан,
Ғайса ул тере иман.

Бөтмәҫ шатлыҡ хистәре,
Йәнем тыныс кистәре.
Йоҡомдо һаҡлай Хоҙай,
Сәстерә көн дә “бойҙай".

Бойҙай бөртөгө Һүҙе,
Алланан килгән Үҙе.
Сәселһә, башаҡ үҫә,
Мәңгелеккә йән күсә.

Бойҙай бөртөгө үлгән,
Беҙҙең өсөн йән биргән.
Гонаһ йыуған, ҡан түккән,
Изге Рух бирә күктән.

Кешеләр Рухи үлгән,
Изге Ғайса терелгән.
Ышанғанға Рух бирә,
Иман бит Унан килә.

Ҡыл күпере Ғайсала,
Уның изге ҡанында.

Гонаһтарҙы Ул йыуа,
"Изге Рух" – ҡойондора.

Был донъяла мул тормош,
Алланан булыр тыумыш.
Гонаһ ҡыла бәндә лә,
Алла бар, тип белмәһә.

Ә Хоҙайҙы һайлаһа,
Тик Уға ул һыйынһа,
Изге Рухҡа ҡойонһа,
Ғайса Мәсихтән тыуһа,

Барыр был кеше ожмах,
Ирер йөрәгендә таш.
Мәңгелек булыр тормош,
Һин дә килергә тырыш.
Амин!

*28.03.06.*



## МӘСИХСЕЛӘР КЕМДӘР УЛАР? – АЛЛАҒА ТОҒРО ҠОЛДАР!

Телемде биргән Аллам,
Данлаһын тиеп балам.
Әҙәм – тәү ата булған,
Гонаһ ожмахта тыуған.

Алла ҡыуған баҡсанан,
Йәшә ерҙә һин, балам.
Килеп етер бер заман,
Саф малай тыуыр ҡыҙҙан.

Тәүрәттә был яҙылған,
Зәбүрҙә йыр данлаған.
Инжил Алланың Үҙе,
Мәрйәмгә төшкән Һүҙе.

Кеше булып тыуған Ул,
Ғайса Мәсих булған Ул.
Гонаһтарҙан таҙарта,
Ожмахҡа алып бара.

Оло Ҡорбан ул Үҙе,
Алланың изге Һүҙе.
Ғайсаға кил, иманға,
Үлеп терелгән Алла.

Гонаһ упҡыны аша,
Ҡыл күпере ул була.
Килеп киткән Хоҙайым,
Тик Уны мин данлайым.

Йөрәгем Уны һөйә,
Аңым тик Алла тийә.
Ҡулым яҙа шиғырым,
Телем көйләй йырҙарым.

Ғайса Мәсихкә килгән,
Үҙен "Мәсихсе" тигән!
Тоғ(о)ро бул донъяла,
Һин Алла ҡоло, бала.

Хеҙмәт ит һин Аллаңа,
Ошо Ерҙә, бел, бала.
Уяу бул был донъяла.
Доғаң булһын гел янда.

Сабырлыҡ бирер Хоҙай,
Тыныслыҡ Ерҙә тыумай.
Бирә тик Уны Ғайса,
Үҙеңде бирһәң Уға.

Үҙгәртер Хоҙай һине,
Икенсе итте мине.



Йомшаҡ балсыҡ мин Уға,
Тыңлауҙы бирә доға.

Ихтыяр ҡуй Аллаңа,
Һәр эштә, тормошоңда.
Бөтә нәмә тик Унан,
Ҡабул итә бел, балам.

Шатлыҡтар, ҡыуаныстар,
Ҡайғылар, һыҙланыштар.
Бөтәһен бирә Хоҙай,
Ярата беҙҙе шулай.

Ашыҡ һин тик килергә,
Иманда терелергә.
Тере Ғайса ҡотҡара –
Тамуҡтан тартып ала.

Алла өсөн һин үле.
Терелтә Ул тик Үҙе.
Гонаһлы тыуа бала,
Иманға кил, Аллаға.

Изге Рух бирә Хоҙай,
Мәрйәмдән тыуған малай.
Һин яҡтылыҡ донъяла,
Иманда ныҡ бул, бала.

Доғаңды көн дә ҡыл һин,
Алла Һүҙен уҡы һин.
Кешегә һөйлә мотлаҡ,
Булма һин ерҙә ҡурҡаҡ.

Һөйлә һин барса ерҙә,
Оялыу белмә бер ҙә.
Доға әйтеп һүҙ башла,
Ҡалғанын һөйләй Алла.

Һинең аша һөләй Ул,
Тик һин тоғро ҡол бул.
Талант һора Алланан,
Бирә Алла, һораһаң.

Ләкин һора данларға,
Тик тар юлдан барырға.
Маһайыу бирмәҫ Хоҙай,
Иманда торһаң – данлай.

Данлар Ул үҙе һине,
Бағышлаһаң ғүмереңде.
Тик Хоҙай тип йәшәһәң,
Көн дә Мәсих тип "үлһәң",
Хоҙайым тип йәшәһәң,
Йәнеңде Уға бирһәң.



Уның өсөн эҙәрләү,
Йәберләү һәм кәмһетеү,
Һине көн дә көтәсәк,
Түҙемлек Ул бирәсәк.
Тере Алла үҙеңдә,
Сабырлыкты Ул бирә.

Һаҡлай һине Хоҙайың,
Даны өсөн көн һайын.
"Алтын" утта сыныға,
Әҙер бул көн дә быға!

Мәсихсе булыр алтын,
Быс(ы)раҡта һин яттың.
Күтәрҙе һине Хоҙай,
Данла Уны туҡтамай.

Тоноҡ алтын инең Һин,
Тапты Ғайса Мәсихең,
Ялҡынында ян Уның,
Таҙартһын изге ҡаның.

Насар ғәҙәттәр китер,
Үпкәләү һүҙең бөтөр.
Көнләшеү бүтән булмаҫ,
Рәнйетеү һиндә тыумаҫ.

Таҙартыр, утта тотор,
Тыңлаусылығың тыуыр.
Икенсе кешеһең һин,
Алланан тыуҙың бит һин.

Үҙенсә үҙгәртә Ул,
Ғайса Мәсих Алла ул.
Тик хеҙмәтеңде көтә,
Тоғролоҡ өмөт итә.

Аҙашҡандар, гонаһлылар,
Юлды тапмай үләләр.
Күрһәт уларға тар юл,
Бул Аллаға тоғро ҡол.
Амин!

*31.03.06.*

## ИМАНҒА ЫНТЫЛЫҒЫҘ!

Иман һүҙе еткерәм,
Алла бар, тип мин беләм.
Яманлыкты ҡуйығыҙ,
Яҡтылыкта торогоҙ.
Иманға ынтылығыҙ,
Алла ҡоло булығыҙ.



* * *

Сәсән һүҙе бер булыр,
Яманлыҡҡа уҡ булыр.
Гонаһҡа ҡаршы сығыр,
Иманда тоғро торор.
Туғандары күп булыр,
Ожмах булыр йортобоҙ.

* * *

Эскелек ул яманлыҡ,
Ғәйбәт һүҙ – ялағайлыҡ.
Алдашыу һәм урлашыу,
Тамуҡҡа китеп барыу,
Гонаһта булып ҡалыу,
Мәңгелек утта яныу.

* * *

Изгелек эшләү яҡшы,
Тормошоң булыр яҡты.
Һаран булыу – нәпселек,
Байлығың ҡалыр сереп.
Ҡас гонаһтан һин елеп,
Тәүбәгә кил иң элек.

* * *

Гонаһ шешең күбәйер,
Ауырыуың көсәйер.
Еңә алмаç дарыу ҙа,
Килегеҙ һеҙ иманға.
Бирелеҙ Хоҙайға,
Ҡотҡарыусы Аллаға.

* * *

Иманға юлды беләм,
Тыйылыу кәрәк гелән.
Самогонды ҡойоуҙан,
Хәмерҙе ҡулланыуҙан,
Наркотикты ҡаҙауҙан,
Гонаһҡа ҡол булыуҙан.

* * *

Атайһыҙ балалар тыуа,
Фәхишәлек һин ҡылма.
Атаң-әсәң хөрмәт ит,
Аҡһаҡалды тыңлап үт.
Ололарҙы ҙурлап кит,
Таҙалыҡҡа барып ет.



* * *

Әшәке һүҙҙе белмә,
Матур һүҙҙәрҙе һөйлә.
Ауыҙлыҡ булыр телдә,
Иманға килеүеңдә,
Гонаһтан тыйылыуҙа,
Яманлыҡты ҡуйыуҙа.

* * *

Гонаһлы йәшәй бәндә,
Алла бар, тип белмәһә.
Аҡланыу ерҙә, эҙлә,
Ҡиәмәт көнө килә.
Хөкөм Батшаһын күреү,
Һуң булыр бит үкенеү.

* * *

Үлмәç борон килегеҙ,
Иманда терелегеҙ.
Камил булһын иманың,
Килерһең тип уйлайым.
Аҡлар ерҙе Хоҙайың,
Гонаһлы һинең ҡаның.

* * *

Язаһын бирҙе Алла,
Йәшә һин ерҙә, бала.
Ғүмер буйы эҙләрһең,
Күктә һин теҙләнерһең.
Хөкөм итәмен йәнең,
Һөйләй алмаҫ бит телең.

* * *

Тән балсык ерҙә серей,
Йән сыға – ул бит үлмәй.
Яуапка ул тартыла,
Иманлылар ҡотола.
Хөкөм булмай уларға,
Тоғ(о)ро барғандарға.

* * *

Алла Һүҙендә хаҡлыҡ,
Тыңла йырымды, халыҡ.
Бер эштә генә ашыҡ,
Иман юлына һин сыҡ.
Иман юлы булыр тар,
Шул юлдан ғына һин бар.



* * *

Шатлығым артыр шунда,
Йөҙҙән берәү аңлаһа.
Иман юлына сыҡһа,
Аҙашҡанмын тип тапһа,
Хоҙайым ылыҡтырһа,
Иманға яҡынайтһа.

* * *

Бөйөк Алла – Ул берәү,
Иманлыға Ул терәү.
Бөтә нәмә – Алланан,
Күренмәгән, тын алған.
Данлармын мин, туҡтамам,
Туҡтатыр мине Аллам.

* * *

Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ,
Тыйған емеш – ашамлыҡ.
Татлы емеш күп бында,
Тыйыл, һин гонаһ ҡылма.
Язаһын бирҙе Аллам,
Ер ҡәһәрләнде алдан.

* * *

Насип итһен тик ожмах,
Иретһен йөрәктә таш.
Бойһоноу кәрәк беҙгә.
Тик Алланың Үҙенә,
Йәшәгән сакта ерҙә,
Уның изге Һүҙенә.

* * *

Көн дә шиғыр яҙҙыра,
Эргәмдә тора Алла.
Данла, ти, мине бала,
Мәрхәмәтең киң, Алла.
Ҡыл күпере Хоҙайҙа,
Хеҙмәт итегеҙ Уға.

* * *

Алла ҡоло булығыҙ,
Иманда һеҙ тороғоҙ.
Тоғро хеҙмәт итегеҙ,
Яҡтылыҡта йөрөгөҙ,
Мөхәббәт Аллаһы Ул,
Таланттарын бирер мул.



* * *

Тереклек һине данлай,
Һандуғастарың һайрай.
Йондоҙҙарың емелдәй,
Тик кеше һине белмәй.
Көн дә тик үҙен уйлай,
Нисек һуң ул оялмай.

* * *

Оялғаны бик аҙҙыр?
Иманға ынтылалыр.
Тик ҡараңғы донъяла,
Килтер уларҙы, Алла.
Ылыҡтыр Һин иманға,
Алданмағыҙ донъяға,
Ҡыҙыҡмағыҙ һеҙ малға,
Машинаға, аҡсаға.
Бар нәмә ерҙә ҡала,
Байығыҙ һеҙ иманға.

* * *

Барабыҙ беҙ Аллаға,
Ике китабы ҡулда.
"Хөкөм китабы" һулда,

"Тормош китабы" – уңда.
Иманлыға юл була,
Ожмахҡа килеп тула.

* * *

Айыра күктә Хоҙай,
Аҡланыу унда булмай.
Һарыҡтарҙы уң яҡҡа –
Керә улар ожмахҡа.
Кәзәләрҙе һул яҡҡа –
Мәңгелек һүнмәҫ утҡа.

* * *

Һуңламағыҙ, килегеҙ,
Хоҙайға юл белегеҙ.
Хәҡиҡәт, тормош унда,
Һынау тотабыҙ бында.
Буйһоноғоҙ Аллаға,
Ынтылығыҙ иманға.
Аллаға шөкөр!

*01.04.06.*



## ҠУРАЙҘЫ БИРГӘН ХОҘАЙ, ДАНЛА, БАШҠОРТ, ТУҠТАМАЙ!

Үлән булып үҫкән ҡурай урманымда,
Һеңдергән ҡоштар һайрауын алһыу таңда.
Елдәр иҫкән, кипкән ҡурай, моң ағылған,
Ишеткәндер ата-баба шул сағында.

Ҡолаҡ һалып тыңлағандар был ауазды,
Тәбиғәттең мөғжизәһен өҙөп алды.
Йөрәктәге моң-һағышты башҡорт һалды,
Ел өргәндәй, һулыш өрҙө, көйөн тапты.

Ошо ҡурай моңдарына йыр яҙылды,
Башҡорт йыры оҙон көйлө булып ҡалды.
Һүҙен яҙҙы халҡым үҙе йөрәгенән,
Тарих яҙып алып була һүҙҙәренән.

Күңелдәрҙе дәртләндерә ҡурайында,
Бейер башҡорт ҡанатланып шул сағында.
Илата ла, йыуата ла ҡайғы килһә,
Яу сапҡанда ҡурай моңо еңеү бирә.

Еребеҙҙә үҫә ҡурай, Хоҙай бирҙе,
Иман ҡайтты, башҡортобоҙ "Алла" тине.
Онотмайыҡ Йомабайҙы, Сәйфулланы,
Ҡурай данлар, ҡурайсының көйө ҡалды.

Ҡурайсылар илде данлай, милләтемде,
Байраҡҡа ла ҡурай тажы төшөрөлдө.
Быуындарға тапшырылһын ҡурай Ерҙә,
Матур булып үҫһен йәштәр илебеҙҙә.

Хәйбуллалар ҡурай уйнай, көйөн һайлай,
Иманда торайыҡ тиеп, ерен данлай.
Илһам бирһен тик Хоҙайым был алышта,
Еңеп сыҡһын дала көйө был ярышта.

Ҡурай уйнай уландарың, тыңла халыҡ,
Иман һүҙе – Хоҙайыңда ғына хаҡлыҡ.
Кил Аллаңа, иман менән генә йәшә,
Тереклек тә данлай Уны йәнәшәңдә.

Тирә-яҡты байҡа бөгөн, тамашаһы,
Ҡоштар һайрай баш осонда, көн яҡтыһы,
Көндөҙ ҡояш, төндә йондоҙҙар яҡтырта,
Һин дә, кеше, яҡтылыҡ бул был донъяла.

Яҡтылыҡты иманыңда табырһың һин,
Ҡурай аша Хоҙайымды данларһың һин.
Ҡурайҙы ла Аллам биргән, елен өргән,
Башҡорт уҙаманы килеп шуны өҙгән.

Өҙөп алған, көйөн һалған ҡурайын да,
Башҡорт телендә йырлаған алһыу таңда.



Мираҫ булһын, быуындарға өләшәйек,
Һәр өйҙә лә ҡурай моңон тергеҙәйек.
Аллаға шөкөр!

*28.04.06.*

## АЛЛА ҺҮҘЕ ҮТКЕР ҠЫЛЫС

Алла һүҙен тыңлағыҙ,
Уҡығыҙ һәм аңлағыҙ.
Унда ғына яҡтылыҡ,
Донъя бит ҡараңғылыҡ.
Иманда йәшә, бала,
Гонаһтан ҡас донъяла.

Изге Рух бирә Хоҙай,
Гонаһтарҙы таҙалай.
Алла һүҙе яҡтылыҡ,
Йәнгә бирә тыныслыҡ.
Яманлыҡҡа ул ҡылыс,
Гонаһҡа ҡаршы алыш.

Аяуһыҙ был донъяла,
Дуҫың булыр тик Алла.
Тик Уның һүҙе еңде,
Кеше дошманы еңде.

Көс бирә һиңә Хоҙай,
Йәнеңде бир – Ул һаҡлай.

Ҡулыңа бирә ҡылыс,
Үҙең тоторға тырыш.
Үткер булһын ҡылысың,
Һүҙендә тор Хоҙайҙың.
Алыш ғүмер буйына,
Тәндә йәнең булғанда.

Иманда булыр һулыш,
Туҡталыр бер саҡ һуғыш.
Йәнең тәндән сыҡҡанда,
Аллаға ул юл тотһа,
Иманда булһаң һин саф,
Мәңгелек йәшәү, ожмах.
Амин!

*28.04.06.*

## СӘСӘН ҺҮҘЕ

Һүҙ буған тәү Аллала,
Һүҙҙән яралған донъя.
"Бул" тигәндән ярала,
Әҙәм атам һәм Һауа.



Һүҙ менән йәшәй халыҡ,
Тик Һүҙҙә генә хаҡлыҡ.

Һүҙҙе әйтә сәсәндәр,
Тура һүҙҙе сәсәләр.
Яманлыҡҡа уҡ булыр,
Гонаһҡа ҡаршы торор.
Тик көслө Алла һүҙе,
Ҡараңғылыҡты еңде.

Иман Һүҙе сәсәндә,
Яҡтылыҡ, нур сәскәндә.
Дөрөҫ юлға сығарыр,
Алла Һүҙендә торор.
Юлын күрһәтер Үҙе,
Иманың булһын тере.

Алла Һүҙе ҡотҡара.
Упҡындан тартып ала.
Ҡеүәтлә, йырым, Алла,
Һүҙеңде Үҙең данла.
Телемә бир һин далан,
Изге иттең һин балаң.

Сәсәндәр көйгә һала,
Йырымдың һүҙен аңла.
Алланың Һүҙен данла,

Яктылыкта бул, бала.
Тәүфиғын бирһен Хоҙай,
Гонаһтан Һүҙ таҙалай.

Сәсәндәр һүҙен тыңла,
Тыныс бул һин донъяла.
Иманға юл тот, бала,
Эргәңдә һинең Алла.
Бөйөк Алла – ул берәү,
Алла Һүҙе – Ул терәү.
Амин!

*28.04.06.*

## ЮЛДАШ КАНАЛЫНДА ЯҢҒЫРАҺЫН ШИҒЫРҘАРЫМ – АЛЛАНЫ ДАНЛАҺЫН

Мөғжизә күрәм көн дә,
Тормошом көҙгөһөндә.
Яҙҙы шиғырҙы "Сәләм",
Инде "Юлдаш" та килгән.

Данла Алла Һүҙеңде,
Иблис бит еңелде.
Еңде уны Хоҙайым,
Камил минең иманым.



Белһен ерҙә кешеләр,
Күптәр тәүбәгә килер.
Юлын күрһәтер йырҙар,
Аллам биргән шиғырҙар.

Янғыраһын изге һүҙ,
Әйттең миңә, балам, түҙ.
Сабырлыҡ бирҙе миңә,
Хеҙмәт итәмен һиңә.

Үҙгәрт мине, Хоҙайым,
Тыңлаусан мин булайым.
Мәңгелек бит тик һиндә,
Һинеңсә булһын миндә.

Һинең ихтыяр булһын,
Телдә ауыҙлыҡ торһон.
Һөйләһен изге һүҙҙәр,
Даныңды күрһен күҙҙәр.

Тормошомдо алып бар,
Уйҙарыма аҡыл һал.
Бир һөйләүҙә ҡыйыулыҡ,
Алла һүҙендә байлыҡ.

Иманға һин ылыктыр,
Иманһыҙҙар балыктыр.

Аулайыҡ беҙ уларҙы,
Упҡындан һүҙ ҡотҡарҙы.

Аңлатайыҡ уларға,
Гонаһлы булғандарға.
Улар алтын, ҡойола,
Күтәр уларҙы, Алла.

Ишетһендәр һүҙеңде,
Емер ҡая ишекте.
Һин, Аллам, бөйөкһөң,
Иманһыҙға ишекһең.

Шул ишекте тапһындар,
Иманға ылыҡһындар.
Яманлыкты ҡуйһындар,
Тере һыуға туйһындар.

Тере һыу – Алла һүҙе,
Мәрйәмгә төшкән Үҙе.
Донъяла Ул йәшәгән,
Үҙе үлеп терелгән.

Ҡөрьән иҫбатлай быны,
Сәләм бирегеҙ Уға,
Ғайса Мәрйәм улына –
Алла һүҙе шул була.



Эргәңдә генә тора,
Ул хәҙер тере Алла.
Гонаһтарҙан ҡотҡара,
Йөрәгеңә ал ғына.

Ғәфү ит, Хоҙай, тиһәң,
Гонаһтарым ал минән.
Һин минең өсөн үлгән,
Өс көндән һуң терелгән.

Таҙартыр һине Алла,
Оло Ҡорбан Ул ғына.
Ҡаны изге Хоҙайҙың,
Таҙартыр аҡыҡ, йәнең.

Ожмах ишеген аса,
Иблис һинән ҡаса.
Көс бирә һиңә Хоҙай,
Изге Рухы һағалай.

Яктылыҡ һиндә йәшәр,
Доғаларың килешер.
Үҙгәртер һине Алла,
Һин хәҙер Уға бала.
Амин!

*05.05.06.*

## НУРЗЫЯ АПАЙҒА, ХЕҘМӘТ ИТҺЕН ТИП ХОҘАЙҒА

Алтмышың дауам итә,
Ғүмер ҙә бик тиҙ үтә.
Ағын һыу ул йылғала,
Йәшәмәһәң иманда,
Йөҙөң бор һин Хоҙайға,
Тормош үтһен файҙаға.

Ҡояш, ай, йондоҙҙар ҙа,
Тау, һыулы йылғалар ҙа,
Бөтә йәнлек, сәскәләр,
Тын алып үрсегәндәр.
Алла барын иҫбатлай,
Бул иманда һин, апай.

Иманлылар эсмәйҙәр,
Һүгенеүҙе белмәйҙәр.
Буштан-буш рәнйемәйҙәр,
Донъяға көнләшмәйҙәр.
Һүҙгә үпкәләмәйҙәр,
Иман һүҙен һөйләйҙәр.

Һүҙеңдә тор, апайым,
Эсмәҫмен тип әйткәйнең.
"Ҡуярмын мин, бирәм дә,



Нурыяны кейәүгә" –
Тигән һүҙең бар ине,
Инде йәшә тик динле.

Оло апаһың беҙгә,
Кәңәшеңде ҡор гел дә.
Тыңлар бөтәһе һине,
Иманда булһаң ине.
Хоҙай һинең терәгең,
Иманлы бул, теләгем.

Үҙең бул һин иманда,
Тапшыр ғүмерең Хоҙайға.
Яҡты юлдан атлата,
Күңелдәрҙе таҙарта,
Доға ишетә Алла,
Эргәңдә генә тора.

Башҡортса доға ҡылыу –
Йәнең гел тыныс булыу.
Йәннәт ишеген аса,
Гонаһ бығауын ала.
Хоҙай ғына таҙарта,
Упҡындан тартып ала.

Ҡыл күпере – Хоҙайға,
Килегеҙ һеҙ иманға,

Йәшәгән сакта Ерҙә,
Үлгәс һуң була гүрҙә.
Яуап ала тик Алла,
Хөкөм Батшаһы унда!

Һынау тотабыҙ бында,
Булайыҡ беҙ иманда.
Ваҡытлы йәшәү ерҙә,
Ҡайтырбыҙ микән Үргә.
Йәннәткә ынтылыуың,
Гонаһтан таҙарыуың.

Дин менән генә булмай,
Иманға кил һин, апай.
Ышанып кил Аллаға,
Алла Һүҙе – Хоҙайға.
Упҡын аша күперҙе,
Ташлаған Алла Һүҙе.

Ожмахҡа килеү серен,
Белә бит һуң киленең.
Көн дә йырын яҙҙыра,
Эргәңдә тере Алла.
Хоҙайым Алла Һүҙе,
Мәрйәмгә төшкән Үҙе.

Үпкәләмә шиғырға,
Һүҙҙәр ҡала ҡағыҙҙа.



Ләкин һин уйлап ҡара,
Юл ҡайҙа алып бара.
Аллаға юл булыр тар,
Шул юлдан ғына һин бар.
Амин!

*02.05.06.*

## БОРАЛМАҪ МИНЕ БЕРӘҮ,
## ТИК ХОҘАЙ МИҢӘ ТЕРӘҮ

Тар юлдан барамын,
Тере минең иманым.
Йөрәктә – Хоҙай Үҙе,
Тере бит Алла Һүҙе.

Тән ауырыр, ул балсыҡ,
Гонаһлы булды һәр сак.
Ҡандан килә бит гонаһ,
Тик Ғайса – Изге Илаһ.

Алла Һүҙе данланды,
Түгелде изге Ҡаны.
Гонаһтарҙы ялманы,
Ҡоткарыу юл һалды.

Һатып алды гонаһты,
Мәңгелеккә юл асты.

Үлеп терелде Хоҙай,
Кил һин Уға һуңламай.

Оло Ҡорбан бирелде,
Алла бәрәсе үлде.
Ҡубарылып терелде,
Яуызлыҡты Ул еңде.

Ҡабул ит Хоҙайыңды,
Ғайса Мәсих Алланы.
Тәүбә ит гонаһтарҙан,
Таҙартыр йәнеңде ҡан.
Ғәфү итеү Хоҙайҙан,
Уның изге ҡанында,
Ғәфү ит мине, тиһәң,
Таҙарта Ул бөгөндән.
Амин!

*22.09.06.*



# ЙӨКМӘТКЕ


Хоҙайымды данлайым........................................................3
Алла һүҙе.............................................................................4
Хоҙайҙы эҙлә, әҙәм...............................................................9
Нимә ул гонаһ?....................................................................10
Аллам ҡоло Фәтхиәгә мәҙхиә...........................................13
Туғандарыма иман һүҙе.....................................................15
Ҡөрьәндә иман һүҙҙәре......................................................17
Хәйбуллаға – 75.................................................................19
Аллам һаҡлаһын Ниязҙың йоҡоһон...................................22
Киленемә Алла Һүҙе тураһында........................................23
Иманға Зиннурымды Үҙең килтер, Хоҙайым...................24
Иман юлында Хәйбулла.....................................................26
Алла бирһә.........................................................................29
Аллаға шөкөр......................................................................31
Иманлы пәйғәмбәрҙәр........................................................32
Алла һаҡлаһын...................................................................34
Балсыҡтан яралған Әҙәм....................................................35
Иманға юл..........................................................................36
Алланы эҙлә.......................................................................39
Иманлы түгел, гонаһлы тыуа кеше....................................45
Тәүбәгә кил........................................................................49
Инжилдә иман нуры...........................................................52
Доға көсө............................................................................54
Кеше бул иманлыҡта..........................................................57
Хоҙайым – ҡыл күпере.......................................................59
Ғайса һине ярата................................................................61
Амин!..................................................................................62
Ғәфү ит, Хоҙайым, кисер гонаһым....................................64
Ахры заман.........................................................................66
Яңы тормош бирә Хоҙай....................................................68

Рус һәм башҡорт дуҫлығы 450-гә тулды......................70
Ашыҡ иманға, гонаһлы бала..........................................72
Иманлы булып тыумай, гонаһлы тыуа бала...............77
Юрама гонаһ, бул иманда..........................................82
Алланан тыуғандарға Иблис уғы ҡағыла...................85
Урын алды Алла йөрәгемдә..........................................86
Данлаһын Хоҙайҙы тереклек........................................91
Ҡәһәрләмә, Алла ҡушмай...........................................92
Иман һүҙе.......................................................................94
Оло Ҡорбан....................................................................100
Балыҡсы бул, тине Аллам..........................................105
Мин яратам Алланы....................................................110
Ваҡыт етте иманға.......................................................113
Иманһыҙҙың күҙе йомоҡ – япҡан ҡорма,
Оло ғазап иманлының һүҙен ҡаҡма........................124
Изге Рух бирә миңә көс.............................................132
Нухты һайлаған Алла.................................................135
Ҡотҡарыусым Һин – Хоҙайым..................................141
Атам тейем Аллаға.....................................................158
Сабырлыҡ бирә Хоҙай...............................................171
Өгөт-нәсихәт имандан................................................173
Хоҙайым кисерә..........................................................178
Көтөүсем бар донъяла...............................................179
Һөйләрмен башҡортома Алла һүҙе тураһында.....182
Тере һыу – сарсағанға, Икмәк ул аслыларға..........192
Телем данлаһын Һине Аллаһы Тәғәләне..................194
Алла ишекте аса..........................................................196
Телемде, илемде данлайым, Хоҙайым!.....................200
Теле барҙың – иле бар...............................................201
Аманат..........................................................................203
Ғәфү итегеҙ, туғандар..................................................207
Айырма, Ғайса, доғаңдан..........................................210
Йырым данлаһын Алланы.........................................212
Иманда бул, Юлиә.......................................................214
Тере Хоҙай күңелдә.....................................................216
Кеше тәүбәһен тик Хоҙайым ҡабул итеүсе...........218
Алла Һүҙе саҡыра иманға һәр бәндәне был
гонаһлы донъяла.........................................................220
Иманға кил, бала, Аллаға..........................................223
Йомшаҡ балсыҡ булғым килә Аллам ҡулында 226
Ураҙа – Алланы данлауға.........................................229
Мәңге йәшәү – Хоҙайҙа, Уның изге ҡанында......233
Ҡатын-ҡыҙҙарға иман һүҙе......................................236
Хоҙайым минең байрағым!........................................238
Мөнәжәт........................................................................241
Доғаңда нығыт, Аллам.............................................243
Изге һүҙ.........................................................................244
Мәсихселәр кемдәр улар? – Аллаға тоғро
ҡолдар!.........................................................................247
Иманға ынтылығыҙ!....................................................252
Ҡурайҙы биргән Хоҙай, Данла, башҡорт,
туктамай!.....................................................................261
Алла Һүҙе үткер ҡылыс..............................................263
Сәсән һүҙе.....................................................................264
Юлдаш каналында яңғыраһын шиғырҙарым
Алланы данлаһын.......................................................266
Нурзыя апайға, хеҙмәт итһен тип Хоҙайға............270
Боралмаҫ мине берәү, Тик Хоҙай миңә терәү.....273